ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4-10 март (буранай) 2023

№8 (1050)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ НАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Балаларым...**



туған телле

2

**Үҙен яратмаған ҡатын-ҡыҙҙы...**



башҡалар ҙа күҙгә элмәйҙәр

8-9

**Шағирәлек һәм уҡытыусылыҡ...**

Улар нисек бер тәртәлә һыйышып йәшәй ала?



10-11

**Ни менән мәшғүлдәр?**



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!* **Мартта ПР905 индексլы "Киске Өфө" гәзитенә 2023 йылдың икенсе яртыһы өсөн ваҡытынан алда *800 һум 10 тингә* яҙыла һәм квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, матур китаптар менән бүләкләнә алаһығыҙ. Кемдәр йылдың беренсе яртыһы өсөн яҙылмай ҡалған, улар *17 мартҡа* тиклем ҡалған өс айға *399 һумға* яҙыла һәр гәзитебеҙҙе апрелдән алдыра башлай ала. Бергә булайыҡ!**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ҡатын-ҡыҙға мәҙхиә-маҡтау һүҙең ниндәй булыр?

***Әғләм ШӘРИПОВ, биология фәндәре докторы, Бөрйән районы:*** Ҡатын-ҡыҙҙың бар бәхете, бар шатлығы, бар ҡыуанысы, бар булмышы, бар матурлығы, бар серлелеге уның ҡатын-ҡыҙ булыуындалыр. Беҙ күпме генә аңларға тырышһаҡ та, ул барыбер беҙҙең өсөн сиселмәҫ сер булып ҡалыр, моғайын. Шуныһы ҡыҙыҡ, был серлелек уның бала сағында әллә ни күҙгә ташланмай ҙа кеүек. Тап урамды киң итеп уйнап йөрөгән балалар араһында ҡыҙ бала үҙ тиҫтер малайҙарынан әллә ни айырылмай. Бына шул ҡыҙ бала әллә ни арала буй еткереп үҫеп етә. Һәм килешле күлдәк кейеп, матур яулыҡ ябынып ала ла, илаһи затҡа әйләнә лә ҡуя. Бына ошо мәлдә кисә генә бергә уйнап йөрөгән шуҡ малайҙар уны тәү күргәндәй аптырап ҡала. Кисә генә бергә уйнап йөрөүҙәре, ә бына бөгөн уның эргәһенә яҡын барырға ла баҙнат итмәй тороуҙары үҙе бер сер түгелме ни ул!

Шуны әллә ҡайҙан һиҙеп торған был илаһи зат тиҫтерҙәре яғына бер генә күҙ һирпеп ала ла, серле күҙ ҡараштарын ергә төбәп йәшерә һала. Шунан көләмһерәй бирә лә, ауыҙ ситтәрен килешле генә итеп устары менән ҡаплай төшә. Улар аптырашып торған арала итәгәтле генә атлап өйҙәренә табан юл ала. Аптырамалы инде. Бына ошо серле ҡараштан оҫҡан бер генә оҫҡон кисә генә гәмһеҙ уйнап йөрөгән шуҡ малайҙарҙы ошо мәлдә үк егеттәргә әйләндерә. Бына был хәл Хоҙайҙың хикмәтендәлер ул.

Бына бер мәл йәш ғаилә тормош ҡороп ебәрә. Ә тормош, бәхетиһен, көн һайын үҙ һынауҙарын ебәреп кенә тора икән. Ваҡыты менән шундай мәлдәр була: тормош йөгөн яңы ғына тарта башлаған йәш ир бер мәлгә баҙап ҡала. Хатта уның һынып китер, нишләп миңә күтәрә алмаҫтай һынауҙар бирәһен, тип өмөтһөҙлөккә бирелгән мәлдәре лә була. Ығы-зығылы донъяның уты һүнер мәлдәр еткән мәлдә лә ҡатын-ҡыҙ үҙендә ниндәйҙер көс, иренә дәрт бирерлек кәрәкле һүҙҙәр таба. Әше менән алға ынтыла. Бына ошо мәл йәш ирҙең күңелендә өмөт сатҡылары янып китә. Һәм был ғаиләнең тормош усағы яйлап киренән дөрләй башлай. Йәш ғаилә нығына, тормош һынауҙарына бирешмәй алға табан ынтыла. Йәш ғаилә башлығын тормошта сынығҡан ышаныслы ир итеү өсөн бындай илаһи көс ҡатын-ҡыҙға ҡайҙан килә лер инде, бына быныһы беҙҙең өсөн асылмаған сер булып ҡалыр, моғайын.

Ә шулай ҙа Аллаһы Тәғәлә был ығы-зығылы тормошто лайыҡлы үтер өсөн биргәндер ул беҙгә ҡатын-ҡыҙҙы, тип уйлап ҡуям мин.

БАЛАЛАР ҠОРО

# ЗАМАН ҠЫҘҘАРЫ ЛА...

## өйөбөҙ йәме булыр



"Өйҙөң йәме - ҡатын-ҡыҙ", ти. Ә бөгөн беҙ Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты йәме булған һылыу ҡыҙҙар Илгизә Йәрмөхәмәтова, Розалина Мөхәмәтйәнова, Алтынай Атанғолова менән заман һәм ҡатын-ҡыҙ, матурлыҡ тураһында әңгәмәләшәбеҙ.

**➔ 8 Март - Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө етеп килә. Был дата нимәгә бөйлө барлыҡҡа килгән һәм һеҙҙең өсөн ниндәй байрам ул 8 Март?**

**Р. Мөхәмәтйәнова:** Февраль революцияһы, забастовкалар башланып киткән сакта ҡатын-ҡыҙҙар ҙа үҙ хоҡуҡтарын даулап, демонстрацияларға сыға. Улар эш шарттарын яҡшыртыу, эш хаҡын арттырыу, тормоштарында төрлө яҡтан тигеҙлек, тиңлек тәьмин итеүҙе талап итә. Бөгөн бына шулай яулап алынған тигеҙлек иң юғары нөктәгә күтәрелгән: ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәр кеүек йорттар һала, төрлө транспортты ла йөрөтә, эшләйҙәр, шәхси эшен дә асалар. Йәмғиәттә ир-егеттәргә һәм ҡатын-ҡыҙҙарға мөмкинлектәр шулай тигеҙ бирелгән, әммә ғаиләләрҙә барыбер ҙә ҡыҙҙарҙы ҡурсалау, ауыр эш ҡушмау, ир ҡатыны, буласаҡ әсәй итеп тәрбиәләү менталитет һымаҡ һаҡланып ҡалған. Ҡатын-ҡыҙ йортҡа ҡот бирә, ир-ат мал таба, тип баралар. Мин XXI быуатта ҡатын һәм ир араһында партнерлыҡ мөнәсәбәттәре өҫтөнлөклө булырға тейеш, тип иҫәпләйем шулай ҙа. Бөтә нәмәне бергә эшләргә: уртаҡ бюджет тотоу, бергә ашарға бешереү, балалар тәрбиәләү дөрөҫөрәк юлдыр.

Ә инде 8 Март байрамына килгәндә, минең өсөн ул яҡты, шатлыҡлы бер көн. Ул көндә атайым әсәйебеҙгә, миңә һәм һеңлемә сәскәләр бүләк итә. Әсәйҙең йөҙә балҡып, аш-һыу яраштырырға керешә һәм ул байрамды шундай матур кәйефтә үткәрәбеҙ.

**И. Йәрмөхәмәтова:** Байрам көндө гимназияла булһаҡ, класташыбыҙ Урал һәр беребеҙгә шиғырҙар бағышлап һөйләй, күмәгебеҙгә бер һауыт шоколад бүләк итә. Уның шулай күңелебеҙҙе күреп тороуына бик рәхмәтлебеҙ. Ә инде ауылда булғанда 8 Март иртәһендә атайҙың аш бүлмәһендә бешеренеүенән таралған тәмле еҫкә уянып китәм, ул беҙҙе ҡотлай, әсәйгә гөлләмә бүләк итә. Әсәйҙең сәскәләрҙе күреп йөҙө нурланып китә, бөтә өйгә шундай яҡтылыҡ һибелгәндәй була, байрам кәйефе барлыҡҡа килә. Шундай тылсымлы көн минең өсөн 8 Март.

**А. Атанғолова:** Беҙҙә лә был байрам иртәһе шулайыраҡ башлана. Атайымдың һирәк кенә, әммә фәрештә ҡанатын тығып торғандай, телде йоторлоҡ итеп бешергән аштарын ошо көндә тәмләйбеҙ. Ғәҙәттә, ул шешлек ҡурып, буранлы көн булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙе Һаҡмар буйына алып барып ҡайта. Күренеүенсә, хәҙер был байрамды башҡасараҡ аңлайбыҙ. Әммә йәмғиәтебеҙҙә бөгөн дә хоҡуҡтар тигеҙлеге көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала: тик гүзәл заттарҙы ғына түгел, ир-егеттәрҙе лә ҡыҫырыҡлаған осраҡтар бар. Һәр саҡ баланс һаҡланһын өсөн ике яҡ та бер-береһенә тәрән ихтирамлы мөнәсәбәттәрҙә булырға тейештер ул. Был йәһәттән беҙҙең гимназияла тәрбиә яҡшы ҡуйылған: малай-ҡыҙҙар бөтәһе лә йәне теләгән йүнәлештә белем ала, түңәрәктәрҙә шөғөлләнә, уҡытыусылар араһында ла айырып ҡараусылар юҡ. Хатта ҡыҙҙар ҡурай түңәрәгенә лә йөрөй.

(Дауамы 6-сы биттә).

12+

ИР-ЕГЕТ ҺҮҘЕ

# ӘСӘЙЕМ ТӘРБИӘҺЕ



**Минең өсөн ҡатын-ҡыҙ өлгөһө - әсәйем. Ул үҙе эшлекле, үҙе сибәр, балаларын матур итеп тәрбиәләп үҫтергән әсәй, атайыма тоғро ҡатын булды. Кемдәр минең матур сифаттарыма иғтибар итә, әсә телендә лә һөйләшә белеүемде хуплап, маҡтап та ебәрә икән - был әсәйемдең тырышлығы.**

Әсәй мине яратып, наҙлап үҫтерҙе. Мин дә уны бик яраттым, уны ҡатын-ҡыҙ идеалы итеп ҡабул иттем. Шуғалыр ҙа, тормош иптәшемде лә уға оҡшатып эҙләнем. Әле күптәр, ҡатынның хәс тә йөҙө менән әсәйеңә оҡшаған бит, тип әйтә. Улар ысынында холоҡтары, булмыштары менән дә оҡшаштар. Ҡатыным бик тыныс холоҡло, әсәйем дә шундай булды, ғүмерҙә лә әрләшеп-талашып йөрөмәне.

Мин балалар баҡсаһына йөрөмәнем, өләсәй тәрбиәһе алып үҫтем. Ул бик сая, көслө характерлы ҡатын ине. Олатайым һәләк булып ҡалған, ә өләсәй дүрт балаһын яңғыҙы аяҡҡа баҫтырған, колхозда бригадир булып та эшләгән. Уның саялығы әсәйемә лә күскәйне. Әсәй ҡулына ҡамсы тотоп, ауыл буйлап атта һыбай сабып үтһә, кешеләр: "Алла һаҡлаһын, бындай килен кәрәкмәй", - тип тороп ҡалыр булған.

Уларҙың миңә иң ҙур бүләге - әсәм теле, башҡорт теле, тип әйтә алам һәм бының өсөн уларға бик рәхмәтлемен. Әлбиттә, бында үҙе урыҫ милләтле булыуға ҡарамаҫтан, башҡорт халҡына оло хөрмәт менән ҡараған атайымдың да роле ҙур: ул, балаларҙың теле тәүҙә башҡортса асылырға тейеш, тигән талап ҡуйған. Шуға мин мәктәпкә барғансы тик башҡортса ғына һөйләшеп йөрөнөм. Атай-әсәй гастролдәрҙә саҡта ауылға өләсәйгә алып барып ҡалдырырҙар ине. Ә Ейәнсурала, теләйһеңме-юҡмы, башҡортса ғына һөйләшергә тура килә ине. Бына шул телде яҡшы өйрәнеүгә этәргес булды ла инде. Юҡҡа ғына балаға тәрбиәне биш йәшенә тиклем биреп өлгөрөргә кәрәк, тимәйҙәр бит: туған тел ана һөтө менән сабый саҡтан аңға һеңә. Башҡортса белеүем миңә ғүмер буйы ярҙам итте.

Бөгөн үҙебеҙ ҙә балаларыбыҙға башҡорт телен өйрәтергә тырышабыҙ. Тик хәҙер ауылға ҡайтһаң, төнгө уйындан өйҙәренә таралышҡан йәштәрҙең, урамда уйнап йөрөгән балаларҙың телен вата-емерә русса һөйләшеп маташыуын ишетеүе күңелде бер аҙ ҡыра. "Үҙ телегеҙҙән оялмағыҙ", - тип әйтке килә шуларға. Әсәйҙәргә лә: "Балаларығыҙҙа туған телен һәм халҡын яратыу тойғоһон сабый саҡтарынан тәрбиәләгеҙ, улар үҫкәс тә ошо һөйөүҙе күңелдәрендә йөрөтһөн һәм һис кенә лә кәмһенмәһендәр", - тип әйтәм.

Ә инде етеп килгән Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө айҡанлы тәбриклəп, барығыҙға ла сәләмәтлек, аяҙ күк йөҙө һәм гел шулай ир-егеттәр өсөн терәк, яңы бейеклектәр яуларға дәртләндереүсе көс, ғүмеребеҙҙең ҡояшы булып ҡалыуығыҙҙы теләйем!

**Вячеслав ГОЛОВ,**
**"Вечерняя Уфа" гәзитенең баш мөхәррире.**

ӘСӘЙ ҺҮҘЕ

# БАЛАЛАРЫМ...

## туған телле



Бөгөн мине әсәй булараҡ, башҡорт балаларының үҙ туған телен белмәүе ныҡ хафаға һала. Башҡорт исемле балалар күбәйә, быныһы ҡыуаныс, әммә уларҙың күбеһе - "телһеҙ". Мин үҙем Учалы районының Бөйҙө тигән ҡасабаһында тыуып-үҫтем. Атайым - физика, әсәйем рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләнеләр һәм беҙ өйҙә башҡорт теленең үҙ төбәгебеҙгә хас диалектында һөйләшһәк тә, мин русса фекерләй инем. Шул тиклем бала саҡтан ижадҡа тартылыу көслө булды, әммә минең ошо һәләтем асылып китә алманы. Үҙемә ышанмай ҙа инем, эргәмдә ундай уҡытыусылар ҙа булманы. Һәләтһеҙ, көсһөҙ итеп тоя инем үҙемде.

Башҡорт классиктарын да русса уҡыным: "Өс таған" түгел - "Таганок", "Илсе ҡыҙы" түгел - "Дочь посла" һ.б. Шулай ҙа мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәресе бар ине һәм 10-сы класта мин Рауил Бикбаевтың "Халҡыма хат" әҫәрен уҡыным. Башҡорт телендә. Фантазиям шәп эшләй, унда һүрәтләнгән батырҙар, уларҙың нисек итеп туған тел өсөн көрәшеүҙәре, уларҙың телдәрен ҡырҡыуҙары, ауыҙҙары тулы ҡан икәнен күҙ алдыма килтерәм. Ни өсөн аңлы рәүештә баланды теленән яҙҙыраһың, тигән фекер минең күңелемә һеңеп ҡалды, үҙемде лә таныным унда һәм бер нисә ай буйына шаңҡып йөрөнөм. Ошонан һуң атайым менән әсәйемә, мин телде ныҡлап өйрәнәм, тип әйттем. Һуңлап булһа ла, туған телем асылыуын ныҡ теләй инем. Минең бәхеткә, Учалыла БДУ-ның филиалы асылып, унда башҡорт-рус филологияһы йүнәлешендә лә белем бирә башланылар. Мәктәпте көмөш миҙалға тамамлағас, мин ошо факультетҡа уҡырға индем. Башҡорт-рус һүҙлеге минең ҡулдан төшмәне. Лекцияларҙан ҡайтам да, һүҙлекте ҡулға алып, уны яңынан күсереп яҙам, яңы һүҙҙәрҙе ятлай ҙа барам.

Уҡытыусы булып эшләгәндә телмәрем шымарҙы. Бер ваҡыт аңлап ҡалдым: башҡортса фекерләйем икән дәбаһа! Мәрйәм Бураҡаева "Арғымаҡ" китабында яҙғанса, туған телендә уйлай икән, баланың баш мейеһенең ике ярымшары ла эшләй. Минең бала саҡтан тышҡа бәреп сыға алмай йөрөгән күп һәләттәрем дә бит туған телгә, асылыма әйләнеп ҡайтҡандан һуң асылып китте! Башҡорт донъяһына тартылыуым шул тиклем көслө булған, хатта бала аҡылым менән, башҡорт ҡыҙҙары ҡара күҙле, ҡара ҡашлы була тигән ҡараш буйынса, күҙҙәрем ҡара булһын ине, тип хыяллана торғайным. Ә минеке - йәшелдәр...

Үҙ башымдан ошо һынауҙарҙы кисергәндән һуң балаларымды ундай яҙмышҡа дусар итеү юҡ бит инде! Ирем Динар Сафин менән алты бала үҫтерәбеҙ, Учалы ҡалаһында йәшәйбеҙ. Балалар баҡсаһында, мәктәптә русса һөйләшһәгеҙ ҙә, өйҙә мотлаҡ башҡортса аралашабыҙ, тигән талап ҡуйғанбыҙ балаларға. Йәнһүрәт ҡарағылары килгәндә төрөк, инглиз, француз, ҡаҙаҡ телендәгеләрен дә ҡуябыҙ, сөнки сит телдең һүҙҙәрен отоп өлгөрмәйҙәр, мөхит булмағас, уларҙы ҡулланып һөйләшмәгәс, хәтерҙә лә ҡалдырмайҙар. Ә русса ғына йәнһүрәт, фильм ҡараһалар, ул тел бөтөн ерҙә яңғырағас, тиҙ генә телмәргә инеп тә китә.

Башҡорт мөхитендә ниндәй бәйге була, барыһында ла ҡатнашабыҙ. Әле һуңғыларынан "Тамыр" каналы үткәргән "Атайсал. Беҙҙекеләр" республика медиапроекттар бәйгеһендә Гран-при яуланыҡ. Был телде лә үҫтерергә ярҙам итә. Ул беҙҙе яңы шөғөлгә йәлеп итте, медиаконтент эшләргә өйрәнеп, һуңғы арала ошо юҫыҡта камиллашабыҙ.

Унан һуң, өй эсендәге бөтөн нәмә лә бында башҡорт ғаиләһе йәшәй икәнен белдереп торорға тейеш, тип иҫәпләйем. Ҡорамалар, келәмдәр ҡорауым, кейемдәр тегеүем, урын тартҡылары яһауым - былар барыһы ла ошо маҡсатҡа хеҙмәт итә.

**Альбина ҒӘЛИЕВА,**
**күп балалы әсәй.**
**Учалы ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? *Катын-кыҙға мәҙхиә-мактау һүҙең ниндәй булыр?*

***Әлфир БАЙЫМОВ, Башҡортостандың Силәбе өлкәһендәге даими вәкиле:*** Яҙҙың тәүге һәм иң күркәм байрамы - 8 Март алдынан гүзәл заттарға әйтергә теләгән һүҙҙәрем түбәндәгесә булыр.

Һәр бер йорттоң йылылығын ҡатын-ҡыҙ булдыра. Ир-аттарҙы бөйөк эштәргә этәреүсе лә, уның уңыштарын да, көйөнөстәрен дә бергә күтәреүсе, атай булыу бәхете бүләк итеүсе, донъяның йәмен үҙендә туплаусы ла ул - ҡатын-ҡыҙ. Беҙ, ирҙәр, матур һүҙҙәрҙе әйтеп, хистәрҙе артыҡ күрһәтеп бармайбыҙ, ләкин ошо йылылыҡ, аңлаусанлыҡ өсөн янибыҙҙағы гүзәл заттарға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙа рухи көстөң ныҡ булыуына һоҡланам. Хисле булыуҙары, аҡыл менән эш итә белеүҙәре, үҙҙәре лә маҡсатҡа ынтылыусан һәм шулай уҡ ир-егеттәрҙе лә ҙур эштәр башҡарырға рухи көс бирә белеүҙәре менән аптырата ла, һоҡландыра ла улар. "Көсһөҙ зат" тиһәк тә, уларҙа ниндәйҙер ныҡлы үҙәк бар, һәм ниндәй генә хәлваҡиға килеп тыуғанда ла, ошо үҙәк уларҙың үҙҙәрен генә түгел, ә эргәләрендә булған һәр кемде айыҡ аҡыл менән эш итергә мәжбүр итә. Был иҫ киткес күренеш.

Бөгөнгө көндә үҙаллы, көслө, төрлө өлкәлә лә ҙур бейеклектәр яулаған ҡатын-ҡыҙҙар күп. Шулай уҡ ниндәйҙер вазифалар артынан ҡыумайынса, үҙен бары тик өйөнә, иренә һәм балаларына бағышлап йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа етерлек. Уларҙың һәр ҡайһыһы был фани донъяла үҙенең күңеленә яҡын урынды табыуы менән бәхетле.

Хөрмәтле ҡатын-ҡыҙҙар! Һәр ир-егет үҙенең янында уның эшен күтәрмәләп, күңелен үҫтереп торған әсәһе, ҡатыны булыуы менән бәхетле. Бөтә ир-егеттәр исеменән һеҙгә беҙҙең тормоштарҙы йәмләп йәшәүегеҙгә, йөрәк йылығыҙ менән бүлешеүегеҙгә рәхмәт һүҙҙәребеҙҙе еткерәм. Тормош юлығыҙ матур ваҡиғаларға бай булһын!

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәйҙә бакалаврҙар дипломын тулы юғары белем тураһындағы дипломға тиңләйәсәктәр. Рәсәй Президенты ярҙамсыһы Адрей Фурсенко ошо хаҡта белдерҙе. Кәрәк булған осраҡтарҙа дипломда белгестең бакалавр икәнлеге күрһәтеләсәк, шулай ҙа был тулы юғары белем иҫәпләнәсәк. Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәтнамәһендә юғары белемдең база системаһына кире әйләнеп ҡайтыуҙы тәҡдим иткәйне, вуз йәмәғәтселеге был инициативаны дөрөҫ тип баһалай.

✓"БР Тыуған яҡты өйрәнеүселәр йәмғиәте" төбәк йәмәғәт ойошмаһы Рәми Ғариповтың тыуыуына 90 йыл тулыуға бағышланған сайт булдырҙы. Республика Башлығы грантына булдырылған проекттың партнерҙары - Башҡорт телен үҫтереү һәм һаҡлау фонды, Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапхана. Сайт өҫтөндә эшләгәндә шағирҙың балалары Гөлнара һәм Азамат Ғариповтар ҙа ҡатнашҡан.

✓Башҡортостан Мәғариф министрлығы бөтөн фәндәрҙән дә БДИ һәм төп дәүләт имтиханына әҙерлек буйынса онлайн-консультациялар ойоштора. Улар республиканың электрон мәғариф порталында үтә. Консультациялар БДИ буйынса һәр шишәмбе, кесаҙна көндәҙгө 3-тән 5-кә (28 февраль - 16 март), төп дәүләт имтиханы буйынса шаршамбы, йома көндәҙгө 3-тән 5-кә тиклем (1 - 22 март) була. Шулай уҡ имтихандарға әҙерләнеү барышында тыуған һорауҙарҙы БДИ буйынса gia11@rcoi02.ru, төп дәүләт имтиханы буйынса gia9@rcoi02.ru электрон почтаһына ебәрергә йәки ошо консультациялар ваҡытында бирергә була.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы чайлдфри идеяһын пропагандалауҙы тыйыу тураһындағы закон проектын Дәүләт Думаһына ҡабаттан тәҡдим итте. Парламенттың "Балаларҙы сәләмәтлегенә һәм үҫешенә зыян килтереүсе мәғлүмәттән һаҡлау тураһында"ғы Федераль закондың 5-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" федераль закон проектының был икенсе редакцияһы, беренсе вариантындағы техник характерҙарғы ҡайһы бер иҫкәрмәләр яңынан эшләнгән.

✓Былтыр Башҡортостан таможняһы хеҙмәткәрҙәре республикаға законһыҙ рәүештә индерергә әҙерләнгән 162 мең контрафакт продукцияны асыҡлаған. 2021 йыл менән сағыштырғанда, был 6 тапҡырға күберәк. Бындай продукцияның күпселеге маркировкаланмаған кейем, аяҡ кейеме, аксессуарҙар, шул иҫәптән мобиль телефондар. Зыян күләме 100 млн һумға баһалана.

БЫЛ АЙҘА...

**Бөйөк Рәмиебеҙ яҙ миҙгелен зарығып көтөүен "Яратам, яҙ, күкрәп килеүеңде! Һинән йәнләнмәҫ йән һирәктер..." тип шиғыр юлдарына һалған. Эйе, һәммәбеҙ ҙә көтә был миҙгелде, ни тиһәң дә, яҙ - яңырыу, ҡышҡы оҙайлы эңерҙән уяныу, яҡтылыҡ һәм йәнләнеү мәле.**

# ЯҢЫРЫУ МИҘГЕЛЕ



Мартта көн яҡтыһы февралдәгенә ҡарағанда ике сәғәттән ашыуға оҙая. Ә шулай ҙа ысын яҙ буранай тулғағынан һуң ғына тыуасаҡ әле. Мартта - шарт, тигәндәй, унының аҡман-тоҡманы ла бар бит. Синоптиктар был хаҡта өндәшмәһә лә, яҙҙың тәүге айында һалҡынса көндәрҙең йылы һауа ағымы менән сираттлашып килеүен, нигеҙҙә, болотло көндәр өҫтөнлөк итеүен күҙаллай. Уртаса һауа температураһы көндөҙгө сәғәттәрҙә минус 4-7 булһа, төндәр һалҡынса, минус 6-15 градус булыуы көтөлә, ти улар. Һәр ваҡыттағыса, "кирегә һаплаусы" сығанаҡтар буранайға ла ғәҙәттән тыш "холҡһоҙ" сифаттар юрай: боҙло ямғыр, ҡаты һыуыҡтар, буранлап ҡар яуыу ихтималлығы көтөлә, ти улар. Росгидромет хеҙмәткәрҙәре лә бындай тотороҡһоҙ һауа торошо ихтималлығын инҡар итмәй: Мәскәүҙән алып, Урал һәм Себер төбәктәренә тиклем был миҙгел өсөн һуңғы тиҫтә йыл эсендә күҙәтелмәгән минус 20 градустан алып, аръяғына Магадан, ЯНАО, Тыва һәм Камчаткала - 30, Таймыр менән Яҡутстанда көслө ел-буранлы 45 градусҡа тиклемге һалҡындар вәғәҙәләй.

Һуңғы йылдарҙағы тәбиғәт һәм климат аномалиялары беҙҙе борсой ҙа, ғәжәпләндерә лә. Билдәле даирәләр тарафынан климат алышыныуын ғына түгел, тәбиғәт стихиялары, ер тетрәүҙәр, һыу баҫыуҙар һәм шул уҡ ваҡытта кешелектең дөйөм ҡиммәттәр сиген аша атлауын, аяуһыҙлыҡ, әхлаҡһыҙлыҡ һәм агрессия, бер-беренә ҡарата күрәлмаусанлыҡ күренештәре "ахырзаман етә башлауы" менән аңлатыла. Фән ғилеме иһә планетабыҙҙа барған аномалияны һуңғы ваҡыт Ер шарының үҙ күсәре тирәләй әйләнеш тиҙлеген арттырыуы менән бәйләй. Планетаның бындай "ҡылығы" эҙемтәһе былтыр 29 июндә тарихтағы иң ҡыҫҡа көн булараҡ теркәлде, ти Бөтә Рәсәй техник һәм радиотехник үлсәмдәр фәнни-тикшеренеү институты ғалимы Виталий Пальчиков. Ә бит бығa тиклем Ер шары тиҙлеге, киреһенсә, әкренәйә бара ине. Шул сәбәпле хатта 1970 йылдарҙа төҙәтмә сиктәрендә 37 секунд өҫтәп индерелә, ә бөгөн, былай барһа, 2028 йылға бер секундты алып ташларға ла тура киләсәк.

Халыҡ-ара Ер әйләнеше хеҙмәте күҙәтеүҙәре буйынса, планета йылдан-йыл шәберәк әйләнә һәм яңы рекордтар ҡуя. Ер ниңә, ҡайҙа "ашыға" һуң, бының сәбәптәре ниҙә - ғалимдар, үкенескә күрә, был һорауға тәғәйен генә яуап бирә алмай. Ҡайһы берҙәренең фаразлауынса, бында боҙлоҡтарҙың иреүе сәбәпсе булып тороуы ихтимал, сөнки туңған һыу күләмлерәк. Ә инде бөтөн донъя йылыныу һөҙөмтәһендә улар ирей һәм планета йыйнаҡлана төшә, ә был Ер әйләнешен тиҙләтә, имеш.

Әгәр бер заман, тәүбә әстәғәфирулла, Ерҙә тәүлек оҙайлығы 20 сәғәткә тороп ҡалһа, ни буласаҡ? Планета тағы ла шәберәк әйләнәсәк һәм унының эҙемтәһе булараҡ, экватор илдәрен һыу баҫасаҡ, тип фаразлай белгестәр. Унының ҡарауы, төньяҡ илдәрҙә эсәр һыу ҡытлығы килеп тыуасаҡ. Өҫтәүенә, тектоника үҙгәреүе ҡитғаларҙа туҡтауһыҙ ер тетрәүҙәргә, вулкандарға сәбәп булыуы бар.

Ҡурҡыныс фильмдарҙағы кеүек булып киттеме? Тынысланығыҙ: һәр хәлдә Ер артабан да үҙ әйләнешен йылына 1,5 милли секундҡа тиҙләтә килгән хәлдә лә, тәүлек ваҡытын 4 сәғәткә ҡыҫҡартыу өсөн 9 миллионлап йыл кәрәк булыр ине. Ә шулай ҙа теоретик ғәмәлдә был ғәләмәттәрҙең яҡын йылдарҙа булмауына кем гарантия бирә ала? Әгәр Еребеҙҙе һаҡламаһаҡ, тирә-яҡ мөхитте шаҡшыларса бысратыуҙы дауам итһәк... Өҫтәүенә, ер тетрәтер ҡеүәтле, бар тереклекте юҡ итер ядро ҡоралдары менән ярышһаҡ, маҡтанышһаҡ?.. Ер-әсәбеҙ былай ҙа ауыр һулай, үрәпсей, ҡуш аяҡлап, күсәрен тибеп онтарҙай булып саба кеүек. Әйтерһең дә, үҙ өҫтөндәге бөтөн бысраҡлыҡты, яманлыҡты, боҙоҡлоҡто иңенән һелкетеп ташларға теләй... **31 март -** Ерҙе һаҡлау көнө айҡанлы һүҙ булды был.

**Буранайҙа билдәләнәсәк байрам һәм иҫтәлекле көндәр:**

Башҡорт ғаиләһе көнө **(1)**, Бөтөн донъя яҙыусы, Ҡырағай тәбиғәт көндәре **(2)**, Бөтөн донъя балалар телевидениеһы һәм радиоһы **(5)**, Теш табибы **(6)**, Бәрәкәт кисе **(6-нан 7-нә ҡарай)**, Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар **(8)** көндәре, Рәсәй архивтары **(10)**, Наркотиктарҙы контролләү органдары хеҙмәткәрҙәре **(11)**, Бөтөн донъя математика **(14)**, Сауҙа, Бөтөн донъя ҡулланыусыны яҡлау **(15)**, Һалым полицияһы; Ҡырымдың Рәсәйгә берләшкән көнө (2014), Һыу аҫты моряктары; Сауҙа, халыҡты көнкүреш хеҙмәтләндереү һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ эшсәндәре **(19)**, Башҡорт Автономияһы тураһында Эшсе-крәҫтиән хөкүмәте менән Башҡорт хөкүмәте араһында Килешеүгә ҡул ҡуйыла **(20 март 1919)**, Халыҡ-ара бәхет көнө **(20)**, Бөтөн донъя шиғриәт; Халыҡ-ара Наурыз; Халыҡ-ара урмандар көндәре **(21)**, Бөтөн донъя һыу ресурстары **(22)**, "Яңы юл", 1961 йылдан "Ағиҙел" әҙәби-нәфис һәм ижтимағи-сәйәси журналдың беренсе һаны баҫылып сығыуға - 100 йыл (1923), Рамаҙан айы - Ураҙа башлана **(23)**, Рәсәйҙең мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре **(25)**, Бөтөн донъя театр **(27)**, Ерҙе һаҡлау **(31)** көндәре.

**Буранайҙа тыуғандар:**

**1 -** БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе, юридик фәндәр докторы, профессор **Константин Толкачевҡа - 70 йәш** (1953).

**3 -** шағирә, журналист, "Шоңҡар" журналының тәүге баш мөхәррире, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Таңһылыу Ҡарамышеваға - 75 йәш** (1948).

**8 -** тележурналист, "Тамыр" балалар телерадиостудияһын ойоштороусы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Луиза Фархшатоваға - 70 йәш** (1953).

**10 -** режиссер, 1998-2014 йылдарҙа Салауат башҡорт драма театры директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Наилә Сәфәрғоловаға - 60 йәш** (1963).

**14 -** радиожурналист, Рәсәйҙең - атҡаҙанған мәҙәниәт, БРҙың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты **Тәнзилә Үлмәҫбаеваға - 60 йәш** (1963).

**18 -** ҡурайсы, актер, йырсы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Ш.Бабич премияһы лауреаты **Рәсүл Ҡарабулатовҡа - 55 йәш** (1968).

**20 -** прозаик, журналист, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Сабир Шәриповтың тыуыуына - 75 йыл** (1948-2018).

**25 -** күренекле йәмәғәт һәм дин эшмәкәре, ишан, педагог-мәғрифәтсе, Нәҡшбәндиә тәриҡәте шәйехе, "Рәсүлиә" мәҙрәсәһен асыусы һәм унының мөҙәрисе **Зәйнулла Рәсүлевтың тыуыуына - 190 йыл** (1833-1917).

**27 -** билдәле педагог, яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре, дәреслектәр авторы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Мәрйәм Бураҡаеваға - 80 йәш** (1943).

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ҡатын-ҡыҙға мәҙхиә-маҡтау һүҙеңниндәй булыр?

***Шайморат НӘБИУЛЛИН, Әбйәлил районы хакимиәтенең ауыл хужалығы бүлеге етәксеһе:*** Гүзәл ҡатын-ҡыҙҙарға мәҙхиәне март байрамы алдынан ғына түгел, ә йыл әйләнәһенә йырлау ҙа хата булмаҫ. Донъя тотҡаһы ир-егеттәр булһа, ошо донъяларҙы йәмләп тороусылар, йәшәүҙе бүләк итеүселәр - ҡатын-ҡыҙҙар. Уларҙағы гүзәллек, күркәмлек хатта бәләкәй генә ҡыҙсыҡта ла асыҡ сағыла. Атайҙар малайҙары менән ҡатыраҡ булһа ла, ҡыҙҙарына ҡарата мөнәсәбәттәрҙә был ҡатылыҡтың эҙе лә булмай.

Ҡатын-ҡыҙ - сер донъяһы һәм беҙ, ир-ат, ғүмер буйы ошо серҙе асырға тырышып йәшәйбеҙ. Һәм, иң мөһиме, ошо серлелек уларҙы тағы ла гүзәлерәк итә. Ҡатын-ҡыҙ йомшаҡ күңелле, һәр нәмәне йөрәгенә яҡын алыусан. Шул уҡ ваҡытта, кәрәк икән, ажғыр ҙа булырға мөмкиндәр.

Ҡатын-ҡыҙҙың тормоштағы роле ир-аттыҡына ҡарағанда бөтөнләй башҡа һәм уларҙан көсөнән килмәгәнде талап итергә лә ярамай. Ошо бер-береһен тулыландырып торған ике ҡаршылыҡ бөтә йәшәйештең асылын барлыҡҡа килтерә түгелме ни! Шуға күрә һәр кемебеҙ үҙ урынында була белеп йәшәйек тормошта: гүзәл ҡатын-ҡыҙҙар донъя йәме, ир-егеттәр донъя тотҡаһы булһын.

Байрамығыҙ менән һеҙҙе, гүзәл заттар! Именлек-һаулыҡ ташламаһын һәр кемегеҙҙе, беҙҙең хөрмәт-иғтибарға төрөнөп йәшәгеҙ был тормошта.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан аграрийҙары ауыл хужалығы продукцияһын ташыу өсөн тотонған сығымдарының дүрттән бер өлөшөнә тиклем компенсация алырға мөмкин. Агросәнәғәт комплекстары 2022 йылдың икенсе яртыһы һәм 2023 йылдың тәүге яртыһындағы сығымдарының 25 процентын кире ҡайтара ала, әлеге ваҡытта ғаризалар ҡабул ителә. Был ярҙамды Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығы "Рәсәй экспорт үҙәге" ойошмаһы менән берлектә күрһәтә, ошо маҡсатҡа 7 млрд һум бүленгән. Ғаризалар 1 ноябргә тиклем, "Мой экспорт" цифрлы платформаһында ҡабул ителә.

✓Владимир Путин Балтас районында йәшәүсе Альбина Хәйҙәршинаға "Герой Әсә" маҡтаулы исемен тапшырҙы. Альбина Хәйҙәршина 13 балаға ғүмер биргән, иң оло ҡыҙҙарына 27 йәш, унының үҙенең ғаиләһе бар. 2014 йылда Хәйҙәршиндар "Ата-әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнгәйне. "Герой Әсә" исеме 1944 йылда уҡ булдырылһа ла, 1991 йылда уны аҙаҡҡы тапҡыр тапшыралар. В. Путин 2022 йылдың авгусында был исемде кире ҡайтарыу тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Әсәләргә шулай уҡ 1 млн һум аҡсалата бүләк тә тапшыралар.

✓Былтырғы йыл һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостандың 404 компанияһы Рәсәйҙең социаль предприятиеһы исемлегенә ингәйне. Был күрһәткес буйынса республика илдә икенсе урында тора. Йыл эсендә социаль эшҡыуарҙар 19,5 процентҡа артҡан, был турала Андрей Назаров телеграм-каналында яҙҙы. Федераль реестрға ингән эшҡыуарҙар проекттарын үҫтереү маҡсатында 500 000 һумға тиклем грант ала аласаҡ. Быйыл был маҡсатта 209 млн һум бүлеү ҡаралған.

✓Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, республикала йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан үлеү осраҡтары 18 процентҡа кәмегән һәм 100 мең кешегә 658 урынына 467 тәшкил иткән. Үлем осрағына килтергән сирҙәр араһында иң йыш осрағаны - ҡан әйләнеше системаһы ауырыуҙары. Билдәләнеүенсә, төбәктең ҡан тамырҙары үҙәктәре һәм беренсел бүлексәләре заманса медицина ҡорамалдары менән йыһазландырыла, республика йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан дарыуҙар һатып ала.

ҠЫҪҠАСА

# БӘЙЛӘНЕШТӘР ШУНДАЙ

**2022 йылда Башҡортостан 112 ил менән сауҙа бәйләнештәре булдырған. Былтыр Барбадос, Камерун һәм Ямайка менән партнерлыҡ тергеҙелде.** Уның сиктәрендә алкоголь продукцияһы һәм тәүге тапҡыр Парагвайҙан дарыу һатып алынды. 2021 йыл менән сағыштырғанда сауҙа әйләнеше Ҡытай Халыҡ Республикаһы - 25 процент, Ҡаҙағстан - 20 процент, Төркиә менән 50 процентҡа, санкцияларға ҡарамаҫтан, Финляндия менән тауар әйләнеше - 5, Нидерландтар менән 2 тапҡырға артты. Башҡортостандың тәүге 10 контрагенты исемлегендә, ғәҙәттәгесә Ҡытай тора - тышҡы сауҙа әйләнешенең дөйөм күләменән 24 процент. Артабан тәүге унау иҫәбендә Ҡаҙағстан, Нидерландтар, Беларусь, Латвия, Төркиә, Һиндостан, Үзбәкстан, Финляндия һәм Германия. Тәүге ун контрагент илдәрҙән АҠШ һәм Корея сыҡты. Иран менән бәйләнештәр көсәйтеләсәк. Ағымдағы йылда Иранға рәсми визит әҙерләнә, шулай уҡ был илдә Башҡортостан вәкиллеген асыу планлаштырыла.

✓ **Халыҡ-ара туған тел көнөндә Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала туған тел буйынса дәреслектәр тураһында һөйләшеү уҙҙы.** Авторҙар тиҙҙән белем биреү усаҡтарына барып етәсәк яңы пособиелар менән таныштырҙы. Балалар баҡсалары өсөн "Башкортостан - моя Родина", башҡорт телен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының мәҙәниәтен өйрәнеү өсөн "Афарин", өндәрҙе дөрөҫ әйтеү өсөн дидактик альбом һәм эш дәфтәрҙәре, балалар баҡсалары өсөн туған телде өйрәнеү буйынса электрон дәреслектәр - ошолар рәтендә. Милли китапхана ла туған телдәрҙе өйрәнеүгә ҙур өлөш индерә. Китапханала Ельцин исемендәге төбәк үҙәге эшләй, унда гуманитар йүнәлештәге бөтөн материалдарҙы уҡып була. Сибай, Стәрлетамаҡ, Салауат гимназияларының был үҙәккә ситтән тороп инеү мөмкинлеге бар. Мәғариф министрлығының Милли мәғариф идаралығы етәксеһе Илдус Ҡаһарманов билдәләүенсә, йәмғиәттә белем усаҡтарының методик әсбаптар менән тәьмин ителешен, ошо юҫыҡтағы проблемаларҙы барыһы ла ҡыҙыҡһынып күҙәтә. "Мәғариф системаһының полилингваль системаһы үҫеше өсөн шарттар тыуҙырыу өсөн барыһын да эшләйбеҙ", - тине ул.

✓ **Торатау түбәһенә 482 метр оҙонлоҡтағы хәүефһеҙ баҫҡыс төҙөү быйыл 1 майға тиклем тамамланасаҡ. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республиканың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Рөстәм Афзалов хәбәр итте.** Уның әйтеүенсә, тейешле тикшереү үткәрелгән. "Уның ябай төҙөлөш түгеллеген аңлайым. Хәүефһеҙлек һәм экология мәсьәләләре лә бар, ләкин баҫҡысты 1 майға асыуға етерлек ваҡыт бар", - тип белдерҙе Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, республиканың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры сығышына өҫтәп. Маршрутта ял өсөн эскәмйәләр ҡуйыласаҡ, яҡтыртыу мәсьәләһе хәл ителә. Һаулыҡ мөмкинлектәре сикле туристар, мәҫәлән, коляскалағы инвалидтар ҙа түбәгә күтәрелә алһын өсөн шарттар булдырыласаҡ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БУЛАСАҠ ИЛСЕЛӘР МЕНӘН



**Ҡыштың һуңғы көнөндә Радий Хәбиров илдең баш ҡалаһында Мәскәү дәүләт халыҡ-ара мөнәсәбәттәр университеты студенттары менән осрашты һәм уларға лекция уҡыны.**

Илдең иң абруйлы тип һаналған уҡыу йортонда, нигеҙҙә, дипломаттар әҙерләнә, шуға күрә дәүләт башлығы сығышын Башҡортостан миҫалында Рәсәй төбәктәренең тышҡы иҡтисади эшмәкәрлегенә бағышланы, был эшмәкәрлектең хоҡуҡи нигеҙҙәренә ентекле туҡталды. "Һуңғы өс йылда беҙ тышҡы иҡтисади секторҙы үҫтереү буйынса әүҙем эшмәкәрлек алып барабыҙ. Тышҡы сауҙа әйләнешендә экспорт өлөшө 80 проценттан түбән төшкәне юҡ. Бөгөн экспорттың өстән ике өлөшөн энергетика сеймалы булмаған экспорт алып тора. Урта һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡ тауарҙарын ситкә сығарыуҙы арттырабыҙ, - тине Радий Хәбиров. - Былтырғы йомғаҡтар буйынса, тышҡы сауҙа әйләнеше 0,5 процентҡа, шул уҡ ваҡытта экспорт - 10, импорттың аҡсалата күләме 12,1 процентҡа артҡан". Башҡортостан Башлығы билдәләүенсә, Башҡортостандан иң күбе (55 процент) экспорт Ҡытай, Нидерландтар, Ҡаҙағстан, Латвия, Төркиәгә оҙатыла. Былтыр республика донъяның 112 иленә продукция ебәргән. Шулай уҡ ул Рәсәйгә ҡарата ҡулланылған санкциялар һөҙөмтәһендә алыш-биреш башҡарылған илдәр исемлегенең бик үҙгәрмәүен билдәләне.

Мәғлүм булыуынса, МГИМО-ны тамамлаусы дипломаттар араһында Башҡортостан вәкилдәре лә бар. Әлеге ваҡытта унда республиканан 65 студент белем алһа, Азамат Ҡолмөхәмәтов Рәсәй Эске эштәр министрлығының махсус бурыстар буйынса илсеһе, Наил Латипов - Рәсәйҙең Малайзиялағы илсеһе, Ильяс Искәндәров - Габонала илсе. Башҡортостан бөйөк илсе, совет дипломаты Кәрим Хәкимов менән дә хаҡлы ғорурлана. Ул йәш Совет дәүләтенең мәнфәғәтен Урта Азия, Көнбайыш Азия, Яҡын Көнсығыш илдәрендә уңышлы яҡлаған, заманында Советтар Союзы менән ғәрәп-фарсы донъяһы араһында яҡшы мөнәсәбәттәр булдырыуға ҙур өлөш индергән. Шуға ла Радий Хәбировтың МГИМО студенттарына сит илдәрҙә Башҡортостан вәкиле булып эшләргә тәкдим итеүе лә юҡҡа түгел. Бөгөн республикаһың Белоруссияла, Төркиәлә, Ҡаҙағстанда, Үзбәкстанда, Ҡытайҙа вәкилдәре бар. Тиҙҙән Иранда, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендә илселектәр асылыуы көтөлә. Был илдәр - тауар әйләнеше буйынса иң алдынғы 10-ау иҫәбенә инә. Уларҙа Башҡортостан вәкилдәренең эшләүе һөҙөмтәһендә сит ил инвесторҙары менән берлектә Башҡортостанда 11 миллиард һумлыҡ проекттар тормошҡа ашырыла. МГИМО ректоры Анатолий Торкунов та Башҡортостанды ҡеүәтле төбәк тип атаны һәм уның интеллектуаль ҡеүәтен айырым билдәләне.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# ӨЛӨШӨНДӨ ИНДЕР!

**Туймазы ҡалаһында "Йәнтөйәгем - Атайсал" өсөнсө муниципаль форумы үтте. Сарала Октябрьский ҡалаһы, Әлшәй, Баҡалы, Бәләбәй, Бишбүләк, Бүздәк, Йәрмәкәй, Дәүләкән, Туймазы, Саҡмағош, Шаран райондары вәкилдәре ҡатнашты.**

- "Атайсал" проектында тыуған ергә рухи ҡараш сағылыш таба. Хәҙер махсус хәрби операция ваҡытында ярҙам акцияларына ябай өләсәйҙәрҙән алып эре эшҡыуарҙарға тиклем төрлө кешеләрҙең ҡушылғанын күрәбеҙ. Кемдер ойоҡ, бирсәткә бәйләй. Кемдер республиканан алынған һалдаттар өсөн йөк машиналары, мунсалар ебәрә. Улар бөтәһе тыуған иленә ярҙам итә, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды сараның пленар ултырышында Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев һәм 5 майҙа баш ҡала "Атайсал" проектының яҡынса һөҙөмтәләре иғлан ителәсәк, тип белдерҙе.

Форум төрлө сараларға бай булды. Шуларҙың береһе сарлағы 11 райондың бизнес-шәрифтәре, алдынғы эшҡыуарҙар ҡатнашлығында үткән түңәрәк ҡор брендтарға һәм халыҡты йөләп итеүгә йүнәлтелде. Уйын рәүешендә ойошторолған фекер алышыуҙа районға ҡунаҡтар саҡырыу, туристар йөләп итеү өсөн ниҙәр эшләргә кәрәклеге тураһында һүҙ барҙы. Район вәкилдәре туризмды йөләп итерҙәй брендтарҙы барланы: Октябрьский ҡалаһында был 100-сө скважина, ике сәғәтлек күпер; Бүздәктә консерва заводы, сейә баҡсалары; Шаранда - еләк; Бәләбәйҙә - сыр; Әлшәйҙә - шәкәр заводы һәм ҡымыҙ; Йәрмәкәйҙә - һыу, этнотуризм, студенттар лагеры; Бишбүләктә байбаҡтар ҡурсаулығы. Туймазы районы бизнес-шәрифе Ирина Токарева иһә Ҡандраҡүлдә ял итеү мөмкинлектәре тураһында бәйән итте.

- Республика форумы бик ҡыҙыҡлы булмаҡсы. Унда билдәле яҡташтарыбыҙ йыйыласаҡ. Уларҙың һәр береһенең сығышын көтәбеҙ. Бөгөнгә тормошҡа ашырылған эштәрҙең дөйөм күләме бер миллиард һумға барып баҫты. Был - бик ҙур сумма һәм шуны билдәләп үткем килә: сараларға республика һәм федераль ҡаҙнанан бер тин дә аҡса бүленмәгән. Барлыҡ эштәр ҙә халыҡ башланғысы һәм яҡташтарыбыҙ иҫәбенә атҡарыла. Бөгөнгә "Атайсал" проектында Башҡортостан биләмәһендә генә түгел, ә Рәсәй Федерацияһының 20 субъектында, дүрт илдә - Австрияла, Испанияла, АҠШ-та, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендә йәшәгән 3600-гә яҡын яҡташыбыҙ ҡатнашҡан, - тип билдәләне Урал Килсенбаев.

# ҺАУА ТАҘАРЫРМЫ?

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров видеоконференция тәртибендә Стәрлетамаҡта һәм Салауатта "Таҙа һауа" федераль проектын тормошҡа ашырыу мәсьәләләренә арналған кәңәшмәлә ҡатнашты. Уны РФ Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Виктория Абрамченко үткәрҙе.**

Виктория Абрамченко һүҙҙәренсә, Салауатта һәм Стәрлетамаҡта йәшәүселәрҙән ялыуҙар килә. Вице-премьер был хәлгә аңлатма биреүҙәрен һораны. "Таҙа һауа" проектында ҡатнашыусылар исемлеге яңыртылды. Унда экологик бысраныу кимәле юғары булған ҡалалар инде. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер ҡалаларҙа һауаның бысраныу кимәле түбән, әммә бүлеп сығарылған матдәләрҙең насар есе бар. Был йәшәү шарттарына йоғонто яһай. Салауат һәм Стәрлетамаҡ - быға асыҡ миҫал, - тине Виктория Абрамченко һәм Тәбиғәт ресурстары министрлығына һәм Росприроднадзорға предприятиелар менән берлектә бүлеп сығарылған зарарлы матдәләрҙең сығанағын һәм зыян күләмен билдәләргә ҡушты.

- "Газпром нефтехим Салауат" һәм "Башҡорт сода компанияһы" Тәбиғәт ресурстары министрлығы менән төҙөгән килешеүгә ярашлы, халыҡҡа мәғлүмәттәрҙе еткерәсәкбеҙ. Предприятиелар бүлеп сығарған зарарлы матдәләр күләме йылдан-йыл кәмей. Мәҫәлән, "Газпром нефтехим Салауат" яҡын киләсәктә техник көкөрт етештерә башлаясаҡ. Был бүлеп сығарылған зарарлы матдәләрҙең йыллыҡ күләмен 5 мең тоннаға кәметергә мөмкинлек бирәсәк. Ойошмаларға артабан да бергә эшләргә һәм халыҡ өсөн уңайлы шарттар булдырырға тәҡдим итәм, - тине Радий Хәбиров.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Баш ҡаланың граждандарҙы яҡлау идаралығы начальнигы Рафаэль Әхмәтов Өфөнөң ташҡын аҫтында ҡалыу ихтималы ҙур булған райондарын билдәләне. Әгәр ҙә һыу уртаса кимәлдә (600-700 см) күтәрелә ҡалһа, яҙғы ташҡын зонаһына Дим, Киров, Ленин райондары территориялары инәсәк. Һыу максималь кимәлгә (750-990 см) күтәрелә икән, бар райондарҙың да һыу аҫтында ҡалыу ихтималы бар, уларҙа барлығы 4476 торлаҡ йорт, 1551 баҡса участкаһы иҫәпләнә. Әлегә Ағиҙел йылғаһы бассейны буйынса ҡар ҡатламында һыу запасы нормадан аҙыраҡ, ә Дим йылғаһы бассейнында 17 процентҡа күберәк.

✓Үткән аҙнала ярмалар, һөт продукттары, иттең ҡайһы бер төрҙәренә хаҡтар төшкән. Башстат билдәләүенсә, банан (+6,9 процентҡа), томатҡа (+5,5) хаҡтар күтәрелгән, ҡыяр 10,6 процентҡа осһоҙайған. Бешерелгән колбасаның уртаса хаҡы 381,29 һум (-3,3), көнбағыш майының литры - 113,26 һум (-2,2 процент). 1 процентҡа алмаларға хаҡ төшкән, дөгө лә ошо уҡ күләмгә (-0,9%), һөт 1,4 процентҡа осһоҙайған. Икмәккә, йомортҡаға хаҡтар бер аҙ күтәрелгән. Шампунь, һабын, теш пастаһы, кер йыуыу порошогына ла хаҡтар түбәнәйгән.

✓Өфөлә беренсе тапҡыр "Мунса Фест Өфө" үтте. Мунса яратыусылар "Йәшлек" бассейны эргәһенә, Ағиҙел ярына йыйылды. Унда уларҙы ҡайнар ҡоймаҡ, башҡа тәм-том, хуш еҫле сәй менән һыйланылар. Балалар командалары араһында шайба менән хоккей, конькиҙа уҙышыу, керлинг турнирҙары ойошторолдо. Фестивалдә ҡала мэры Ратмир Мәүлиев та булды һәм был сараны артабан да үҫтереүгә булышлыҡ итәсәген белдерҙе.

✓Өфөлә апрель аҙағында "Айыҡ ауыл: граждандар башланғыстары һәм социаль практиктар" төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференция буласаҡ. Уны Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы менән Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы үткәрә. Конференцияла ҡатнашыу өсөн ғаризаны 2023 йылдың 15 мартына тиклем trezvoeselo@mail.ru электрон адресҡа ебәрергә кәрәк.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ҠАР КЕМ БАШЫНА ЕТЕР?



**Өфө ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә башҡа көнүҙәк мәсьәләләр менән бер рәттән, уҙған аҙнала баш ҡалалағы криминоген хәл-торош һәм ҡар таҙартыу мәсьәләләре ҡаралды.**

Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса идаралығы штабы начальнигы Артур Хафизов белдереүенсә, 20-26 февралдә баш ҡалала төрлө кимәлдәге хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында барлығы 6036 мәғлүмәт теркәлгән. Терроризм акты тураһында 4 ялған шылтыратыу булһа, наркотик матдәләр һаҡлау һәм һатыу тураһында 13 хәбәр килгән. 200 самаһы урлашыу осрағы теркәлгән. 82 тапҡыр мутлыҡ осрағы асыҡланған. Мутлыҡ тигәндән, "Башинформ" мәғлүмәт агентлығын күҙәтеп барһаң, унда бындай хәлдәр тураһында әллә күпме хәбәр уҡырға була. Мәҫәлән, бер тәүлек эсендә республика халҡын 8-10 миллион һумға "тишек кәмәгә" ултыртыусылар ҙа бар. Халыҡты төрлө хеҙмәттәр күрһәткәндә лә, интернет аша ниндәйҙер тауар һатып алғанда ла, инвестициялау буйынса ла, банк хеҙмәткәре тигән булып та, микрозаймдар алғанда ла, социаль селтәрҙәр аша ла алдайҙар. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһынан 35 йәшлек ҡатын интернетта эш тураһында иғлан күреп, бәхетен һынап ҡарарға була һәм күрһәтелгән номерға яҙып ебәрә. Уның менән бәйләнешкә сығып, артабан ситтән тороп эшләү өсөн уҡырға теләүселәрҙе йыйыуҙары, уҡыуҙың түләүле, әммә тиҙ арала һалған аҡсаны ҡайтарып алып булыуы тураһында һөйләйҙәр. Алдаҡсыларҙың һүҙенә ышанып, ҡатын үҙен менеджер тип таныштырған кеше әйткән иҫәпкә 700 мең һум аҡса күсерә һәм... менеджерҙан "елдәр" иҫә, уның телефон номеры бикләнә. Шуға таныш булмаған (хатта таныш булған) кешеләр менән әңгәмәләшкәндә һаҡлыҡ тураһында иҫегеҙҙән сығармағыҙ һәм бушлай сырҙың ҡайҙа булғанын онотмағыҙ.

Ҡыш көнө тағы нимә мөһим икәнен әйтмәгәндә лә, белеп тораһығыҙҙыр инде. Эйе, ҡар яуыуы. Ғәҙәттә, аҡман-тоҡман мартта ҡоторһа, быйыл ул февралгә күсте, шикелле. Һәр хәлдә, ир-егеттәр байрамында башланған буран аҙна башына тиклем дауам итте лә ҡуйҙы. Ошо арауыҡта яуым-төшөм күләме 40 сантиметрға етте.

Ҡала хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Р. Хәмитов белдереүенсә, 23-26 февралдә коммуналь хеҙмәттәр көсәйтелгән режимда эшләгән. Тәүлек әйләнәһенә 500 берәмек техника һәм 550 юл хеҙмәткәре ҡар таҙартырға сыға. 27 февралдә баш ҡалала тротуарҙарҙың 73 проценты таҙартыла, һуңғы аҙнала 114 мең кубометр ҡар сығарыла. Өйҙә генә тороп, килтерелгән һандарға ышанып ултырһаң, барыһы ла ал да гөл кеүек. Әммә "Өфө ҡалаһының йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге" директоры А. Овчинников баш ҡала урамдары таҙартылғандан һуң уҙғарылған контроль тикшереү һөҙөмтәләрен килтереп, барлыҡ күрелгән сараларға ҡарамаҫтан, юлдарҙы, тротуарҙарҙы, ихаталарҙы һәм ихаталар араһындағы юлдарҙы таҙартыу төҙөкләндереү ҡағиҙәләре талаптарына тура килмәүен белдерҙе. "Үкенескә күрә, район хакимиәттәре башлыҡтары һауа торошо насарайыуына бәйле коммуналь хужалыҡтарҙың эшен әүҙемләштереү тураһындағы талапты ишетмәне һәм уны формаль рәүештә генә ойошторҙо", - тине сығыш яһаусы. Уның һүҙҙәрен ҡеүәтләгәндәй, социаль селтәрҙәрҙә Совет районы биләмәһендәге ихатала "Тиҙ ярҙам" машинаһының саҡырыуға барып етә алмай батып ултырыуы тураһында хәбәр таралды...

Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев килеп тыуған хәл буйынса кадрҙар мәсьәләһен ҡарау тураһында һүҙ ҡуҙғатты. Ҡар башына ҡар етә, тиһәләр ҙә, ҡар башына ҡар еткәнгә тиклем кемдәрҙеңдер башы "осоуы" ла ихтимал шул...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# МӘҘӘНИ КИМӘЛЕБЕҘ...

## майҙандағы тәртиптә лә сағыла

**Республиканың баш ҡалаһында ҡаһарман Миңлеғәле Шайморатовҡа ғәжәйеп монументаль һәйкәл ҡуйылыуы Өфөнө тағы ла байытты, күркәм итте. Элек Совет майҙаны еңел машиналар паркын хәтерләтһә, хәҙер ул ҡала архитектураһының иң гүзәл сағылышының береһе!**

Һәйкәл янына йыш киләм. Туризм үҫешенә лә туранан-тура йоғонто яһай был нәфис тарихи архитектураның иң шәп өлгөһө, тип ҡыуанам. Килгән һайын сит төбәк туристары менән һөйләшеп, уларҙың фекерен белешәм. Әлбиттә, ҡунаҡтарҙан тик ыңғай һүҙҙәр генә ишетәм.

Мин үҙем был майҙанда хәл ителеп бөтмәгән ҡайһы бер проблемаларға ла иғтибар итәм. Мәҫәлән, тирә-йүндә оло йәштәге ветерандарға, ағай-апайҙарға ял итер өсөн бер генә эскәмйә лә булмауы күҙгә ташлана ла тора. Икенсе күңелде ҡырып торған күренеш: ҡайһы бер Өфө кешеләре майҙанға эттәрен эйәртеп килә. Хайуан бит үҙенең хәжәтен ҡасан теләй - шунда үтәй. Шундай күренештең шаһиты булмаҫ өсөн майҙанға эттәр менән инергә ярамағанлыҡты иҫкәртеүсе табличка һәм штраф күләмен билдәләп ҡуйыу урынлы булыр ине. Был һүҙҙәрем - Өфө ҡала округы хакимиәте хеҙмәттәре иғтибарына йүнәтелә.

Ысынында, һәр кем өсөн изге урынға әүерелгән майҙандың таҙалығын һаҡлау Өфөлә йәшәгән халыҡтың да туранан-тура бурысы инде. Ошонда һәм башҡа иҫтәлекле, тарихи урындарҙа тәртип, таҙалыҡ һаҡланыуы мәҙәни кимәлебеҙҙе лә сағылдыра икәнен онотмайыҡ.

**Рәзиф ЗӨБӘЙЕРОВ.**

БАШ ҠАЛАМ



# ТУҠТАЛЫШТАР...

## ике телдә иғлан итеlә

**Һуңғы арала Өфө буйлап күп йөрөргә тура килә. Был планлаштырылмаған сәйәхәт баш ҡаланың быға тиклем күҙ уңынан ысҡынған күренештәренә иғтибар итергә, уның үҙгәрештәрен күрергә, ғөмүмән әйткәндә, үҙем өсөн яңы Өфөнө асырға булышлыҡ итте.**

Инде өс тиҫтә йыл баш ҡалала йәшәһәм дә, Шаҡша биҫтәһенән әллә ни алыҫ йөрөмәгәнлектән, ҡаланың башҡа райондарында барған үҙгәрештәрҙе бөтөнләй күрелмәгән икән. Шулай Өфө буйлап сәйәхәтемдең иң күңелемә ятҡан мәле - йәмәғәт транспорттарында туҡталыштарҙы ике телдә әйтеүҙәре булды. Матур итеп урыҫ телендә лә, башҡортса ла яңғыратып иғлан итәләр, элекке кеүек кондукторҙан йәки водителдән үҙеңә кәрәкле туҡталышты һорап йөрөргә лә кәрәкмәй.

Автобустарҙа видеоэкрандарҙа бер туҡтауһыҙ реклама роликтары өйрөлә, ләкин унда үҙебеҙҙең милли театрҙар репертуарын күрергә тура килмәне. Әллә ниндәй тун һәм дарыуҙар тураһында реклама ҡарап барғансы, спектаклдәрҙән өҙөктәр ҡуйып тороп айлыҡ афишалар күрһәтелһә ине, тигән уй килде. Әгәр бөтәһе лә аҡсаға барып төртөлә икән, театрҙарға ошондай бәләкәй генә реклама эшләү өсөн дә аҡса бүленмәйме икән ни, тигән һорау тыуа.

Инорс биҫтәһенән Октябрь проспектына Трамвай урамы буйлап сыҡҡанда, элек ниндәй бысраҡ, тығын булһа, әле лә хәлдәр үҙгәрмәгән икән. Ул урам буйлап йөрөгән трамвайҙар ҙа минең йәш саҡтағыса: ике яҡҡа асылмалы "гармун" ишекле ҡыҙыл трамвайҙар гөрләп йөрөп ята әле булһа. Әйткәндәй, ҡаланың башҡа урамдарында ла яңы трамвайҙарҙы бер нисә бөртөк кенә күрҙем, ҡалғандарын яңы тип әйтерлеге ҡалмаған. Шулай ҙа трамвай һәр ваҡыт эшкә, уҡыуға һәм башҡа төрлө йомош менән ашығыусы кешеләр өсөн иң уңайлы транспорт төрө булып ҡала килә. Ҡала хакимиәтенең уларҙы бөтөрмәйенсә, әле булһа бер нисә маршрутты тотоп килеүҙәрен хупларға ғына кәрәк, сөнки килем сығымдарҙы ҡаплайҙыр, тип уйламайым.

Үҙәккә яҡынайған һайын күп ҡатлы йорттарҙың артыуы күҙгә асыҡ сағыла. Тағы ла урамдың ике яғында ла теҙелеп киткән машиналарҙың күплегенә иҫ китте. Ҡала мәктәптәре янында машиналарҙың юл уртаһында туҡтап, башҡаларға ҡамасау булып, балаларҙы көтөүе тағы бер иҫ китмәле күренеш булды. Иртән һәм кисен ҡабатланалыр инде был хәл. Хәүефле лә, нервыны ла бөтөрә торғандыр.

Урамдың һәр мөйөшөндә, туҡталыштарҙа, парк эскәмйәләрендә, уҡыу йорттары алдында электрон тәмәке борҡотоп торғандарҙың иҫ китмәле күп булыуын күреп йөрәк әрнене. Егеттәре лә, ҡыҙҙары ла берҙәй көйрәтә, хатта бер-ике баланы ла күрергә тура килде. Ләкин шуныһы бар - элекке кеүек, урам буйында шешә тотоп йөрөүселәр юҡ, автобустарҙа ла иҫеректәр күренмәне. Бынан 20 йылдар элек был ғәҙәти күренеш була торғайны, хәҙер уның юҡҡа сығыуы һөйөндөрә.

**Айбулат ИШБУЛАТОВ.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Алма

❖ Веналарҙың варикозлы киңәйеүе осрағында алмалар ярҙам итә, бигерәк тә Антоновка сортлыһы. Уртаса ҙурлыҡтағы 3 алманы йыуып, эмалле һауытҡа һалырға һәм 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп 3 сәғәт төнәтергә. Шунан алмаларҙы иҙергә һәм һөҙөп алырға. Килеп сыҡҡан төнәтмәне көн һайын иртәлекисле 50-шәр мл эсергә. Уны һыуытҡыста һаҡларға була. Хәл яҡшырғансы дауаланырға.

❖ 2-3 ҡалаҡ киптереп ваҡланған кесерткән япрағын термосҡа һалырға һәм 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға. 30-40 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм ашағандан 1-1,5 сәғәт үткәс, стакандың өстән бер өлөшөн көнөнә 3 тапҡыр эсергә. Был ысул ауырыуҙың башланғыс осоронда һөҙөмтәле.

❖ 100 грамм онтаҡланған мөшкәт сәтләүегенә 0,5 литр араҡы ҡойоп, көн дә һелкетеп тороп 10 көн төнәтергә, аҙаҡ һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә өс тапҡыр ашарҙан алда 20-шәр тамсы эсергә. Ул бөткәс, 7-10 көнгә туҡталып торорға һәм яңынан башларға.

## Ҡарағат

❖ Нервы системаһы ҡаҡшағанда 1 ҡалаҡ ваҡланған ҡарағат япрағына 1 стакан һыу ҡойоп, талғын утта 1-2 минут ҡайнатырға, 30-40 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Уны ашарҙан алда көнөнә 3-4 тапҡыр йылы көйөнсә яртышар стакан эсергә.

## Сәсәтмә

❖ 1 ҡалаҡ ваҡланған болон туҡранбашы (клевер) үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, йылыға төрөп 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Ашарҙан 20 минут алда көнөнә 4 тапҡыр баланың йәшенә ҡарап 1-әр ҡалаҡ, йәки 2 ҡалаҡ, сирек стакан эсерергә.

## Гипотиреоз

❖ Ҡалҡан биҙе эшмәкәрлеге яйлаған осраҡта кәкүк баш (медуница лекарственная) яҙ сәскә атҡан осорҙа сәскәһе һәм япраҡтарын йыйып алырға кәрәк. Ваҡланған әҙерләмәнең 2 ҡалағына 200 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне өскә бүлеп көн дауамында эсеп бөтөргә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *"Иң беренсе уҡыуымды тамамлайым, шунан эшкә урынлашам, фатир алам, машина. Шунан ғына кейәүгә сығасаҡмын", - тинем. Атайым мине тыңлап ултырҙы ла, аптырабыраҡ: "Һиңә ир нимәгә кәрәк була инде?" - тип һораны.*

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

### Биҙәүестәрҙең нигеҙе

**Хәҙер шуларҙың һәр береһенә айырым туҡталып китәйек:**

**1.** Тула - ул йөндән һуғып, кейеҙ итеп баҫҡан туҡыма. Башҡорттарҙа тула баҫыу борондан килгән кәсептәрҙең береһе. Айырыуса көньяҡ һәм көнсығыш башҡорттарында киң таралыу алған булған. Ул кейем тегеү эшендә лә мөһим урынды алып торған. Уны, мәҫәлән, сәкмәндә, сарыҡ менән ҡатаның ҡуңыстарында йыш осратырға мөмкин. Йөндән эшләнгән был туҡыма үҙенең ныҡлығы менән айырылып торған. Тула баҫҡан ваҡытта шулай тип йырлап та алғандар:

*Тула, тула, тула ла.*
*Тулала ҡыҙҙар була.*
*Тула баҫҡан матур ҡыҙҙың*
*Ҡаштары ҡара була.*

Биҙәүестәргә килгәндә, мәҫәлән, Санкт-Петербург ҡалаһындағы Рәсәй этнография музейында һаҡланыусы боронғо һаҡалдарҙың нигеҙе тап туланан эшләнгән дә инде. Шулай уҡ Силәбе өлкәһенең Арғаяш районынан алып ҡайтылып, бөгөнгө көндә Өфө ҡалаһындағы Археология һәм этнография музейында һаҡланыусы яға ла тула нигеҙле. Учалы районындағы музейҙарҙа һәм шәхси коллекцияларҙағы яғаларҙың да күбеһе шул туҡыманан тора.

**2.** Киндер - ул һабағынан сүс, орлоғонан май алына торған тарбағай ботаҡлы бейек үлән. XVIII быуатта башҡорттарҙа киндерҙән туҡыма һуғыу киң таралған була. Был материалды ла халыҡ кейем тегеүҙә актив ҡулланған. Үрҙә телгә алынған "тамъян һаҡалы" (яҡынса 1880 йылдар тирәһендә эшләнгән) башлыса тап киндер нигеҙле булған да инде. Бары тик 1980 йылдарҙа нигеҙен яңыртырға тура килә.

**3.** Кизе-мамыҡ - ул мамыҡ еп. Шулептән һуғылған туҡымалар XVIII быуаттың икенсе яртыһында башҡорттар араһына үтеп инә башлай. Һәҙәмтәлә өйҙә эшләнгән тула һәм киндер туҡымалар яйлап ҡыҫырыҡлап сығарыла. Шуға күрә лә һуңғараҡ осорҙарҙа эшләнгән биҙәүестәрҙә тап ошо материал йышыраҡ осрай.

### Ҡор

Башҡорт әҙәби телендә "ҡор" һүҙе түбәндәге мәғәнәләргә эйә: 1. Ҡыр тауығы. 2. Оло кәңәш, һөйләшеү өсөн йыйылған йыйын. 3. Түңәрәкләп ултырған кешеләр төркөмө. Ә бына йәнле һөйләү телендә иһә был һүҙ биҙәүестәге тәңкәләр рәтен белдерә. Тарихи күҙлектән сығып ҡарағанда, ҡор - дөйөм төрки һүҙе, сөнки башҡорт теленә ҡәрҙәш булған башҡа төрки телдәренең ҡайһы берҙәрендә лә күҙәтелә. Мәҫәлән, төрөк телендә: gor - "рәт", "алтын сылбыр"; тыва телендә: ҡур - "ҡапҡа диуары". Был һүҙҙең боронғо төрки телендә "эҙмә-эҙлелек", "сират" тигәнде аңлатыуы билдәле. Бары тик башҡорт теле ерлегендә генә "биҙәүестәге тәңкәләр рәте" тигән мәғәнә үҙенсәлеге барлыҡҡа килгән.

**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

*БАЛАЛАР ҠОРО*



# ЗАМАН ҠЫҘҘАРЫ ЛА...

## өйөбөҙ йәме булыр

**(Башы 1-се биттә).**

➔ **Һеҙҙең өсөн матурлыҡ төшөнсәһенең мәғәнәһен дә билдәләп китәйек әле...**

**И. Йәрмөхәмәтова:** Һәр кем үҙенсә матур һәм ул матурлыҡ кешенең күңеленән килә. Ҡатын-ҡыҙҙың тормоштан ҡәнәғәт булыуынан да торалыр. Ҡәнәғәт кеше тормошҡа йылмайыу менән, күҙҙәренән дәртле осҡондар сәсеп баға һәм башҡаларҙың иғтибарын шулай йәлеп итә.

**Р. Мөхәмәтйәнова:** Матурлыҡ - ул гармония. Ҡатын-ҡыҙҙың күңеле лә, йөҙҡиәфәте лә уны ниндәй итеп ҡабул итеүҙәрендә ҙур роль уйнай. Ышаныслы баҫып, йылмайып үтеп барған ҡыҙға кем иғтибар итмәҫ! Шулай уҡ алсаҡ, аҡыллы, һөйкөмлө булыу ҙа матурлыҡтың мөһим сифаттары.

**А. Атанғолова:** Ә минеңсә, матурлыҡ - ул үҙеңде яратыу. Әгәр ҡатын-ҡыҙ үҙенә ваҡытты күберәк бүлә, үҙен матурлай, тойғоларын үҫтерә икән - ул үҙен ярата һәм матур була. Ундай гүзәл заттар үҙен дөрөҫ баһалай, етешһеҙлектәре өҫтөндә эшләй һәм гел генә камиллыҡҡа ынтыла. Әлбиттә, һәр беребеҙ үҙенсә матур, башҡаларға оҡшамаған.

➔ **Буянған ҡыҙҙан оялған ҡыҙ матур, тигәндәр боронғолар. Ә бөгөн был сифат көнүҙәкме?**

**И. Йәрмөхәмәтова:** Бик үк актуаль түгелдер был, сөнки заман башҡа - заң башҡа. Буяныу-буянмау мәсьәләһендә һәр кем үҙ иркенә ҡуйылған, шулай ҙа сама белгәндәр ота. Ә бөгөнгө көндә ҡыҙҙарҙың оялсанлығы бик үк яҡшы сифат түгел, сөнки бик күп мөмкинлектәрҙән ҡолаҡ ҡағырға ихтималһың. Мәҫәлән, күп кеше йыйылған берәй сара үтә икән һәм шунда кешеләрҙән оялып, бер һүҙ әйтә алмай ултыраһың икән, был - насар. Асыҡ йылмайып, кешеләр менән алсаҡ аралашып, әүҙем ҡатнашып, кәрәк саҡта уй-фекерҙәрең менән бүлешә алыуың күпкә яҡшы. Баҫалҡы булһаң, баҫырҙар, тигәнерәк мәҡәл дә бар бит.

**Р. Мөхәмәтйәнова:** Әлбиттә, бөгөн ҡыҙҙар ҡыйыуыраҡ булырға тейеш. Элекке кеүек, егеттәргә күҙен дә күтәреп ҡарарға оялырға, йәки ҡулдаҡтәре үтә оҙон булырға тейеш түгел, тип ҡырҡа белдермәйем. Сама белергә кәрәк һәм алтын урталыҡ һаҡлау шарт. Хәҙер ҡыҙҙар кареъра ла эшләй ала, һәләттәрен үҫтерә, китаптар ҙа яҙа, сәхнәгә лә сыға, ир-егет эше тип иҫәпләнгән һөнәрҙәрҙә лә үҙләштерергә мөмкин. Оялып һәм ҡурҡып торғандар был мөмкинлектәрҙә ҡулдан ыҫҡындырасаҡ. Мин намыҫҡа бәйле генә оялыуҙы ҡабул итәм. Намыҫына тап төшөргән эштәрҙә эшләүҙән оялыу, тартыныу һәр кемдә булырға тейеш.

**А. Атанғолова:** Мин дә был мәҡәл менән килешмәйем. 21-се быуатта һәр ҡатын-ҡыҙ үҙ юлын таба, яратҡан эше менән шөғөлләнә ала. Әйткәндәй, буяныу тураһында. Был үҙенде башҡаларға "бына мин шундай" тип күрһәтеүҙең бер ысулы ғына. Башҡаларға оҡшарға теләмәүҙән дә килеп сыға ул. Ә бөгөн күптәрҙең бер төрлө итеп ирендәрен бүрттереүе, ҡаштарын татуаж ярҙамында ҡарайтыуы башҡаларға ҡарағанда яҡшыраҡ күренергә теләүҙән, тип уйлайым. Был уларҙың тағы ла матурыраҡ булырға ынтылышын сағылдыра, шулай теләгәстәре - эшләтһендәр әйҙә.

**Р. Мөхәмәтйәнова:** Ә мин үтә ныҡ буянған, ирендәрен бүрттергән йәки пластик хирургия хеҙмәттәренә мөрәжәғәт иткәндәр үҙ-үҙенә ышанмаған кешеләрҙер, тип иҫәпләйем. Ундай үҙгәрештәрҙе был ысынлап та һинең ҙур кәмселегең булғанда ғына ҡулланыу урынлы. "Ҡуян ирен" менән тыуған балаларға, мәҫәлән.

➔ **Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡиәфәтенә ҡағылышлы донъя кимәлендә ҡабул ителгән матурлыҡ стандарттары менән килешәһегеҙме?**

**Р. Мөхәмәтйәнова:** Сит илдән килгән 90-60-90 стандарттары ҡыҙҙарҙың башын әйләндерә. Хатта ҡайһы берәүҙәр көнө буйы ҡыяр ғына ашай һәм 2 литр һыу ғына эсә икән, тип тә ишеткәнем бар. Бындай диеталар кеше организмына зыян ғына килтерә, шуға уның урынына спорт менән шөғөлләнеү яҡшыраҡ. Ҡатын-ҡыҙҙың күңел торошон да көйләргә ярҙам иткән йога, пилатес, бейеү кеүек шөғөлдәргә өҫтөнлөк биреү ҙә хыялланған һындарға өлгәшергә ярҙам итә. Ә инде тәм-томдо күп итеп ашап ташлаған осраҡта, һимерәм инде, тип көйөнеп ултырмаҫҡа кәрәк, икенсе юлы үҙеңде контролдә тоторға өйрәнеү яҡшыраҡ.

**А. Атанғолова:** Һәр ҡыҙ үҫмер сағында диеталар менән ҡыҙыҡһынмай булмайҙыр. Мин дә фигурам менән ҡәнәғәт булмай, спорт менән шөғөлләнә башланым һәм төрлө ысулдарҙы өйрәнгән осорҙа бер нисә төр диета ла тотоп ҡараным. Әммә был турала уҡый, мәғлүмәт туплай бара рациональ туҡланыуға өҫтөнлөк бирергә кәрәк икәнен аңланым. Ул нимә теләйһең, шуны самаһын белеп ашайһың, тигәнде аңлата. Хатта интернат шарттарында ла шулай туҡланырға мөмкин. Иң мөһиме, ашап торған саҡта, туйып етмәнем, тигән тойғо ҡалырға тейеш.

**И. Йәрмөхәмәтова:** Ваҡыты-ваҡыты менән организмды бушандырып алыу кәрәктер. Ә инде күберәк йәшелсә-емеш ашау, майлы аҙыҡтан баш тартыу кеүек ғәҙәтте яҡшы күренеш тип иҫәпләйем.

➔ **Ҡатын-ҡыҙҙар араһында дуҫлыҡ булыуына ышанаһығыҙмы?**

**И. Йәрмөхәмәтова:** Әлбиттә, ҡатын-ҡыҙҙар араһында мөнәсәбәттәр күпкә хислерәк. Беҙҙең һиҙемләүебеҙ ныҡ үҫешкән һәм бер-беребеҙҙе яҡшы аңлайбыҙ. Шуға Розалина менән 22 ҡыҙ һәм 1 генә егет булған класта миңә уҡыуы рәхәт.

**Р. Йәрмөхәмәтова:** Эйе, ҡыҙҙар ҡайсаҡ үҙ-ара һүҙгә килешеп китһәк тә, класыбыҙҙағы берҙән-бер Урал ситтән генә ҡарап, баш сайҡай ҙа ҡуя. Уның ҡарауы, беҙ үҙебеҙҙең ҡыҙҙар араһында ғына булған серҙәр тураһында иркен һөйләшәбеҙ. Беҙҙең дуҫлыҡ та ир-егеттәр араһындағына ҡарағанда ҡайһы саҡта көслөрәктер, тип иҫәпләйем. Ҡатын-ҡыҙҙар араһындағы дуҫлыҡ классик әҙәбиәттә лә матур сағылыш тапҡан бит хатта. Быны яныраҡ Александр Сергеевич Пушкиндың "Евгений Онегин" шиғри романын уҡығайным. Уйлап ҡараһың, Онегин үҙенең дуҫын шулай еңел генә үлтерә алды, ә Татьяна менән Ольга хатта үҙ-ара ирешмәнеләр ҙә, улар араһында бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ тыуманы. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре, һис шикһеҙ, бар.

**А. Атанғолова:** Ҡыҙҙар араһында дуҫлыҡ бар, бәлки, тағы ла аҡ көнләшеү ҙә булалыр. Ул "көнләшеү" бер-берендән үрнәк алыу, бер-беренә ҡарап сәмләнеп яҡшыраҡ уҡыу, һәләттәрендә арттырыу, өйрәнеү кеүек ыңғай күренештәргә этәрә.

➔ **Егеттәр булмағанда үҙебеҙҙе иркен тотабыҙ, тинегеҙ. Уларға ниндәй булып күренергә теләйһегеҙ?**

**Р. Мөхәмәтйәнова:** Өләсәйем әйтмешләй, ҡыҙ китап һымаҡ булырға тейеш: уны ир-егет һәр ваҡыт уҡырға теләп торһон. Быныһы шулай, әммә үҙенә оҡшаған егет менән аралашҡанда тауышты үҙгәртеп, матурыраҡ ултырырға, үҙеңде иплерәк тоторға тырышаһың. Ә дуҫ тип кенә күргән егеттәр менән үҙеңде ирkенерәк тотаһың.

**А. Атанғолова:** Минең класымда 19 ҡыҙ һәм 2 егет уҡый. Егеттәр эргәлә торһа, үҙеңде тыйнаҡ тотаһың инде, сөнки улар шулай тәьҫир итә һәм "Нисек барһың, тик шулай бул" тигән кәңәште тотоп булмай ҙа ҡуя. Улар беҙҙе оҡшатһын өсөн тыйнаҡлығыбыҙҙы, һылыулығыбыҙҙы, матур тауышыбыҙҙы күрһәтеп маташабыҙ. Әгәр беренсе осрашыуҙан уҡ үҙеңде әхирәттәрең араһында кеүек тотһаң, егет "Юҡ, был ҡыҙ оҡшамай", тип әйтергә мөмкин.

➔ **Бөгөн йәш ҡыҙҙар кейәүгә сығырға ашыҡмай, карьера эшләү яҡлы. Ә һеҙҙең өсөн нимә мөһимерәк тойола?**

**И. Йәрмөхәмәтова:** Мин карьераһын өҫтөнөрәк ҡуйған ҡыҙҙар яҡлы, сөнки иң яҡшы инвестиция - үҙеңдең үҫешеңә һалынғаны. 21-се быуатта иренә һәм уның эш хаҡына ғына ышанып йәшәү алйотлоҡ. Шуға күрә үҙең янып эшләгән эшең булһын гел. Ә шулай ҙа кейәүгә сығып, эшләп тә, ғаиләнә лә тейешле иғтибар, наҙыңды бүлеп өлгөрәһең икән - икеләтә шәп.

**Р. Мөхәмәтйәнова:** Бер ваҡыт атайым менән һөйләшеп ултырҙыҡ та, мин уға: "Иң беренсе уҡыуымды тамамлайым, шунан эшкә урынлашам, фатир алам, машина. Шунан ғына кейәүгә сығасаҡмын", - тинем. Атайым мине тыңлап ултырҙы ла, аптырабыраҡ: "Һиңә ир нимәгә кәрәк була инде?" - тип һораны. Әммә тормошомдо башҡаса күҙ алдыма килтермәйем, бала ҡарап, өйҙә генә ултырыу минеке түгел.

**А. Атанғолова:** Элек кенә бит ул ҡатын-ҡыҙ хужабикә, ул өйҙә балалар ҡарап, тамаҡ бешереп ултырырға тейеш, тигәндәр. Йылдар үтә тора гүзәл заттың да теләктәре, маҡсаттары үҙгәреш кисергән. Улар тормошта үҙ урынын табырға, иренән бойондороҡһоҙ булырға теләй. Ә карьера төҙөү - ул уның матди ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өсөн генә. Үҫешергә мөмкинлек бар икән, нишләп форсат менән файҙаланмаҫҡа, ти?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмә барышында: "Ысын ҡатын-ҡыҙ һынланышын кемдә күрәһегеҙ?" тигән һорауға өсәүһе лә бер тауыштан тиерлек "Әсәйемдә!" тип яуап бирҙе. Кәрәк саҡта тыйнаҡлыҡ һаҡлап шым баҫып тора, кәрәкһә, һүҙен тура ярып әйтергә, йәки ниндәйҙер эшкә тотонорға һис ҡурҡып тормаған, заманы менән бергә атлаған был гүзәлдәрҙең ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышына, матурлыҡҡа ҡараштары ниндәй генә булыуға ҡарамаҫтан, тәрбиә башы - әсәйҙәрендә, тимәк. Өйөбөҙ йәме булырҙай киләсәгебеҙҙе тәрбиәләгән бына шундай әсәйҙәргә рәхмәт.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

**Донъяла егет менән ҡыҙ, ир менән ҡатын араһында "мөхәббәт" булыуы тураһында бала сағымдан ишетеп үҫтем. Ул хаҡта бихисап хикәйәләр уҡып, кинофильмдар ҡарап буй еткереүемә ана шул төшөнсә иң ғүзәл бер хис булып, күңелемә инеп ояланы. Унһыҙ ғаилә ҡороуҙы күҙ алдыма ла килтерә алмай инем. Шул уҡ ваҡытта боронғо ата-бабаларыбыҙҙа мөхәббәтте бөтөнләйгә һанламаған "ырағай" дини йолалар ҙа булғанын ишетә торғайныҡ бит. Ана шул "кешелекһеҙ" ғөрәф-ғәҙәттәргә ярашлы, ҡыҙҙарҙы яратмаған кешеһенә үҙ ихтыярынан тыш кейәүгә биреүҙәре тураһында йыш һөйләнеләр беҙгә. Бына ошо хәлдә тик Ислам динен ғәйепләнеләр. Шундай фекерҙе аңыбыҙҙа нығытып ҡуйғас, барыбыҙ ҙа мөкиббән китеп быға ышана ла инек. Мин дә ышандым. Ә ҡыҙ менән егет алдан бер-берен һөйөшөп, тормош ҡорған хәлдә, һис шикһеҙ, бәхетле буласаҡтарына хатта шикләнмәнем дә. Шуға күрә лә, үҙ-ара татыу йәшәмәгән күп кенә ғаиләләрҙе күреп, уларҙың барыһы ла мөхәббәтһеҙ тормош ҡорғандыр, моғайын, тигән инаныуҙа булдым.**

# АЛТЫ ЕГЕТ - БЕРГӘ...

## йәғни Боронғо өләсәйҙәребеҙ ҙә хоҡуҡлы булған бит!

Әшулай ҙа боронғо башҡортта никах ҡороу мәсьәләһендә һәр саҡ тик ғәҙелһеҙлек кенә хөкөм һөргәнме икән, тигән һорау гел генә борсой торғайны. Шул хаҡта бер аҙ ғәҙәти булмағанырак рәүештә фекерләп алмаҡсымын әле. Әлеккe йырҙарыбыҙҙың һүҙҙәренә нығыраҡ иғтибар итһәң, унда ата-бабаларыбыҙҙың бөтә булған тормош нескәлектәре сағылғандай. Баштараҡ әйтеп үтелгәнсә, үҙ ихтыярынан тыш ғүзәлдәребеҙҙе тормошҡа биреү осраҡтары, әлбиттә, һис шикһеҙ булған инде. Шул турала күп кенә әҫәрҙәр ҙә яҙылған, халҡыбыҙҙың боронғо һағышлы йырҙарының легендаларында ла һөйләнелә...

Ислам дине талабына ярашлы, кейәүгә бирер алдынан ҡыҙҙың никахҡа ризалығын алыу мотлаҡ. Эйе, динебеҙ талабы был. Мин үҙем шәхсән шул турала Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) хәҙисен уҡығаным бар. Башта иҫкә алған "кешелекһеҙ" йолаларҙа шәриғәтте ғәйепләү күптәрҙең динебеҙ ҡануҙарын өйрәнмәүенән (йә өйрәнергә теләмәүенән) килә. Борон да бына ошо хаҡта белмәгән кешеләр ҙә, белгәндәр ҙә булғандыр. Дини наҙанлыҡ арҡаһында бәғзе берәүҙәрҙе улар теләмәгән никахҡа мәжбүр итһәләр, ғүзәлдәребеҙҙең күптәренә һайлау форсаты ла тейгәндер, тигән инаныуҙамын әле үҙем. Мәсәлән, халҡыбыҙҙың бер-ике йырын "тәфсирләп", анализлап ҡарайыҡ. Шуларҙың береһе "Алты егет" тип атала. Күптәр, бәлки, уның һүҙҙәренә иғтибар ҙа итмәйҙер, әммә мин бала сағымда уҡ уны ятлап алғанмын. Шаян йырҙарҙан һанала ул. Урыҫ әймешләй, һәр шаяртыуҙың дөрөҫлөк сағылған өлөшө бар. Диҡҡәт менән баҡһаҡ, ошо йырҙан да етди генә һығымталар яһарға була.

"Алты егет бергә килгән, инһендәрме, еңгәкәй? Яусыларға килгән микән, береһе бигерәк бәләкәй", - тип башланып киткән был йырҙа еткән ҡыҙҙың еңгәһе менән әңгәмәләшеүе сағылған. Ниндәйерәк кешегә кейәүгә сығырға тигән мәсьәлә торғанда, борон йәш ҡыҙҙың иң беренсе серҙәше - еңгәһе булғандыр (белеүемсә, күп осраҡтарҙа хәҙер ҙә тап ана шулай). Еңгә кеше, инде бер аҙ тормоштоң әсе-сөсөһөн татыған булараҡ, ысынлап та бикәсенә ниндәйҙер файҙалы кәңәш бирерлек хәлдә, тип ҡарайыҡ. "Алтыһы алмаҫ, береһе алыр, бәләкәйен керетмә. Бишеһенән береһен һайла, ҡалған дүртен йөрөтмә", - тип һамаҡлай шаян, әммә аҡыллы еңгәкәй. Бәләкәй егет тормошта әллә ни "эш ҡыйрата алмаҫ" тигәнгә ишаралап, уны хатта өйгә лә индермәскә кәңәш итә ул башта. Артабан әлеге еңгәкәйе яусыларға килгән егеттәрҙең һәр береһен үҙенсә ҡылыҡһырлап, бикәсенә файҙалы кәңәштәрен дә бирә башлай: "Байғужаның бисәһе бар, һайлап торма уныһын. Сурағолда бисә тормай, һайлаһаң - хур булырһың". Яусыларға килгән егеттәрҙең араһында иң олоһо - Байғужаның был ҡыҙҙы икенсе ҡатынлыҡҡа һоратырға килгәнлеге аңлашыла. Тимәк, ошо йыр сыҡҡан осорҙа халҡыбыҙҙа күп ҡатынлылыҡ киң таралған булған тип фаразлау кәрәк.



Изге Ҡөрьән-Кәримдә (кемдәргәлер оҡшап етмәүенә ҡарамаҫтан) ир кешегә Аллаһы Тәғәлә дүрт ҡатынға тиклем өйләнергә рөхсәт итә. Белеүебеҙсә, борон ике-өс ҡатын алып, уларҙы һәм һәр береһенән тыуған бала-сағаларын аҫрап торорға хәленән килгән бай ир-егеттәр ҙә булған. Бер өй эсендә аслы-туҡлы, бер-береһенә текләшеп ҡарап ултырған икән бахыр ҡатындар, тип күҙ алдына килтереү хата булыр. Был бай кешегә һәр бер ҡатынына айырым өй тотоу бурысы йөкмәтелгән. Ул ғына ла түгел, шәриғәт ҡанунына ярашлы, һәммә ҡатынға иғтибарҙы, һөйөүҙе тигеҙ итеп бүлеү ҙә тейешле. Әгәр шул ҡулынан килмәй икән, бер генә ҡатынға өйләнеү ҡушыла. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, күп кенә йәш ҡыҙҙар икенсе ҡатынлыҡҡа барыуға әллә ни ыҡтылып тормаған, күрәһең. Әлеге еңгә кеше лә бикәсенә бисәле ирҙе һайлап тормаҫҡа кәңәш итә бит. Ә киләһе егет - Сурағол. Әммә уның егет түгел, ә абышҡа икәнлеге күренә был йырҙа (абышҡа - ҡатынын айырған йә тол ҡалған ир). "Сурағолда бисә тормай, һайлаһаң - хур булырһың", тигәс, тимәк, был ирҙең холҡо самалыраҡ, бер нисә ҡатын алып, ҡабат айырып өлгөргән тип ҡарау кәрәк. Яратҡан еңгә бикәсен был абышҡанан да ҡурсалап алып ҡалырға тырыша.

Артабан Сәлихйән исемле егетҡә сират етә. Уның үтә ярлы булыуын оҡшатмаған зирәк ҡыҙ үҙе үк еңгәһенә әйтә башлай: "Сәлихйәнен һайлар инем, аты ла юҡ йөрөргә. Киске кейәүем тимәһәң, төҫө лә юҡ күрергә!" Ярлы кешегә һис кенә сыҡҡыһы килмәй ҡыҙҙын. Сөнки "йөрөргә аты ла булмаған Сәлихйән" менән йәшәү енел булмаясағын аңлай ул. Бынан тыш, һылыу ҡыҙ үҙенең бәйәһен һәүетемсә юғары баһалағаны ла һиҙелә. Егеттең төҫөн дә оҡшатмай. Совет осоро яҙмаларында революциянан алда ғүмер иткән боронғо өләсәйҙәребеҙҙе "хоҡуҡһыҙ" тип күрһәтеүҙәренә ҡарамаҫтан, тормошҡа сығыу өсөн уларҙың да күптәренең егет һайлап алырлыҡ мөмкинлеге булғандыр шулай ҙа, тип фаразлау ғәҙел булыр, минеңсә. Ана шул ҡартәсәйҙәребеҙҙең вәкиле булған был ҡыҙҙың артабан да нисегерәк һайланыуына иғтибар итәйек әле: "...Иштуғаны иш булалмай, күңелем төшмәй Хәйҙәргә. Инде, еңгәм, нишләйем һуң, берәү ҙә юҡ һайларға!" Хатта әллә ни етешһеҙлеге лә күренмәгән Иштуған, Хәйҙәр исемле егеттәрҙе лә тиң күрмәй, тимәк, ҡыҙ үҙ дәрәжәһен белә. Шуға ҡарамаҫтан, еңгәһенән "Нишләйем һуң?" тип кәңәш һорай. "Һайланған - һаҙға батҡан" тигәндәй, артыҡ оҙаҡ һайланып, "ултырып" ҡалыуҙан да бер аҙ шикләнә, буғай. Еңгәһе, аптырағас, бикәскә тағы бер кәңәш бирә: "Береһен дә оҡшатмаһаң, һайла шул бәләкәйен. Үҙең ҡарап үҫтерерһең! Туп кеүек кейәүкәйең!" Йырҙа "бәләкәй" егеттең тик кәүҙәгә генә бәләкәс түгел, ә бигерәк йәш булыуы күҙ уңында тотолоуы күренеп тора. Тормош елдәре әллә ни таушалтмаған, боҙмаған, малай ғына тип әйтерлек "саф" үҫмерҙәрҙе бәғзе ҡыҙҙар башҡаларҙан артығыраҡ күргәндер шулай ҙа (хәҙер ҙә ундайҙар юҡ түгел), тип фекерләргә булалыр. Башта һанап кителгән егеттәрҙәге һымаҡ етешһеҙлектәре булмаһа, йәш айырмаһы, бәлки, әллә ни мөһим дә түгелдер шул. Ир кешенең ҡатынына ҡарағанда хатта тиҫтәләгән йәшкә йәшерәк булған һәм уларҙың ғүмер буйы бергә татыу йәшәгән осраҡтар ҙа бихисап...

"Утһыҙ төтөн сыҡмай" тигәндәй, бына ошо йыр ҙа тиктомалдан барлыҡҡа килмәгәндер. Бик күптәр минең менән ҡапылда ризалашмауҙары ла бар, сөнки боронғо ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы һәр саҡ бошонҡо, ҡайғылы йөҙлә, күҙҙәре йәш менән тулы итеп күҙ алдына ҡуйған хикәйәттәребеҙ күпкә күберәк. Әммә минең элек йәшәгән ҡыҙҙарыбыҙҙың да бына ошондай ярайһы ғына һайлансыҡ, ҡыйыу яғын күрһәтергә ниәтем, "Быуа ниндәй зирәк, тапҡыр булған беҙҙең бәғзе боронғо өләсәйҙәребеҙ", тип әйтмәксемен.

Тағы бер миҫал өсөн "Ҡаһарман кантон" тип аталған боронғо йырҙы ла килтермәксе булам. Элек мәктәптә "Туған әҙәбиәт" дәресендә халҡыбыҙ ижадын үткәндә ошо йырҙың һүҙҙәрен уҡып, әллә ни аңлап та етмәгәйнем. Әммә йырҙа телгә алынған Шәһиҙә исемле ҡыҙҙың ни өсөн шундай "шәп" кейәүгә бармағанлығына иғтибар итә, хатта ғәжәпләнә лә инем. Аңлауымса, ул - ошо абруйлы кешенең һөйгән ҡыҙы булһа кәрәк. Кантон һынлы кантондың бай, дәрәжәле икәнлегендә шик юҡ. Әммә был ир-егеттең хәрби хеҙмәттән "штатский" кәсепкә күсеүе Шәһиҙәгә бөтөнләйгә оҡшап етмәгән, хатта ул Ҡаһарманға тормошҡа сығыуҙан баш тартҡан!.. "Буранғол улы Ҡаһарман кантон ине бер заман. Ҡылысын тағып йөрөйҙәр, кантонмын тиеп һаман. Ҡаһарман кантон ҡытатский, ник булдың штатский? Шәһиҙә һиңә барыр ине, булмаһаң штатский!.."

Борон ир-егеттәр менән бер сафта яу сабып йөрөгән сая ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ булғанлығы хаҡында ла хикәйәттәр ишеткәнебеҙ бар. Улар ҙа юҡтан ғына килеп сыҡмағандыр, моғайын. Халҡыбыҙҙа бер нисә быуат элек Бәндәбикә исемле ҡыйыу, аҡыллы ғүзәлебеҙ йәшәгәнлеге тураһында телдән-телгә күсеп һаҡланып килгән риүәйәт бар. Яҡында йәшәгән ҡаҙаҡтар менән барымта-ҡарымталарға йөрөшөп, бер-береһенең малын, ҡатын-ҡыҙҙарын ҡыуып алып китешеп йөрөгән йолалар хөкөм иткән дәүерҙә ғүмер иткән ул, тип һөйләйҙәр. Хәләл ефете Ерәнсә батырға ғына түгел, башҡаларға ла һүҙе үтерҙәй был ғүзәл затыбыҙ хатта ҡаҙаҡтар менән башҡорттар араһында татыулыҡ урынлаштырыуҙа ла ҙур роль уйнаған, имеш...

Совет заманында тәрбиәләнеп үҫкән, хәҙерге көндә олпат ҡына йәштәге ҡайһы берәүҙәр, шулай ҙа, "Борон башҡорттар ҡатын-ҡыҙҙы хатта әҙәмгә лә һанамаған бит", тип сеп-сей булып бәхәсләшергә әҙер. Ул хаҡта әреләшеп тормаҫ өсөн бөгөнгө бәғзе бер нәфис заттарыбыҙҙың хәлен миҫал итеп килтереү ҙә етә. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың ирҙәре тарафынан рәнйетелеү осраҡтары аҙмы ни бөгөн? Шул турала бик йыш ишеткәләйбеҙ ҙә баһа! Хатта ошо мәсьәлә хөкүмәтебеҙ иғтибарында ла көнүҙәк проблема булып тора бит. Көсһөҙ затыбыҙҙы, ғөмүмән, ғаилә ағзаларын яҡлаусы төрлө закондар әленән-әле сығарғылай хөкүмәт. Ҡыҙғанысҡа күрә, ғүзәлдәребеҙгә ҡарата енәйәт ҡылыусылар ҙа бар. Насар кешеләр һәр дәүерҙә лә булған, тимәксемен. Боронғо заманды артыҡ нык яманларға яратыусылар бына ошо хаҡта ла онотмаһын ине, тип әйтергә ниәтем. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы юҡҡа ғына "көсһөҙ зат" тип әйтмәйбеҙ. Улар һәр дәүерҙә лә яҡлауға мохтаж. "Көслө заттың", йәғни, ир-аттың яҡлауына мохтаждар.

Боронғо тормошто тәңҡитләүҙәргә әллә ҡасан уҡ күнегеп тә бөткәнбеҙ инде. Әммә арабыҙҙа бөгөнгө бәғзе йәштәрҙең "ирекле" йәки "граждандар" никахы тип аталған ысулды һайлап ҡауышыуын хуплаусылар булыуы үкенесле. Кем - нисек, ә мин динебеҙ талабы буйынса никахлашмаған нәфис заттарыбыҙҙы (әлбиттә, егеттәребеҙҙе лә) ғәйәт нык ҡыҙғанам. Бындай тормоштоң ни тиклем гонаһлы икәнен аңларға тырышмауҙары йәл. Дин ҡанундарын ентекләп өйрәнгән һайын, уның ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға ҡарата ифрат ғәҙел булыуына инана бараһың. Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) әсәйҙәргә, ҡатындарға, ҡыҙ балаларға иң яҡшы мөғәмәлә итергә ҡушҡан. Үҙенең ана шул рәсүле аша Ислам динен беҙгә төшөргән Аллаһы Тәғәләнең исем-сифаттарының береһе - "Әл-Ғәҙел" икәнлеген дә белеү һәм быға ихлас ышаныу кәрәк...

Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.

✓ ***Кемдеңдер күҙҙәре, сәсе, буй-һыны матур булырға мөмкин, ләкин холҡо, күңеле матур булмаһа, мин уны матур кеше тип атай алмайым. Һәм, киреһенсә, күңеле матур кеше минең өсөн иң матур кеше булып тойола.***





# ҠАТЫН-ҠЫҘҘЫ...

## күҙгә элмәйҙер

бала үҫтерергә теләгәйнем. Яҙмышым башҡасараҡ ҡарар ҡабул итте шул... Тәүге балаларыбыҙҙы - ике улыбыҙҙы - бәләкәй саҡтарында юғалтып, операциялар ярҙамында табып, ике ҡыҙ үҫтерҙек, Аллаға шөкөр! Ирем ҡыҙҙарыбыҙҙы ҡулдарынан төшөрмәй генә, әкиәттәр һөйләп үҫтерҙе, улар өсөн аталары - ир-егет өлгөһө, идеал булды. Ҡатын-ҡыҙ эштәренә үҙем өйрәттем, иртә ҡул араһына инделәр. Ауыл ерендә йәшәрлек бөтә һөнәрҙәре лә, ғилемдәре лә бар. Бәйләргә, тегергә, сигергә, ашһыу әҙерләргә минән өйрәнделәр. Бәләкәйерәк саҡта хатта шиғырҙар ҙа яҙып маташтылар. Изгелекле, ярҙамсыл, киң күңелле балаларыбыҙ, ярҙам итеп торалар. Тейәнеп ҡайтып төшәләр, һауығыбыҙҙы ла ҡайғырталар, рәхмәт яуғырҙары. Кейәүҙәрҙән уңдыҡ, үҙ балаларыбыҙ кеүектәр, уларҙы үҫтергән ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарыбыҙға рәхмәт. Ейәндәребеҙҙе шатланып ҡарашабыҙ, һағынһаҡ, Өфөгә ауыл күстәнәстәре тейәп барып күреп, яратып ҡайтабыҙ. Беҙ уларға, улар беҙгә рәхмәтле.

**Зөлфирә Ҡаҙаҡбаева:** Беҙ ҙә балаларҙы эш араһында үҫтерҙек. Мин егерме йылдан ашыу мәктәптә уҡытып, 7 йыл редакцияла эшләп, уларҙың үҫкәнен күрмәй ҙә ҡалдым, ахыры. Уның менән бергә донъя мәшәкәттәре, йәмәғәт эштәре ҡушылып бара. Шулай булһа ла мин балаларҙы бер ҡасан да күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тырыштым: өйгә эштәрен тикшереп, йыйылыштарына йөрөп, буш ваҡыттарын нисек үткәреүҙәрен ҡарап, проблемалары булһа, сисешеп, һәр ваҡыт улар менән бергә булдым. Һәләттәрен тотоп алып, үҫтерергә ынтылдыҡ. Мәҫәлән, Илзирә менән Иштуғаныбыҙҙы беренсе класстан музыка училищеһына бирҙек, береһе скрипка, икенсеһе флейта класында белем алды. Барыһы ла үҙҙәре теләгән төрлө түңәрәктәргә, секцияларға йөрөнөләр, кемеһелер спортты үҙ итте, икенселәре ҡул эшен, һүрәт төшөрөүҙе һайланы... Бәләкәйҙән ситтә уҡығас, ныҡ һағынғандарҙыр инде, ҡайһы саҡ Илзирәбеҙ үпкәләп тә ала торғайны...

Үҙем дә бала саҡтан музыка менән ныҡ ҡыҙыҡһындым, тик мөмкинлектәр булманы. Гармунда уйнарға өйрәнергә, йырларға теләгем ҙур ине. Бер мәл хатта йырсы булыу хыялы менән дә йәшәп алдым. Тик 14-15 йәштәрҙә тауыш үҙгәреш кисергән осорҙа йырлап, тауыш тембры үҙгәрҙе, ҡалын булып, йәмһеҙләнде. Ул хыялды оноторға тура килде инде... Спорт менән шөғөлләндем тиһәм, ныҡ арттырыу булыр, шулай ҙа саңғыла йөрөргә яраттым, район, зона ярыштарында призлы урындар ҙа яулағаным булды. Йүгереү буйынса иһә алдыра алманым, кластағы 22 ҡыҙ араһында иң һуңғы бишәү уртаһында килә торғайным ярыштарҙа... Әле лә саңғыбыҙ бар, тик ялҡаулыҡ көслө, бик һирәк баҫабыҙ саңғыға. Шулай ҙа ҡайһы саҡ иптәшем Рәсүл менән яйлап ҡына йөрөп әйләнәбеҙ...

**Миңзәлә Хәлилова:** Беҙ Вәрис менән Линар һәм Азат исемле 2 ул үҫтерҙек, ваҡыты еткәс, береһе МЧС ғәскәрендә, икенсеһе диңгеҙ флотында хеҙмәт итеп ҡайттылар, юрист һөнәрен һайланылар, ғаилә ҡорҙолар. Линар менән Алина киленем беҙгә Ләйсән, Кәрим, Мәликәне бүләк иттеләр, Азатыбыҙ ғаиләһендә Наҙгөл менән Динислам үҫә. Улдарыбыҙҙы хеҙмәт тәрбиәһе биреп үҫтерҙек, бер эштән дә ҡурҡып тормай, тота ла эшләйҙәр! Линарыбыҙ эшендә еткәсе взифаһын башҡара, Азатыбыҙ ҙа ғинуар аҙағында ғына Луганск өлкәһендә 4 ай эше буйынса командировкала булып ҡайтты. Икеһенең дә эш урынынан беҙгә рәхмәт хаттары килде! Ата-әсә өсөн шунан да ҙур бәхет юҡтыр! Балаларыбыҙ ғына иҫән-һау булһын!

▶ **Ниндәй ҙур вазифа-бурыстар йөкмәргә тура килһә лә, һеҙ ижад кешеһе. Ижад ниндәй урын биләй һеҙҙең тормошоғоҙҙа?**

**Наилә Хәмбәлиева:** Әсәлек, ир ҡатыны булыу - һәр ҡатын-ҡыҙҙы ғаиләһен, ғаилә мөхитен беренсе урынға ҡуйҙырта торған асыл. Минең дә тормошомда ғаиләм беренсе урында, әлбиттә. Шулай булырға тейеш тә. Әммә был ижадҡа еңелсә ҡарау тигәнде аңлатмай. Шағир ижады ла икенсе төрләрәк бит ул. Шағирҙар баш баҫып ултырып ижад итмәй. Илһам килһә - ижад бар, килмәһә - юҡ. Юҡ нәмәне баш баҫып көтөүҙән ни фәтүә? Ижад минә ниндәйҙер бурыс йөкмәтмәгән, вазифа ла тотторман. Ижадҡа һуңлабыраҡ килеүемде лә әйтеп киткәндә, беренсе урында түгел икәнлеге аңлашыла. Һәм икенсе, өсөнсө, һуңғы урында ла түгел. Ул минең булмышымда. Ижад һәр ваҡыт минең менән.

**Фирүзә Абдуллина:** Утыҙ биш йыл мәктәптә эшләү дәүерендә ябай уҡытыусы ла, директор урынбаҫары ла, мәктәп директоры ла булып эшләргә тура килде. Йәштән ижад итһәм дә, ғүмеремдең төп өлөшөндә мин ижадсы түгел, ә уҡытыусы булдым. Уҡытыусы - шул уҡ ижадсы бит ул, ләкин уның ижад емештәре - балалар. Һәр уҡыусы - таҙа дәфтәр бите кеүек, унда нимә яҙаһың - шундай кеше тәрбиәләйһең. Һәр балаға йөрәк көсөңдә һалаһың, йөрәк йылынды бүлеп бирәһең. Минең өсөн беренсе урында ғаиләм, икенсе урында эшем булды. Һуңғы ун йылда ғына ижад менән әүҙемерәк шөғөлләнә башланым. Ижад минең өсөн ғаиләм, туғандарымдан ҡала өсөнсө урынды биләй.

**Зөлфирә Ҡаҙаҡбаева:** Ижадҡа бала саҡтан тартылып, 7-8 йәштән "шиғыр" яҙып килһәм дә, ижад минең төп шөғөлөм булманы. Әлеге әйтеүемсә, эш араһында, илһам килгәндә генә ҡулға ҡәләм алып, бик һирәк яҙыштым, ул минә хобби һымаҡ ҡына ине. Балалар бәләкәй саҡта төнөн ултыра инем яҙышырға. Ә урыҡ-һырыҡ эшләү кешене бер ҡасан да уңышҡа килтермәй. Шулай ҙа Башҡортостан китап нәшриәтендә 4 проза китабым донъя күрҙе, был минең өсөн ҙур хеҙмәт! Быйылдан башлап мин хаҡлы ялдамын, хөкүмәт эшенән киткәс, ваҡыт та күбәйҙе. Күптән күңелдә йөрөп тә, яҙыр өсөн ҡул теймәгән әйберҙәрҙе ҡағыҙға төшөрөү эшенә башланым, Аллаһыма шөкөр. "Киске Өфө", "Йәшлек" гәзиттәре, "Ағиҙел", "Шоңҡар", "Башҡортостан ҡыҙы" журналдары менән ижади бәйләнеш бар, улар һәр ваҡыт минең әҫәрҙәремде тиҙ арала баҫып сығарып торалар. Форсаттан файҙаланып, уларға оло һәм ихлас рәхмәтемде еткергем килә. Һаулыҡ булһа, уй-ниәттәрем бар, эшләйһе эштәрем бихисап...

**Миңзәлә Хәлилова:** Мин бар ғүмеремде уҡытыусылыҡ эшенә бағышланым, бына 42 йыл Ҡоръятмаҫ урта мәктәбендә рус теле һәм әҙәбиәте, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләйем. Уҡытыусы эше минең тормошомда иң беренсе урынды биләне, сөнки был эште ярты-йорто ғына башҡарып булмай! Етмәһә, уҡытыусының эше өйөнә лә эйәреп ҡайта: дәфтәр тикшереү, дәрес планы төҙөү, һ.б. Ғаиләм һәр саҡ икенсе урында булды, хатта үҙемдең балаларыма ла ваҡытым ҡалмай ине. Ә ижадым йоҡо иҫәбенә барҙы, әҫәрҙәремде төнөн, барыһы ла йоҡоға киткәс, бер кем дә ҡамасауламаған саҡта яҙа инем! Уның араһында мәктәптә, ауылда, районда уҙғарылған осрашыуҙар, тәрбиәүи саралар, семинарҙар һ.б.

▶ **Нисек кенә булмаһын, һеҙ ҡатын-ҡыҙ, матурлыҡҡа ынтылыусы алиһә. Матурлыҡҡа нисек өлгәшелә?**

**Наилә Хәмбәлиева:** Матур булыу - ул хеҙмәт. Тәнеңдең бөхтәлеген, ыҫпайлығын булдырыуға өҫтәп, күңелеңдең паклығын, уйҙарыңдың сафлығын булдырыуға йүнәлтелгән көндәлек эш. Мотлаҡ шулай. Сөнки тыштан матур ҡиәфәттә булып та, кешенең күңеле тоноҡ икән, матур булыу тураһында һүҙ булыуы ла мөмкин түгел. Ҡатын-ҡыҙҙа айырыуса.

Ауыл ҡатын-ҡыҙҙарына үҙеңде тәрбиәләүгә ваҡыт етмәйерәк тә китә. Бөтмәҫ-төкәнмәҫ мәшәкәт уртаһында биткә, ҡулға крем һөртөү генә лә башҡа инмәй. Минең дә үҙемдән риза булмаған саҡтарым була. Көҙгә эргәһендә эс бошоп баҫып торған ваҡыттар юҡ түгел. Шул ерҙә тыуған ҡәнәғәтһеҙлек көстө ала. Ана шул мәлдәрҙә күңел тигән нәмә ҡотҡара ла инде. Бер йылмайыу. Таушалыбыраҡ киткән тышҡы ҡиәфәтте, күңелдән елтерәтеп килтереп сығарған шәлкем-шәлкем нур ҡалайыраҡ матурлағаны белһәгеҙ ине! Ҡараш осҡоланып китә, арҡа турая, яурын кирелә. Һеҙ үҙегеҙҙе ҡабат яратаһығыҙ. Тик һәр ваҡыт иҫтә тоторға кәрәк - үҙен яратмаған ҡатын-ҡыҙҙы бер кем күҙгә элмәй. Бына һеҙгә матурлыҡҡа өлгәшеүҙең арзан ғына бер юлы. Тик бының өсөн күңел матурлығын булдырыу һәм һаҡлау мотлаҡ. Сөнки булмағанды сығарып та булмай.

**Фирүзә Абдуллина:** "Матур матур күренмәй, һөйгән матур күренә", ти торғайны әсәйем. Матурлыҡ минең өсөн - ул камиллыҡ. Тәбиғәттәге матурлыҡҡа һоҡланам. Хайуандар, йәнлектәр, ҡоштар, бөжәктәр матур булырға мөмкин. Ә кешеләге матурлыҡты мин шартлы ғына ҡабул итәм. Кемдеңдер күҙҙәре, сәсе, буй-һыны матур булырға мөмкин, ләкин холҡо, күңеле матур булмаһа, мин уны матур кеше тип атай алмайым. Һәм, киреһенсә, күңеле матур кешенең тышҡы ҡиәфәтенә мин битараф, ул минең өсөн иң матур кеше булып тойола. Үҙемдең ҡиәфәтемә лә мин артыҡ иғтибар бирмәйем, ләкин тирә-яғымды матур итергә тырышам. Был минең күңел торошом өсөн мөһим. Әгәр ишек алдымда төрлө ағастар, матур сәскәләр үҫә икән, минең кәйефем дә күтәренке була, мин һоҡланам, шатланам, кинәнес алам. Эргә-тирәләге матурлыҡты беҙ үҙебеҙ тыуҙырабыҙ. Тегергә, сигергә, бәйләргә яратыуым да ошо матурлыҡты үҙ ҡулдарым менән тыуҙырырға маташыуымдың бер төрлө сағылышылыр, моғайын.

**Зөлфирә Ҡаҙаҡбаева:** Был һорауға яуабым юҡ. Мин үҙемде матур итеп күрһәтеү өсөн бер нәмә лә эшләмәйем! Нисек бармын, шулай ҡабул итһендәр, тием. Шул уҡ ваҡытта Әсә тигән бөйөк вазифа йөкмәгән ҡатын-ҡыҙҙан да матурыраҡ бер кем дә юҡ тигәнгә лә ышанғанмын...

**Миңзәлә Хәлилова:** Матурлыҡҡа ынтылыу - ул ҡатын-ҡыҙҙың булмышында! Мин дә ҡулымдан килгәнсе эргә-тирәмдә матурлыҡ булдырырға тырышам. Баҡсамда 40-тан ашыу төр сәскә үҫтерәм, өйөмдә үҙ зауыҡым менән биҙәйем, уҡыусыларымда матурлыҡҡа һоҡлана белеү хисе тәрбиәләргә тырышам. Матурлыҡҡа ынтылыу - ул ниндәйҙер модалы, ҡыйбатлы кейем һатып алыу түгел икәнен төшөндөрәм. Матурлыҡ -ул ябайлыҡ, тием.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Шағирҙар, яҙыусылар, ғөмүмән, ижад кешеләре ҡалаларҙа ғына түгел, ауылдарҙа ла йәшәй. Ҡалала йәшәгәндәр ижадты көнитмеше шөғөлөнә әйләндерһә, ауылда йәшәгәндәр өсөн ул эш араһында ғына туҡтап, Илһам ҡошо алып килгән сәләмде ҡағыҙға төшөрөү мәле һымаҡ ҡабул ителә. "Илһам килһә - ижад бар, килмәһә - юҡ. Юҡ нәмәне баш баҫып көтөүҙән ни фәтүә?"- ти бит ана Нәилә Хәмбәлиева ла. Ауылда йәшәгән ижад кешеләре, был осраҡта әҙибәләр өсөн әсәлек, ир ҡатыны булыу мөһимерәк. Был үтә тәбиғи, шулай бит? Шуның өсөн уларҙың ижад емештәре лә тәбиғи асылында.**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА**
**һорауҙар бирҙе.**

*Ижадсының күңеле һәр нәмәне тәрәнерәк тойорға, күрергә һәм кисерергә һәләтле, шуға уның тетрәнеүҙәре лә вулкан атылыуға тиң: бөтә кәртәләрҙе ватып-емереп түгелә лә түгелә, уй-хистәреңде аҡ ҡағыҙға яҙып ҡына өлгөр.*

Ҡатын-ҡыҙҙың кырҡ сырағы

**Ҡатын-ҡыҙ асылы йән өрәме икән шағирәләргә, әллә донъяны иң тәүҙә ижадсы күҙлеге менән күрә-байҡаймы улар күңеле? Һайлау алдында ҡалһалар, ҡайһы булмыштарына өҫтөнлөк бирерҙәр ине икән? Һынылышлы мәлдәрендә артабан йәшәр өсөн көстө ҡайһы биләмә-дәүләттәренән эҙләйҙәр: ҡатын-ҡыҙ асылын раҫлаған биләмәләрендәме, әллә донъяға шағир булып баҡҡан дәүләттәренәнме? Ошо һорауҙарға яуап эҙләп, шағирә, Тамара Ғәниева исемендәге әҙәби премия лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНАның күңел донъяһына бағабыҙ.**

# ШАҒИРӘЛЕК ҺӘМ УҠЫТЫУСЫЛЫҠ...

## Улар нисек бер тәртәлә һыйышып йәшәй ала?



**➔ Кешенең шағир булыры бала сағынан билдәле буламы? Ниндәй һыҙаттары ундағы ижади башланғысты белдерә? Һин ниндәй бала булдың?**

- Күңелдең ниндәй ҙә булһа шөғөлгә тартылыуы бәләкәйҙән билдәле була, әлбиттә. Буласаҡ йырсылар сәңгелдәктә саҡтарында уҡ әсәләренең йырҙарына ҡушылып "йырлап" яталар, буласаҡ бейеүселәр көйөнә тура килтереп кенә тыпырҙай беләләр, буласаҡ рәссамдар күҙәтеүсәнерәк булалар. Сәңгелдәктә ятҡанымда нисек булғанмындыр, әйтә алмайым, ә бына үҙемде иҫләй башлағанда уйсан ғына, донъяны үҙемсә күрергә һәм аңларға теләгән, хыяллanырға яратҡан бала инем. Анау офоҡ, анау тау артында ла "донъя" барын белгәндән һуң, болоттарға ултырып ҡына "күҙ күрмәҫ, ҡолаҡ ишетмәҫ ерҙәрҙе" урап ҡайтҡы килә торғайны. Ай, йондоҙҙар донъяһы ҡыҙыҡ ине. Йондоҙҙар араһында ҡанатланып осоп йөрөргә хыяллана инем. Һыуға барғандамы, быҙау эҙләп йөрөгәндәме, нимә эшләүемде лә онотоп, хыял донъяһында оҙағыраҡ булғаным өсөн әсәйемдән һәр ваҡыт эләгә ине, әммә хыялдарымдан биҙмәнем бер ҡасан да. Ҡушылған һәр эште еренә еткереп эшләтеү әсәйемдең төп талабы булһа, миндә үҙемсә генә эшләге килеү теләге артыҡ көслө ине. Нисек етте - шулай, арлы-бирле генә итеп түгел, әсәйем талап иткәнсә матур итеп, еренә еткереп, әммә үҙеңсә. Башҡаларҙы ғына түгел, хатта үҙ-үҙеңде ҡабатламайынса!

Миндәге ижади башланғыс үҙен шулай һиҙҙерткәндер. Апайҙарыма өйгә ятларға бирелгән шиғырҙы уларҙан алда ятлап алып, беҙгә килгән һәр кемгә шиғыр һөйләп, концерт күрһәтергә яратыуымды ла хәтерләйем. Тәүге "концертым" апайымдар 8 Март айҡанлы ятлаған шиғыр менән бәйле булды. "Әсәйҙәр ҙә шат бөгөн, атайҙар ҙа шат бөгөн", тигән юлдарҙы мин дә ҡысҡырып ҡабатлайым. Нисә йәштәрҙә икәнлегемде хәтерләмәйем, бәләкәй инем: "р" өнөн әйтә белмәйем, ултырғысҡа ла үҙаллы менә алмайым әле. Һөйләүем ҡыҙыҡ тойолғандырмы, мине күтәреп ултырғысҡа баҫтыралар ҙа теге шиғырҙы ҡабат-ҡабат һөйләтәләр, ҡул сабалар. Ҡул сабып күтәрмәләүсе булғас ни, үҙемә лә оҡшап киткәндер инде был "һөнәр" - нисә һораһалар, шул тиклем һөйләйем, һөйләгән һайын оҫтара барам. "Әсәйҙәр ҙә шат бөгөн, атайҙар ҙа шат бөгөн", менән генә туҡтамайым, өйөбөҙҙә кем бар, барыһының да исемдәрен ҡушып әйтеп сығам, "Мин үҙем дә шат бөгөн!" тип тә ебәрәм, унан һуң күршеләргә, өҫтәлдәге самауыр, сынаяҡ, балғалаҡтарға күсәм... Һөйләгән һайын яңы юл, яңы тойғо өҫтәйемдер инде, күрәһең. Донъяны үҙемсә күреүем шулай булғандыр, яйлап, ошо асылым ихтыяжға әйләнгәндер.

**➔ Донъяға шағир күҙлегенән бағыуыңды ҡасаныраҡ аңланың?**

- Балалыҡ иленән тағы бер серле ғәҙәтем ныҡ иҫтә ҡалған. Һыуға барғас, яр буйындағы ҡыуаҡтарға, йылғаға, үҙемдең һыуҙағы сағылышыма ла донъяның үҙем генә күреп белгән әллә күпме серҙәрен шиғыр итеп һөйләп, йыр итеп йырлап-көйләп ҡайта торғайным. Бик булмаһа, бейеп күрһәтә инем. Тик был ғәҙәтем мине күҙәткән ололар тарафынан миндә йәшәгән үҙенсәлекле холоҡ булып түгел, "киҫекһеҙ", "тағы донъяһын онотто" тигәнерәк һүҙҙәр менән баһаланды. Шуғалырмы, үҫә төшкәс был ғәҙәтемде мөмкин тиклем төпкәрәк йәшерергә тырыштым. Донъяны үҙемсә күреүемде һәм уны үҙемсә генә һүрәтләргә теләгәнемде аңлағанда 14-15 йәштәрҙә инем. Урманда имәнгә һыйынып ҡына үҫкән ҡайын ағасы салынды күҙемә. Етмәһә, ҡайын икегә айырылған да (күрәһең, бәләкәй ваҡытта осон өҙөп киткән булғандарҙыр) бер тамырҙан сыҡҡан ике олонло булып формалашҡан. Имәнгә һыйынғаны көслөрәк кеүек, өҫкә, яҡтыға үрелгән, ә икенсеһе, ситкәрәк ҡайырылғаны, кәкерәйеп, зәғифләнеп ҡалған. Мине тетрәндергән күренеш шиғыр булып тыуҙы аҙаҡ.

**➔ Ә шағир йөрәге бөгөн әйләнә-тирәбеҙҙә йылдан-йыл йышыраҡ осраған күңел зәғифлеге, һөмһөҙлөк, бәғерһеҙлек, тупаҫлыҡ менән бер донъяла нисек һыйышып йәшәй?**

- Тормош үҙе үк туҡтауһыҙ көрәш. Ижадсыларҙы тап ошо һыйышып йәшәү мөмкин булмаған күренештәр тетрәндерә, мейеләрен, йөрәктәрен ҡуҙғыта, уйландыра, эҙләндерә. Шуға ла ижад итеп күңелен бушата белгән, шунан ләззәт алған, күңел рәхәтлеге кисергәндәр был ғәҙәттәренән арына алмай, үҙҙәре өсөн генә булһа ла яҙыуҙан туҡтамайҙар ул. Тик уйланыпэҙләнеүҙәрең һөнәри булмышыңа әйләнгәс, яҙған темаңдан бигерәк ижад процесы, асыштарың-табыштарың ылыҡтыра. Ижадсы өсөн был яңы баҫҡыс, этәргес көс. Ошо баҫҡыс тормоштоң бик күп кире күренештәрен йөрәк аша үткәрергә, бик күп ваҡлыҡтарҙан өҫтөн булырға, хатта, нисек кенә парадоксаль булмаһын, шулар менән һыйышып йәшәргә көс бирә.

**➔ Һөнәри йәһәттән уҡытыусы менән шағир бер-береһенә ҡамасауламайҙармы? Уҡытыусы "ярай" менән "ярамай"ҙар араһында йәшәп күнеккән, ә шағирә хистән генә торған йән эйәһе, тигәндәй... Уҡытыусы һөнәренең тәртәләренә инә алмай йонсойҙор шағирлығың, моғайын.**

- Эйе, уҡытыусы менән шағирлыҡты бер тәртәгә һыйҙырып йәшәү мөмкин дә түгел һымаҡ. Бөгөнгө уҡытыусының ижадҡа түгел, хатта шәхси тормошона ваҡыты юҡ. Әммә уҡытыусы-шағирә булыуымдан, шәхесемә булған иғтибарҙан уҡытҡан предметыма ҡыҙыҡһыныу ҙа артҡанын тойоп йәшәйем. Уҡытыусы өсөн был ҡыҙыҡһыныуҙың булыуы бик мөһим. Бөгөнгө көндә бигерәк тә. Үҙем уҡытҡан уҡыусылар араһында фекерҙәштәрем, йәш ҡәләмдәштәрем булыуы ла һөнәремдең дә, ҡәләмемдең дә баһаһын арттыра. Шағирҙар араһында - уҡытыусы, уҡытыусылар араһында шағир булып йөрөүем эшемә мәртәбә өҫтәне тип әйтә алам, ә бына шағирлығымдың үгәйһетелеп йәшәүе күңелгә тынғылыҡ бирмәне бер ҡасан да. Ижади осҡондоң дәрес сиктәрендә генә балҡып, һуңынан уҡытыусы эшенең мең мәшәҡәттәре араһында һүнеп ҡалыуы шағирлығыма кире йоғонто яһаны. Дәрес һайын һинән ниндәйҙер яңы һүҙ өмөт итеп, һиңә күҙ төбәп ултырған уҡыусылар өсөн генә янып йәшәү режимын күңел ижад итеп ҡабул итергә өйрәнде - ҡәләмдән һыуынды. Хәҙер килеп шуны аңлайым: көсөңдө ижадҡа бағышлау урынына башҡа нәмә менән йыуанып йәшәү, үҙ-үҙеңде алдатыу, асылыңа хыянат итеү булған икән. Ижадымдағы байтаҡ йылдарға һуҙылған торғонлоҡ ана шул "ярай" менән "ярамай"ҙар араһында йәшәп өйрәнеүҙең дә эҙемтәһелер, моғайын. Һуңғы йылдарҙа үҙемде сикләүҙән туҡтап, ижади асылымды өҫтөнөрәк күрә башлағас, күңел торғонлоҡтан ғына түгел, тотҡонлоҡтан ҡотолғандай хис итте үҙен.

**➔ Һуңғы йылдарҙа ижадыңдың айырыуса балҡып, баҙрап китеүен асылыңа ҡайтыу, тип аңларға кәрәк, тимәк? Ә халыҡ һинең ижадта "яңынан тыуыуың"ды яҙмышыңдағы һынауҙар менән бәйләй...**

- Яҙмышындағы үҙгәрештәр күптәрҙе һығымталар яһарға, үҙенә икенсе күҙлектән ҡарарға, булмышын яңыса баһаларға, тимәк, яңынан тыуырға өйрәтә. Ижадсыны бигерәк тә. Ижадсының күңеле һәр нәмәне тәрәнерәк тойорға, күрергә һәм кисерергә һәләтле, шуға уның тетрәнеүҙәре лә вулкан атылыуға тиң: юлындағы бөтә кәртәләрҙе ватып-емереп түгелә лә түгелә, уйхистәреңде аҡ ҡағыҙға яҙып ҡына өлгөр. Бынан ары яҙмайынса йәшәй алмағаныңды аңлағандан һуң "уҡытыусы кеше күңелен бар донъяға шаран-яран асып түгелергә тейеш түгел", тип, хис-тойғоларыңды аҡ ҡағыҙға түгеүҙән ҡасыу һәләкәткә тиң булыр ине. Йәнә лә ижадта "түл йыйыу", "тәжрибә туплау", һүҙ әйтер "мәлең етеү" тигән төшөнсәләр ҙә бар. Кем белә, ниндәйҙер һүҙ әйтер өсөн мин тап ошо "тәжрибә", ошо һынауҙар аша үтергә тейеш булғанмындыр, бәлки. Ижад - Күк көҙрәте бит шулай ҙа. Күк үҙ асылыңа ҡайтыуыңды тейешле ғәмәл итеп ҡабул итәлер ул, ә бына булмышыңды инҡар итеүҙе ғәфү итмәй, һинән бөтөнләй йөҙ бороуы ла мөмкин. Ул ваҡытта бер ниндәй тетрәнеүҙәр ҙә ярҙам итә алмаясаҡ, көсләп яҙып та, ҡәләм тирбәтергә өйрәнгән һәр ижадсынан шағир яһап та булмай.

**➔ Ҡатын-ҡыҙ иңенә әсә булыу, ғаилә усағын һаҡлау, балалар тәрбиәләү бурысы ла һалынған. Ошо бурыстарға һалынған "ярай", "ярамай"ҙар ҙа бар бит әле. Улар менән ниндәй мөнәсәбәттә шағирә күңеле?**

- Донъяға ҡатын-ҡыҙ булып яралыуың да, шағир булып яралыуың кеүек үк, асылыңды, булмышыңды билдәләүсе көс. Айырма шунда ғына: шағир булып яралтҡан биләмәң өсөн һин ҡатын-ҡыҙ булараҡ ҡыҙыҡ, ә ҡатын-ҡыҙ булараҡ әүәләпһиплəп булдырған дәүләтеңдә һинең шағирлығың менән бөтөнләй иҫәпләшмәүҙәре ихтимал. Бындай мөнәсәбәт тора-бара ҡатын-ҡыҙ асылыңды ла, шағирлыҡ асылыңды ла көрсөккә алып барып ырғыта. Асылыңды юғалтҡан ерҙә күңелең пыран-заран килә, һәләкәт кисерә. Ике асылыңды ла ҡабул итәләр икән, һин ике һын-фиғелеңдә лә тигеҙ тартырҙай көсҡеүәткә эйә булаһың да ҡуяһың, ҡатын-ҡыҙ булараҡ та, шағир булараҡ та асылғандан-асыла бараһың. Ә бурыстарға килгәндә, әсә булыу - ҡатын-ҡыҙҙың асылына һалынған иң изге бурыс, уның менән иҫәпләшмәү мөмкин түгел. Ғаилә усағын һаҡлау, балалар тәрбиәләү кеүек бурыстарҙы әле һаман күберәк ҡатын-ҡыҙҙарға ҡайтарып ҡалдырыуҙары менән килешә алмайым. Донъя йөгөн ирҙәр менән типә-тиң һөйрәй бөгөн ҡатын-ҡыҙҙар, шуға күрә ошо әхлаҡи һәм хатта көндәлек донъяуи бурыстарҙың үтәлеүе өсөн яуаплылыҡты ҡатын-ҡыҙға ғына йөкмәтеп ҡуйыу яраған эш түгел.

**➔ Шиғриәттең мәңгелек темаһы - мөхәббәт. Йәнеңде әйләндереп-тулғандырып сығарған һөйөү тойғоларына уралмаған әҫәрҙәрҙең йәне лә юҡ кеүек хатта. Һинең ижадыңда һәм шәхси тормошоңда мөхәббәт ниндәй урын биләй?**

- Мөхәббәт утында янмай, һөйөү ғазаптары кисермәй, шағир булып булмай. Хистәреңдең сафлығын, тәрәнлеген генә түгел, үҙеңдең кем икәнлегеңде, нимәгә һәләтле булыуыңды аңларға ярҙам итеүсе тойғо ла ул мөхәббәт, донъяны ҡабул итеү, аңлау һәләтеңдең тәрәнлеген билдәләүсе көс тә. Үҙҙәре мөхәббәт утында янып көлгә ҡалғандан һуң да шағирҙар һөйөү тураһында һоҡланғыс әҫәрҙәр яҙыу, мөхәббәтте илаһилаштырыу һәләтенә эйә. Шуға ла шағир ҡәләменән сыҡҡан ысын һөйөү һүҙе сәнғәт әҫәре кимәлендә ҡабул ителә. Ошо кимәлгә етмәгәндәре - ҡәҙимге интим тойғолар ғына, уларҙа тойғолар тәрәнлеге лә, һүҙ көсө лә юҡ. Һөйөү һүҙеңде сәнғәт әҫәре кимәленә еткерә алаһың икән, мөхәббәт тураһында яҙырға ла яҙырға кәрәк. Беҙҙе бар итеүсе лә, йәшәтеүсе лә, ҡанаттарың ҡайырылғандан һуң дауалап, яңынан күктәргә ҡарап талпындырыр көс бит ул мөхәббәт.

Шәхси тормошомда ла, шөкөр, ғазаплы ла, татлы ла, яуаплы ла, яуапһыҙ ҙа һөйөү утында

янғандарым булды. Ғашиҡ булдым, яндым, көйҙөм, көлгә лә ҡалдым, әммә барыбер мөхәббәттең йәшәү көсө, көлгә ҡалған ерҙән яңынан терелтер көскә эйә икәнлегенә ышанам.

➔ **Ижадыңды күҙәтеп барғандар һинең хыянат кисергәнеңде лә белә. Хыянат та төңөлтмәнеме мөхәббәттән?**

- Хыянат кисермәһәм, бәлки, һөйөү ғазабының нимә икәнлеген аңлауҙан мәхрүм булыр инем. Хәҙер беләм: һөйөүҙең ғазабы ла татлы. Һөйөүҙе ошо кимәлдә ҡабул итерлек йөрәк һәм аң биргәне өсөн Йыһанға рәхмәтлемен хатта.

➔ **Йәнең үрһәләнеүҙән Ер йөҙөндә үҙеңә урын таба алмай бәргеләнепһуҡҡыланған мәлдәрең дә булғандыр бит? Шундай мәлдәрҙә ниҙәр менән йыуаттың күңелеңде, артабан йәшәр өсөн көсте ҡайҙан таптың?**

- Ундай мәлдәр булды, әлбиттә. Әле лә еңел генә түгел. Мине йәшәтеүсе көс - балаларым һәм улар яҙмышы алдындағы яуаплылыҡ тойғоһо. Яуаплылыҡ тойғоһо, бигерәк тә балалар яҙмышы өсөн яуаплылыҡ ҡатын-ҡыҙға инстинкт кимәлендә һалыналыр, ә ир-егеткә тәрбиә менән биреләлер, тип аңлайым. Быны ни өсөн ҡатын-ҡыҙға үҙ асылын иң тәүҙә үҙенең дөрөҫ аңлауы мөһим. Үҙ асылын дөрөҫ аңламаған ҡатын-ҡыҙ йәшәү көсөн башҡа ҡиммәттәрҙән эҙләй, сөнки асылынан ситләшеү ҡиммәттәрҙе бутай, ҡайһы ваҡыт хатта дөрөҫ юлдан да яҙҙырып ҡуя. Асылына һалынған ҡиммәттәрҙе баһалай белгән ҡатын-ҡыҙҙың үҙ әҙәбе һәр саҡ үҙе менән.

➔ **Күңел донъяһын сайпылтмайынса ғына һаҡлауы ауыр, шулай ҙа ҡатын-ҡыҙҙың тулы, бөтөн донъяһы нисек булырға тейеш икән?**

- Ул донъяла иң тәүге сиратта хәүеф-хәтәр булмай. Балаларыңдың киләсәге өсөн йәнең тыныс. Күңелең бөтөн. Хаҡһыҙ рәнйетелеүҙән ҡурҡмайһың. Шатлыҡ-ҡыуаныстарыңды, ҡайғы-хәсрәттәреңде уртаҡлашҡан, һиңә терәк-таяныс булған ҡурсалаусың-һаҡлаусыңдың барлығын тойоп-белеп йәшәйһең. Был дәүләттең батшалары - ике йәнде бер бөтөн иткән Һөйөү, Тоғролоҡ, Ышаныс, Өмөт... Ошо ҡиммәттәрҙән тора кеүек миңә ҡатын-ҡыҙҙың камил донъяһы. Ҡатын-ҡыҙ биләмәһендәге башҡа сыраҡтар асылыбыҙҙы билдәләгән ҡиммәттәрҙең бераүһе генә һүнгәндә лә аҙашмаҫҡа теләп яндырылалыр ул...

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Һәр ҡатын-ҡыҙҙың үҙ инаныстары, үҙ һөйөнөс-көйөнөстәре, үҙ асылы. Асылыбыҙҙы балҡытып-баҙратып ебәрә белеүебеҙҙең дә үҙ сере, үҙ юлы. Тормош елдәре ҡаҡҡылап-һуҡҡылағанда һынмаҫ, бөгөлмәҫ, юлдарҙа аҙашмаҫ, таймаҫ өсөн яндырған сыраҡтарыбыҙҙың да үҙ ҡалыбы: береһе янып бөтөүгә, икенсеһе тоҡана. Ғәлиә Кәлимуллина тоҡандырып-һүндергән сыраҡтар хаҡындағы әңгәмәгә уның һуңғы йылдарҙа көйҙәр яҙа башлау тарихы инмәй ҡалды. Ғәлиәнең йөрәк ауазы булып яралған "Һөйөү йыры", "Нөгөш буйҡайҙары", "Яҙмыш дарьялары", "Күҙҙәрең", "Яндырма мине" йырҙары йөрәгендә йәне булғандарҙы тетрәтмәй ҡалмағандыр. Нимә был? Ғәлиәнең быға саҡлы үҙе лә аңламай йөрөгән асылымы, әллә яктыраҡ, сағыуыраҡ балҡыр өсөн тоҡанған сираттағы сырағымы?..**

Зөлфиә СИБӘҒӘТУЛЛИНА
әңгәмә ҡорҙо.

ИР-ЕГЕТ ҺҮҘЕ

# КҮҘӘТЕҮҘӘРЕМ

**Бер нисә йыл рәттән алып барған "Күҙәтеүҙәр"ем араһында нәфис затҡа, ҡатын-ҡыҙға бәйле проблемаларға арналғандары ла байтаҡ йыйылып киткән икән. Шуларҙың бер нисәүен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәм. Бер ыңғайҙа һеҙҙе 8 март - Ватанды һаҡлаусыларҙы яҡлаусылар байрамы менән тәбрик итәм, хөрмәтле гүзәл заттар!**

## 24-се күҙәтеүем: "Сәскәләр ни өсөн матур?"

Фрейд йөҙ, мең тапҡыр хаҡлы. Яҙ етеүгә болон-ҡырҙар, ҡала аллеялары күҙҙең яуын алырлыҡ төрлө төҫтәге сәскәләргә күмелә. Сәскәләрҙең ни өсөн шулай матур булыуын бер мәл Әмир Ишемғолов туғаныбыҙ аңлатҡайны. Уларҙы елдәр, бал ҡорттары, иңкештәр, күбәләктәр, башҡа бөжәктәр һеркәләндерә. Үҫемлектәр: "Минә ҡун, бына мин бит иң матуры, минән дә матурыраҡты, минән дә гүзәлерәкте тапмаҫһың", - тип, бал ҡорттарына, күбәләктәргә, бөжәктәргә йән атып, барлыҡ йәмдәрен һибеп, ихлас йылмайып, ҡуйындарын асып ултыра икән дә. Сәскәләр үҙенең тоҡомон ишәйтеү теләгенән күҙҙең яуын алырлыҡ була. Тап шул теләктән ата ҡоштар инә ҡоштарҙы саҡырып йәнде өҙҙөрөп һайрай. Барыһы ла артырға, ишәйергә, быныһ өсөн матур булып күренергә теләй. Был хәлде аңламаһалар ҙа, ҡыҙҙар ҙа шулайҙар...

## 61-се күҙәтеүем: "Асырғаныу"

Рәсәй Федерацияһының халыҡ артисы Станислав Говорухин Ләйсән Золотарева хаҡында: "Шул тиклем ярһыулыҡ. Ҡыҙҙа шул тиклем энергия бар - ядро зарядына етер ине..." - тине. Уйнап, әммә уйлап әйтте халыҡ артисы. Ләйсән "Урал батыр" эпосынан өҙөк башҡарғанда уның йөҙөнә иғтибар иттегеҙме? Тәбиғәт балаларҙа ял итә, ейәндәрҙә йәшәй, тиҙәр. Мин халҡыбыҙҙың хәҙерге хәл-торошонан сығып ҡыҙҙың йөҙөндәге билдәне "Асырғаныу" тип атаным. Ҡыҙ, үҙе лә һиҙмәйенсә, шуны эшләне.

## 83-сө күҙәтеүем: "Йырлап еңә"

Сәлимә һеҙлем әсәһе, Гөлнур апайым хаҡында шундай матур һүҙҙәр яҙған. Рәхмәт туғаныма! Эйе, ул тормошто, кешеләрҙе, сәхнәне, бигерәк тә шиғриәтте ярата. Үҙе лә шиғыр яҙа. Тағы ла, әгәр ҙә тормошо башҡасараҡ юлдан киткән булһа, ул мотлаҡ йырсы булыр ине. Һаман да үҙәкте өҙҙөрөп башҡара ул йырҙарын. Үткән быуаттың етмешенсе йылдарында уҡ улар Сыңғыҙҙағы Флүрә апай Туйсина менән икеһе ауыл, район клубтарының халыҡ артистары инеләр. Гөлнур апайымдың тағы ла бер күркәм дә, бәлки, башҡаларға сәйер ҙә булып тойолған сифаты бар: кемдер уның алдында насар йә ауыр һүҙ һөйләй башлаһа, йырларға тотона. Теге кеше туҡтағансы һуҙа һәм еңеп сыға. Бындай ғәҙәт уға атайыбыҙҙың әсәһе Тайфа ҡарсәйебеҙҙән мираҫ булып ҡалған. Ул да тормошондағы барлыҡ ауырлыҡтарҙы йырлап еңгән.

## 94-се күҙәтеүем: "Үҙебеҙ ғәйепле"

Тормошобоҙҙоң ниндәй генә өлкәһен алмайыҡ, ҡатын-ҡыҙ әүҙемлеген күрәбеҙ. Кемдер бераү: "Катын-ҡыҙ ир-аттан бер башҡа түбән булырға тейеш, улар үҙ урынын белмәй", - тип әйтер. Үҙебеҙ ғәйепле, егеттәр: сөнки уларҙан бер башҡа юғары була белмәйбеҙ...

## 97-се күҙәтеүем: "Руль артында ҡатын-ҡыҙ"

Бер күҙәтеүем менән уртаҡлашмаҡсымын. Руль артына ултырып, үҙаллы йөрөй башлаған нәфис зат өсөн уның ире икенсе-өсөнсө-дүртенсе урынға күсә. Был дөрөҫмө: дөрөҫ булһа, ни өсөн дөрөҫ, дөрөҫ булмаһа, ни өсөн дөрөҫ түгел? Әллә миңә генә шулай тойоламы?

## 100-сө күҙәтеүем: "Бөйөк һыҙланыу... бөйөк халыҡ"

Ҡаҙаҡ халыҡ шағиры һәм ғалимы Әбделйәмил Нурпеисов менән Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында концерт ҡарап ултырғанда "Ете ҡыҙ" бейеүен башҡарҙылар. Бейеүҙең яртыһын ҡарағас, ул минән: "Ниңә был ҡыҙҙар баштарын да күтәрмәй, ниңә хәрәкәттәре һалмаҡ, башҡорт бейеүе дәртле бит, был ритм нимәне аңлата?"- тип һорай ҡуйҙы. Мин ҡыҫҡаса ғына бейеүҙең ҡаҙаҡтар менән бәйле тарихын һөйләп бирҙем дә: "Улар ныҡ итеп баҫыр ине, табандарына ҡыл ярып һалынғас, ауырта бит..." - тип әйткәйнем, ҡаҙаҡ шағиры тетрәнеү кисерҙе һәм: "Бөйөк һыҙланыу, бөйөк бейеү, бөйөк сәнғәт, бөйөк халыҡ",- тигән һүҙҙәрен әйтте.

## 122-се күҙәтеүем: "Бала тыуыуына стимул"

Иғтибар итәһегеҙҙер, әллә миңә генә шулай тойоламы, урамда ауырлы ҡатын-ҡыҙҙар күбәйҙе. Собханалла! Бындай осраҡта күптәр тормош кимәленең яҡшырыуы, киләсәккә өмөт барлыҡҡа килеүе хаҡында һөйләргә ярата. Әммә шулай ғынамы икән? Тарихҡа боролоп ҡараһаҡ, иң ауыр йылдарҙа күпләп балалар тыуыуына ла шаһит булабыҙ. Бөгөн тормош кимәлебеҙ уғата яҡшыра бара тип әйтә алабыҙмы һуң? Шуға күрә бөгөн урамда ауырлы ҡатындарҙың йыш осрауында тәүге балаға пособие, икенсе балаға Әсәлек капиталына өмөт итеү ҙә сәбәптер. Иң мөһиме - маҡсат ысулды аҡлай. Нимә генә тимә, һәр бала үҙ ризығы менән тыуа.

## 240-сы күҙәтеүем: "Ҡыҙҙар беҙҙе нисек һайлай?"

Беҙ, ир-аттар, йыш ҡына "Буласаҡ кәләштәребеҙҙе үҙебеҙ һайлап алабыҙ", тип хаталанабыҙ. Әгәр ҙә ҡыҙ кеше, һиңә кейәүгә сыҡмайым, ти икән, ней нәмә эшләй алабыҙ инде?

Бал ҡорттары һәм бөркөттәр донъяһы был йәһәттән бик ҡыҙыҡлы. Инә бал ҡорто умартанан сығып, һауаға күтәрелә, ҡайһы ата ҡорт уны ҡыуып етә ала, шуның менән ҡауыша. Инә бөркөт иһә ағас ботағын тырнаҡтарына эләктереп һауаға күтәрелә. Шунан уны ысҡындыра. Парлыҡҡа дәғүә итеүсе ата бөркөт ботаҡты, ергә төшмәҫ элек тотоп ала. Был хәл бер нисә тапкыр ҡабатлана, инә бөркөт һынауҙы уңышлы үтә алғаны менән генә парлаша. Урынлы һорау тыуа: ни өсөн ул себештәренең буласаҡ атаһын тик ошо юл менән һынай икән?

Себештәрен осорға өйрәткәндә кәрәк икән ата бөркөттөң был һәләте. Тик ата-инәһе килтергән ризыҡ менән генә ояла туҡланып ятыусы себештәргә ризыҡ бирмәй башлайҙар бер саҡ. Аслыҡ үҙенекен итә. Етмәһә, ата бөркөт менән инә бөркөт килтергән ризыҡтарын оя янындағы ағас ботағына ултырып үҙҙәре ашарға керешә. Себештәрен ошо рәүешле тамшандыра улар. Себештәр, билдәле, уларға ынтыла, шунан ояның ситенә сығып, ергә ҡолай башлай. Шул саҡта ата бөркөт таш кеүек ергә шыҡыйып, себеше ергә төшөп йәнселмәҫ элек һыртына ултыртып алып, кире ояға алып менә. Осорға өйрәнеүҙең тәүге күнекмәләре ошо рәүешле башлана.

Һе, ҡыҙыҡ, ә ҡыҙҙар беҙҙе нисек һайлай икән?

## 265-се күҙәтеүем: "Ирен хурлаған балаһының юлын япҡан"

Йортоноң табын артына ниндәй генә затлы ҡунаҡтар килеп ултырмаһын, иң тәүҙә иренең алдына йылмайып килеп ризыҡ ҡуйған мөләйем ҡатынды беләм. Йыйын тап килтереп, үҙенән бер һорашҡайным, ул: "Ҡунаҡ һәр саҡ китә. Балалар ҙа ҡунаҡ, ваҡыт еткәс, улар ҙа һинән китергә тейеш. Ә минең янда хужам һәр саҡ ҡала. Хөрмәт, ихтирам тойғолары күрһәтеүҙән..." - тип аңлатты ул.

Идеаль кешеләр булмай, етешһеҙлектәр һәр кемгә лә хас. Әммә был ҡатын бер ваҡытта ла башҡалар алдында ирен хурламай, уның күркәм холоҡтарын ғына бәйән итә.

Уның фекеренсә: "Ирен хурлаусы ҡатындар атайҙарының урынын күрмәй үҫкән. Һәҙөмтәлә ир ҡәҙерен белмәгән бисәләр формалаша. Ундайҙар шул ир менән торғанын, шуның менән ятып йоҡлағанын, бала тапҡанын һәм, әлбиттә, бер ваҡытта ла иренән китә алмаҫын аңламай. Икенсенән, ирен хурлаған ҡатындар балаларының юлын яба..."

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**"Ҡатын-ҡыҙға мәҙхиә-маҡтау һүҙең ниндәй булыр?" тигән һорауға мин дә яуап бирәйем әле.**

Һәр кеше кеүек, мин дә иң тәүҙә әсәйемде, Мәрйәм Хәйбулла ҡыҙын маҡтар инем. Беҙгә, ун бер балаһына ғүмер бирҙе ул. Унан һаҡсыл булырға, уйлағаныңды әйтергә өйрәндем. Грамотаһы үҙенең ҡултамғаһын ҡуйырлыҡ ҡына булһа ла, тормош аҡылы буйынса академик ине әсәйем. Атайым тик уның әйткәне буйынса ғына эшләне, уның кәңәшенән тыш, үҙаллы башҡарған бер эше лә килеп сыҡманы. Зиһенем формалашыуҙа тағы ла ике изге затҡа бурыслымын: өләсәйем Маһира менән ҡартәсәйем Тайфа. Өләсәйем ғәрәпсә, фарсыса уҡый-яҙа белде, ғүмере буйына намаҙлыҡта ултырҙы. Өс йәшемдән алып йәй башында үткән һабантуйҙан мине үҙҙәренең ауылы Таулыҡайға алып ҡайтыр ине ул. "Өләсәй мәктәбе"н мин тап шул ауылда үттем. Минең һәр бер һүҙемдә, ҡылығымды күҙәтеп, саҡ-саҡ янылышҡан саҡта төҙәтеп, журналистар лөғәте менән әйткәндә, мөхәррирләп ултырҙы өләсәйем. Ә атайымдың әсәһе, ҡартәсәйем Тайфа шул тиклем егәрле, сәсән телле, йырға маһир зат булды. Мине яурынына ултыртып ала ла, ауылыбыҙ янындағы урманға сығып китә торғайныҡ. Тап шул саҡтарҙа ул башҡарған йырҙар, шиғырҙар, әкиәттәр булмышыма һеңеп ҡалды.

Үҫеп еткәс ҡәләмгә тотоноуым да ошо өс изге ҡатын-ҡыҙҙың йоғонтоло тәрбиәһенә бәйле булғандыр, тием. Улар мине айырыңҡырап та ҡаранылар бугай. Өләсәйем беҙгә килгән саҡта ҡартәсәйем менән икеһе генә серләшеп алғандарында ла минең исемдең йыш яңғырауы шуға ишара ине. Әсәйем, өләсәйем, ҡартәсәйем - минең ижадсыларым, йәғни улар мине ижад итеүселәр.

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.

✓ *Бәхетенән, бейеме балаҫ һуғыу оҫтаһы була. Ғәбиҙә Ҡунаҡҡужа ҡыҙы Мостафина тырыш, эшкә тилбер, отҡор килененә балаҫ һуғыуҙың бөтә нескәлектәрен өйрәтә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# СӘЙХУР ОҘАҠ ЙӘШӘР

■ Кембриджд университеты социологтары командаһы 4 көнлөк эш аҙнаһының һөҙөмтәһен баһалаған. Алты ай дауамында бер нисә компания яңы форматтағы эш аҙнаһына күсеп тора, шул уҡ ваҡытта хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡы һаҡланып ҡала. Һынауҙарҙа барыһы 3 мең хеҙмәткәр ҡатнаша. Эшсәнлек кимәле, стресс кисереүҙәр, эшләге килмәү кеүек тойғолар тураһындағы һорауҙарға яуап биргәндән һуң, белгестәр уларҙың психик һәм физик сәләмәтлеге күпкә яҡшырыуы тураһында белдерә. Эштән арыу, ялҡыу кеүек күренештәр 71 процентҡа әҙәйгән, 39 процент респонденттар стрестарҙың кәмеүен билдәләгән. Ауырып китеүселәр - 65 процентҡа, үҙ теләге менән эштән китеүселәр 57 процентҡа кәмегән. Компанияларҙың килеме ошо осор эсендә кәмемәгән, ә хеҙмәткәрҙәргә ғаилә һәм социаль бурыстарын үтәүгә ваҡыты күберәк ҡалған.

■ Бөйөк Британияла йәшәүсе һәм ошо көндәрҙә 100 йәшлек юбилейын билдәгән Винни Тигвеллдан оҙаҡ йәшәү сере менән уртаҡлашыуын һорағандар. Ул популяр сауҙа үҙәгендә эшләгән, хаҡлы ялға сыҡҡас, суд бинаһының ишегендә сәй һатҡан. Тап сәйҙе оҙаҡ йәшәүселәр эсемлеге, тип иҫәпләй икән ул. "Күберәк көлөгөҙ һәм күберәк сәй эсегеҙ!" - оҙаҡ һәм бәхетле йәшәүҙең сере ошонда тип яуаплай Тигвелл.

■ Калифорния университеты ғалимдары раҫлауынса, өлкәнәйгәс тә ҡатын-ҡыҙҙарға физик йәһәттән әүҙем булып ҡалырға кәрәк. Кем күберәк йәйәү йөрөй, физик күнекмәләр эшләй, улар аҡыл зирәклеген дә һаҡлап ҡала. Һынауҙарҙа 65 йәште үткән 1277 ҡатын ҡатнашҡан. Уларға ете көнгә аҙымдарҙы иҫәпләүсе ҡорамал таҡҡандар. Был ваҡытта улар ғәҙәти тормош менән йәшәп, өйрәнгән эштәре менән булышҡан. Көнөнә 31 минут физик әүҙемлек деменция хәүефен 21 процентҡа түбәнәйткән. Бынан тыш, көнөнә өҫтәмә рәүештә һалған 1865 аҙым был хәүефте 33 процентҡа кәметкән. Әгәр ҙә ошо кимәлдә булһа ла әүҙемлек күҙәтелһә, ҡалған ваҡытта уларҙың йыш ултырыуы ла мөһим түгел, ти белгестәр. Миҫал өсөн әйткәндә, еңелсә физик әүҙемлек - ул йорт, баҡса эштәре менән булыу, йәки йәйәү йөрөү. Физик әүҙемлек юғарыраҡ булһын тиһәгеҙ, шәп итеп атлап йөрөргә кәрәк буласаҡ. Альцгеймер ауырыуын да әүҙемлек иҫкәртә ала. Шуныһын да хәтерҙә тоторға кәрәк: деменция тигән диагноз ҡуйыла икән, уны кирегә әйләндереп ебәрер ҡеүәт юҡ. Ә гүзәл заттар ир-егеттәргә ҡарағанда, уға тиҙерәк бирешә.

■ Тоҙ - иммунитеттың дошманы. Дөрөҫөрәге, уның артығыраҡ булыуы йөрәкҡан тамырҙары сирҙәренә илтә. Яңы тикшеренеүҙәрҙә ғалимдар был билдәле тәмләткестең башҡа хәүефтәрен дә асыҡларға тырышҡан. Иммун системаһының төп өлөшө булған Т-күҙәнәктәре организмға теүәл эшләргә булышлыҡ итә. Әгәр ҙә уларҙың эше боҙола икән, аутоиммун сирҙәр, мәҫәлән, таркау склероз барлыҡҡа килеүе ихтимал. Натрийҙың артыҡ булыуы Т-күҙәнәктәр функцияһына тәьҫир итеүе күптән билдәле. Әлеге һынауҙар ҙа быны раҫлаған. Шуға ла халыҡта "аҡ үлем" тип йөрөтөлгән тоҙҙо һағыраҡ ҡулланырға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта тоҙҙан тулыһынса баш тартырға ярамай, сөнки уның ашҡаҙанда тоҙ кислотаһы бүленеп сығыуға ҡатнашлығы бар.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# НИ МЕНӘН МӘШҒҮЛДӘР?

### Кәсептәрҙе тергеҙәләр

**Балаҫ һуғыу кәсебе башҡорт халҡының сал быуаттарҙан килгән бай матди мәҙәниәтенең сағыу өлгөһө булып тора. Беҙҙең Урал арьяғы райондарында һарыҡ йөнөн, кәзә ҡылын, дебетен иләп, төрлө төҫтәргә буяп, буй һәм биҙәкле балаҫтар һуҡҡандар. Ә бына сепрәктәрҙән һуғылған сағыу балаҫтарҙы йылайырҙар турпыша тип атай. Борон-борондан малсылыҡ менән шөғөлләнгән халҡыбыҙ көткән малының бер нәмәһен дә әрәм-шәрәмгә ебәрмәй, эшкәртеп ҡуйған. Тукыманан тегелгән кейемдәр күбәйеп, туҙмай артып ҡала башлағас, оҫталар уларға ла яңы һулыш биреп, ҡырҡып, сиратып, турпыша-түшәк һуғып алғандар.**



Беҙҙең Йылайыр яҡтарында һәр ауылда ла балаҫ һуғыу оҫталары күп булған. Әммә был кәсеп онотолоп бара ине. Сөнки беҙ күреп белгән оҫталар гүр эйәләре булып бөткәс, байтаҡ ваҡыт был кәсепте дауам итеүселәр булманы. Ә шулай ҙа һәр ғаиләлә тиерлек беҙҙең өләсәй, ҡартәсәйҙәребеҙҙең (XX быуат башында тыуғандар) ижад емештәре, кемдәрҙәлер хатта балаҫ һуғыу станоктары ла һаҡлана. Шуғалыр ҙа, бихисап гүзәл заттарҙың күңелендә мираҫ итеп ҡалдырылған кәсепте тергеҙеү маҡсаты бөрөләнеп йөрөгәнен белә инек. Һәм бына һуңғы йылдарҙа халҡыбыҙҙың онотола барған милли шөғөлдәре ҡайтанан яңы һулыш алды, уны өйрәнеүселәр һәм өйрәтеүселәр ҙә табылды.

Мәҫәлән, Йылайыр районы "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы етәксеһе Миләүшә Шаһибал ҡыҙы Моратова бер нисә йыл инде халҡыбыҙҙың боронғо кәсебен яңынан тергеҙеүгә, уны район ағинәйҙәренең бренд шөғөлөнә әйләндереүгә күп көс һала. Беренсе ярҙамсылары - Юлдыбай ауылының "Канифа" ағинәйҙәр ойошмаһы һәм үҙенең ғаиләһе. Тормош иптәше һәм улдары Миләүшә Шаһибал ҡыҙына балаҫ һуғыу станоктары эшләп бирҙе, 1941 йылғы станокты ла тергеҙеп ултыртты. Миләүшә Шаһибал ҡыҙы бына бер нисә йыл инде Хафиза Аманташева, Әнисә Алсынова, Фәниә Такалова, Яманһаҙҙан Рабиға Таһирова һымаҡ оҫталарҙы туплап алып, ағинәйҙәр һәм был кәсепте өйрәнергә теләгән башҡа ҡатын-ҡыҙҙар менән оҫталыҡ дәрестәре үткәрә. Юлдыбай ауылы оҫтабикәләре шулай районды барлыҡ ағинәйҙәрен үҙҙәре артынан эйәртә, ошо боронғо кәсепкә йәлеп итә алды. Станок табыу ҙа ауыр мәсьәлә түгел хәҙер - Сибай ҡалаһында йәшәгән яҡташыбыҙ Әнүәр Игебаев, Хәйбулла районы Вәзәм ауылынан Азамат Сурин уларҙың заказын үтәп кенә тора. Быйыл районыбыҙҙа өсөнсөгә балаҫ, турпыша һуғыу оҫталары фестивале үткәреүгә әҙерлек бара. Оҫтабикәләрҙең бер нисәүһе тураһында ла әйтеп китәйем.

Тимер-томор, техника, мал тирәһендә ауыр эштәр башҡарырға яратып, тракторсы булып хеҙмәт юлын башлаған Исҡужа ауылы ҡыҙы Фирҙәүес апай Мостафина ошо турпыша, балаҫ һуғыу эшенә бала саҡтан ғашиҡ. Йәшләй генә Мәҡсүт ауылына килен булып төшә. Бәхетенән, бейеме балаҫ һуғыу оҫтаһы була. Ғәбиҙә Ҡунаҡҡужа ҡыҙы Мостафина тырыш, эшкә тилбер, отҡор килененә балаҫ һуғыуҙың бөтә нескәлектәрен өйрәтә. Әйткәндәй, Ғәбиҙә инәйҙең үҙе һуҡҡан балаҫы һәм баҫҡан кейеҙе Өфөлә милли музейҙа экспонат булып һаҡлана. "Бер турпышаны бейем 5 - 6 көндә һуғып бөтә торғайны. Ә мин йәш саҡта был эш менән әллә ни шөғөлләнә алманым. Балалар үҫкәс, ауылда эшһеҙ ҙә ҡалғас, 2000 йылдарҙан ныҡлап турпыша ла, балаҫ та һуға башланым", - тип һөйләй Фирҙәүес апай. Балаларына, туғандарына бүләккә арнай күп ижад емештәрен. Бирнәлеккә ниәтләп тә балаҫ һуҡтырып алалар унан. Тормош иптәше Ғүмәр ағай һәм улдары станокты күсереп йөрөүгә уңайлы итеп тимерҙән эшләп бирә. Күңел талабы буйынса ла, хеҙмәткә һөйөү һәләтенән дә Мостафиндар ғаиләһендә балаҫсылар кәсебе дауам итә...

Тағы бер яҡташыбыҙ Бәҙекъямал Таһирова инәй үҙенең яратҡан да, ғаиләһенә килем дә килтергән балаҫ һуғыу кәсебен ҡыҙҙары Хәйерниса менән Бәҙернисаға, килене Тайбаға өйрәтеп ҡалдырған. Хәйерниса Исламғолова - Йомағужа ауылында, Бәҙерниса Байғужина - Байғужала, Тайба Таһирова Һабырҙа донъя көтөп, үҙҙәрен балаҫ һуғыу оҫталары итеп таныта. Уларҙың һуҡҡан турпыша, балаҫтарын балалары, ейәндәре хәҙерге көндә лә ҡәҙерләп кенә ҡуллана. Бәҙерниса инәйҙең ҡыҙы Рәйлә Таулыбаева ла әлеге көндә әсәһенең станогын йүнәтеп алып, балаҫтар һуға башланы. Бәҙекъямал инәйҙең ике килененән тыуған ейәнсәрҙәре Әлфиә Таһирова менән Миңһылыу Мырҙабаева 2016 йылда ҡартәсәләренең һөнәрен тергеҙеп, шулай уҡ турпыша һуғыуға тотона. Миңһылыу апай 40-тан ашыу турпыша, балаҫтарын һатып, аҡсаға әйләндергән. Ошо ғаиләнең килене Люциә апай Таһирова: "Минә турпыша һуғырға Әлфиә бикәсем өйрәтте. Вәзәм ауылы оҫтаһынан станок һатып алып, үҙем дә эшкә тотондом", - ти. Шулай итеп, Бәҙекъямал Таһированың ике ҡыҙын, киленен, ейәнсәрҙәрен бер быуаттан ашыу ваҡыт балаҫ, турпыша һуғыу кәсебен өҙмәй, быуындан-быуынға ялғаусылар тип әйтә алабыҙ һәм был апайҙар үҙҙәренең ҡыҙҙарына, килендәренә, ейәнсәрҙәренә лә оҫталыҡтарын өйрәтерҙәр, тигән ышаныста ҡалабыҙ.

Зилә СОЛТАНОВА-МОРАТОВА.
Йылайыр районы.

### Ер-һыу атамаларын өйрәнәләр

**Беҙ, Учалы ағинәйҙәре, башлаған һәр эшебеҙ, проектыбыҙ файҙалы һәм һөҙөмтәле булырға тейеш, тигән фекерҙәбеҙ. Ваҡыт үтә килә һәр башланғысыбыҙҙың дауамлы булып, йәшәп китеүен дә күрәбеҙ. Бына бер-ике йыл инде үҙебеҙ йәшәгән төбәктең топонимикаһын өйрәнеү өҫтөндә әүҙем генә эш алып барабыҙ. Әлеге ваҡытта егерменән ашыу ауылдың тирә-яғындағы ер-һыу атамаларының исемлеген, килеп сығыу тарихын тупланыҡ.**



Тыуған яҡ атамаларының серҙәрен сисеү, йылдар һәм хәтер ҡатламдары аҫтында ҡалған тарихты тергеҙеү үтә еңелдән дә түгел икән. Эш барышында шуға ла төшөндөк: байтаҡ ҡына атамалар бөгөн теге йәки был ваҡиға айҡанлы үҙгәреп тә киткән. Мәҫәлән, Ураҙ ауылы янында Ҡазый шишмәһе шуның бер миҫалы. Бөгөнгө исеменә ярашлы, шишмә буйында 1947 йылда Ҡазый бабай ауыл тимерлеге өсөн күмер һүндереп ятҡан. Ә бына халыҡтың тапҡыр аҡылын, йор телле булыуын сағылдырған бик матур тәү атамаһы - Тетрәүек икән. Саф һыуы терегәмөш бөртөктәре кеүек тетрәп сығып ятҡанғалыр, тапҡыр ғына итеп бер һүҙ менән ҡылыҡһырлаған да ҡуйған бабайҙарыбыҙ. Муса ауылы янында, Ояндар йылғаһының Рәҫтәккә ҡойған урынында, иҫеме есеменә тура ғына килеп торған, ауыл халҡы төрлө байрамдар үткәрергә яратҡан тағы бер урынды Хәсәнәт тип атағандар. "Хәсән" ғәрәп теленән "матур, яҡшы" тигәнгә тура килә. Китегаяҡ, Атуты атамалары телебеҙҙә ҡасандыр ҡулланылып та бөгөн онотола төшкән "аяҡ" һәм "утлау" һүҙҙәрен һаҡлай. Тәүгеһе сәй йә ҡымыҙ эсеү өсөн ҡулланылған һауытты, икенсеһе малдың үлән ашауын аңлата.

Илсе ауылы эргәһендәге Оло әгер һәм Кесе әгер тигән атамаларҙы урындағы халыҡ ике бер туған Егор исемле кешеләрҙең ер һатып алып, эшкәртеп, иген үҫтереү тарихы менән аңлата. Ә Рәшит ағай Шәкүров "Ерҙең тере тарихы" исемле китабында "әгер" һүҙе ҡабарып, күпереп ятҡан һаҙлыҡлы урынды билдәләү өсөн ҡулланылған, тигән аңлатма бирә. Моғайын, шулайҙыр. Сөнки шул ауыл тирәһендә Ҡәһәрмән юлы тип исемләнгән урын да ҡасандыр һаҙлыҡ булып, хәҙер кипкән, ҡороған. Ғөмүмән, был китаптан байтаҡ атамаларҙың мәғәнәһен табып була.

Һәр ауыл тирәһендә барымта-ҡарымта менән бәйле фажиғәле мөлдәрҙә үҙенә теркәп ҡалдырған урындар бар. Бына бер нисәүһе: Ҡаҙағорошҡан, Аҡса түбә, Ҡансыра, Ҡантүбә, Ҡалмаҡ

***✓ Энергияғыҙҙы бөгөнгә йүнәлтегеҙ. Бурыс - ул үткәндәр. Бурыс тураһында күп уйлайһығыҙ икән, күсөгөҙҙө үткәндәргә түгәһегеҙ. Көс һәм энергия бөгөнгө көндә яңы мөмкинлектәр өсөн ҡулланылһын.***

биле. Заманында ҡаҙаҡтар бик ҡаңғыртҡан беҙҙең халыҡты, тигән фекер тыуа ошо атамаларҙы өйрәнгәндән һуң.

Иң әсендергәне - килеп ултырған халыҡтың ер-һыу атамаларын үҙгәртеп, үҙ теленә яраҡлаштырыуы. Уральск ҡасабаһынан хаҡлы ялдағы уҡытыусы Динә Хатип ҡыҙы ошоға бәйле байтаҡ мәғлүмәт бирҙе: Бурантау - Школьная, Олотау - Маяҡ, Оҙонғыр - Бригадная, Туғыҙтүбә тауҙарының бер түбәһе - Заправочная. Миндәк янындағы Мүҙәкәне шулай уҡ Музыка ташы, Рафиҡ ауылы эргәһендәге Әғәстәткәне Малиновая гора тип исем ҡушып алған ошо тауға әберсә (ҡурай еләге) йыйырға килеүселәр. Ғайсин Шәүкәт Хәлит улы яҙғанса, Силәбе өлкәһенә килеп киткән ерҙәге Ҡырмыҫҡалы күлен урыҫ халҡы үҙенсә Москалы тип атай, имеш. Етмәһә, һүҙҙең этимологияһын да рус телле сығышлы тип иҫәпләйҙәр икән. Күл заманында һөлөккә бай булып, халҡыбыҙ уны үҙ ваҡытында дауалау маҡсатында ҡулланған.

Шулай уҡ Шәүкәт Хәлит улы мәғлүмәтенән Мулдаш ауылы тирәһендә Ирәмәл исемле өс йылғаның булыуын да белдек. "Ирәмәл тауына йылғаларҙың бәйләнеше юҡ, сөнки тауҙан йөҙәр км алыҫлыҡта аға улар. Беҙ ошо йылғаларҙа йөҙөп, балыҡ ҡармаҡлап үҫһәк тә, районың бар халҡы ла белеп бөтмәй уларҙы," - тип яҙа ул.

Тарихтың барыһы ла: халҡыбыҙҙың тормош-көнкүреше, кәсебе, шөғөлө, гөрләп торған йәйләү тормошо ла, барымта-ҡарымтаһы ла, батырҙары үткән данлы юлы ла, башҡорт ихтилалдары ла, ҡәһәрле аслығы ла, граждандар һуғышы ла теркәлгән атамаларҙа. Тел хазинаһы, тел байлығы ла - ошо атамаларҙа. Башҡортомдоң һиҙгерлеге, зиһене, аҡылы, тапҡырлығы, йорлоғо, үҙ еренә сикһеҙ һөйөүе лә сағылыш алған уларҙа. Шуға ла беҙҙең райондың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары ошо атамаларҙы йыйырға, өйрәнергә, йәш быуынға тапшырырға ең һыҙғанған да инде.

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,**
**Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

## Балалар тәрбиәһе менән булалар

**Ваҡыт - үҙе хөкөмдар, тигән ата - бабаларыбыҙ. Ысынлап та, шулай икәненә йәшәй-йәшәй инанабыҙ, булғандың ҡәҙерен юғалтҡас ҡына аңлай башлайбыҙ. Совет осоронда гөрләп торған ауылдар, завод, фабрикалар, бушлай белем биргән мәктәптәр, юғары уҡыу йорттары, мәҙәниәт усаҡтары, дауаханалар юҡҡа сыҡҡас, Тыуған илде һөйөү, намыҫ, ғәҙеллек, дуҫлыҡ, яуаплылыҡ, ярҙамсыллыҡ кеүек әхлаҡ ҡанундары осһоҙланғас, күпселек кеше күңелендә бушлыҡ тойҙо, йәшәү мәғәнәһенән яҙҙы.**



Бына ошондай буталсыҡ заманда, ҡиблаларыбыҙҙы айырмай башлағанда, милли асылыбыҙға ҡурҡыныс янағанда республикала "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһына нигеҙ һалынды ла инде. Тамырһыҙ ағас ҡороған кеүек, телен, тарихын, йолаларын юғалтҡан, батырҙарын, күренекле шәхестәрен онотҡан халыҡтың юҡҡа сығыу ихтималлығын аңлау был яуаплы бурысты үҙ иңенә алырға мәжбүр итте ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы. Ойошмалар Башҡортостанда ғына түгел, сиктәш өлкәләрҙә лә эшләй башланы: милли кейемдәр, биҙәүестәр, аш-һыу, юғалып барған халыҡ кәсептәре тергеҙелә, мәктәп балалары, йәштәр, ололар менән даими эш алып барыла, ағинәйҙәр бөтә өлкәләрҙә лә әүҙем ҡатнаша, хатта күп эштәрҙе башлап йөрөй.

Ғафури районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы үҙенең сафында 300-ҙән артыҡ ағзаны берләштерә. Киләсәгебеҙ бөгөнгө балалар, йәштәр ҡулында тигән аңлауҙы тәүге урынға сығарып, беҙ башлыса йәш быуын менән эшләүгә көйләнгәнбеҙ, тиергә була. Мәҫәлән, Мәндем ауылы ағинәйҙәре (етәкселәре Фәниә Йәнмырҙина) күптән түгел тәрбиә бишектән башлана, тигән ҡағиҙәне алға һөрөп, ҡоймаҡ, йыуасаларын бешереп, ҡаймаҡ, ҡоротон, бүләктәрен тотоп, үҙҙәренең изге теләктәрен еткерергә, яңы тыуған сабыйға тәүфиҡ, бәхет, әсәгә һаулыҡ-таҙалыҡ, атайға ныҡлыҡ, бәрәкәт теләргә тигән маҡсат менән бәпес ҡайтҡан өйгә юл тоттолар. Бәпес тыуғанда атҡара торған йолалар үтәлде, йыр-мөнәжәттәр башҡарылды. Башҡа ауылдарҙа ла ғаиләләрҙең был бәхетле мәле ағинәйҙәр иғтибарынан ситтә ҡалмай.

Яугилде ауылы ағинәйе Лилиә Миниязованың һөйләгәнен тыңлайыҡ:

- Беҙҙең ауыл ағинәйҙәренең дә төп эшмәкәрлеге - балалар менән эшләү. Төрлө йолалар атҡарыу, байрамдар үткәреү тураһында һөйләп тормайым. Балаларҙы төрлө ҡул эштәренә, кәсеп серҙәренә йәлеп итеү - бик матур тәжрибәбәбеҙ тип уйлайым. Ағинәйебеҙ Рәзилә Солтанморатова, оҫта тегенсе булараҡ, балаларҙы тегеү серҙәренә өйрәтә. Мәҫәлән, ҡорама, мендәр тыштары тектеләр. Улар теккән ҡурсаҡтар менән әкиәттәр ҙә сәхнәләштерҙек. Мин үҙем ҡашмау, маңлайса кеүек биҙәүестәр эшләргә, милли аш-һыу әҙерләргә өйрәттем. Ҡурмасты боронғо таш тирмәндә тартып, талҡан эшләп ашап та ҡараныҡ. Башҡа ауылдарҙа ла балалар һәм ағинәйҙәрҙең берҙәмлеге, аралашыуы матур традицияға әйләнә бара. Сәйетбабалар Разифа Ишембәтова етәкселегендә ғәрәп теленән дәрестәр бирә, нәсихәт, мөнәжәттәр өйрәтә, дини йөкмәткеле төрлө бәйгеләр ойоштора; Үзбәк ауылы ағинәйҙәре етәкселәре Минзилә Ғәлина менән балаларға милли биҙәүестәр эшләргә өйрәтә, ойоҡ-ойоҡбаштар бәйләйҙәр; имәндәштәр Рәмилә Мәхмүтова етәкселегендә мәктәптә байрам саралары ойошторалар, үҙҙәре һатып алған бүләктәрен тапшырып, балаларҙы ҡыуандыралар. Родина ауылынан ағинәй Фәүзиә Ҡотлогилдина "Ҡышҡы йәйғор" тип исемләнгән ижади бәйге ойоштороп, балаларҙа телгә, ижадҡа һөйөү тәрбиәләй, Красноусол ағинәйҙәре гимназияла эшләп килгән "Урал батыр" проекты сиктәрендә үткән бөтә тәрбиәүи сараларҙа ла әүҙем ҡатнаша. Иң мөһиме, милли кейемдәге ошо матур ағинәйҙәрҙе балалар көтөп ала, уларҙың һабаҡтарын бик теләп ҡабул итә.

**Рәмзиә МОНАСИПОВА,**
**Ғафури районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

## Тамбур ҡайыуын тергеҙҙеләр

**Тамбур менән ҡайыу республиканың төньяҡ-көнсығыш райондары ҡатын-ҡыҙҙарының борондан ҡалған шөғөлө. Ҡатын-ҡыҙҙар бөтә төр кейем теккәндә лә уның туҡымаһын кирге менән тарттырып, ырғаҡ энә менән ҡайығандар. Был шөғөлдөң исеме лә, кирге менән бәйләнгән, тигәнде аңлата, тиҙәр. "Кирге" француз телендә "тамбуран" тип атала икәнен дә beләбеҙ.**



Мәсетле районында был һөнәр юғалып барғандар исемлегендә ине. Бик һирәк ҡатын-ҡыҙҙар ғына ҡайыу менән булдылар. Ҡайыу булмағас, милли кейемдәребеҙҙең үҙенсәлеге лә юғалды, уларҙы бары тик сәхнәлә генә күрә инек. 2016 йылда ауылдарҙа Ағинәйҙәр ҡорҙары ойошторола башлағас, ул ойошма ағзалары ошо онотолған шөғөлгә тотоноуҙы тәүге бурыс итеп алды. Районда тамбур менән ҡайыусы ҡатын-ҡыҙҙар ҙа табылды. Танылған оҫталар-ағинәйҙәр Яңы Мишәр ауылынан Ратифа апай Ғарипова, Сажидә апай Хановалар тамбур менән ҡайыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрә башланы, был оҫталыҡты Әбдрәхим, Яуыш ауылы ағинәйҙәре иҫкә төшөрҙө. Шулай итеп, оҫта ағинәйҙәребеҙ ауылдан-ауылға йөрөп, тәжрибәләре менән уртаҡлашты. Әле райондың 12 ауылында Ағинәйҙәр ҡорҙары гөрләтеп эшләп килә. Улар бөтәһе лә тамбур менән ҡайыу серҙәрен үҙләштереп алды. Тамбурлы ҡайыу тергеҙелгәс, милли кейемдәребеҙ ҙә барлыҡҡа килде. Күптән онотолған ҡалпаҡтар, түшелдеректәр, һаҡалдырыҡтар кейгән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ аят аштарында, йыйындарҙа йыш күренә, уларға ятһынып ҡарауҙар юҡҡа сыҡты. Хәҙер инде был матурлыҡҡа йәштәрҙе лә йәлеп итә оло быуын ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ. Туҡбай ауылы ағинәйе Дамира Фәхрисламова, мәҫәлән, мәктәптә башланғыс класс уҡыусылары өсөн түңәрәк асып, бәләкәй ҡыҙҙар менән алъяпҡыс, ҡалпаҡтар ҡайый башланылар.

Ошо көндәрҙә Һөләймән ауылы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары (рәйесе Фәйрүзә Дусмөхәмәтова) "Алъяпҡысым - минең шәжәрәм" исемле мәртәбәле сара үткәрҙе. Унда Айып, Аҙанғол, Әбдрәхим, Яңы Мишәр, Ғүмәр, Дыуан-Мәсетле, Бурансы, Туҡбай, Йыланыш ауылдары ағинәйҙәре ҡатнашты. Сараның иң хәтерҙә ҡалған мәле - алъяпҡыстарҙа, күлдәктәрҙә төшөрөлгән биҙәктәрҙең нимәне аңлата икәненә яуап табыу булғандыр. Һөләймән ауылынан Розалия Йомағужина әйтеүенсә, был биҙәктәр шәжәрәне һынландыра. Унда өләсәйҙәр һәр ғаилә ағзаһының йондоҙлоғона ярашлы төҫтәр билдәләгән. Ҡатын-ҡыҙҙар - сәскәләр, ир-егеттәр тубырсыҡтар менән һынландырылған. Розалия Разаҡ ҡыҙы ҡайыу алымы менән алъяпҡысҡа шәжәрә эшләү ысулы буйынса оҫталыҡ дәресе лә күрһәтте, үҙенең шәжәрә биҙәктәре менән дә таныштырҙы. Балаҡатай районы Яңыбай ауылынан килгән Анфиса Мөхөтдинова ла үҙ нәҫеленең ун алты быуыны күрһәтелгән биҙәк-шәжәрәһен йыйылыусылар иғтибарына тәҡдим итте. Аптыраттты, һоҡландырҙы.

Шулай уҡ төньяҡ-көнсығыш комплексының милли кейемендә, тамбурлы ҡайыуҙа ниндәй хаталар булдырырға ярамағанлығы тураһында фекер алыштылар ағинәйҙәр. Эйе, асаһы серҙәре күп беҙҙең яҡтың тамбурлы ҡайыулы кейемдәрҙең, ул серҙәр бына шулай беҙҙең ағинәйҙәребеҙ тарафынан бөртөкләп асыла бара. Хаталар өҫтөндә эш дауам итә.

**Нәзирә ӘХКӘМОВА,**
**Мәсетле районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# АҠСА ҺӘМ ҒАИЛӘ

## Бурыстарҙан нисек ҡотолорға?

Бында төп ҡағиҙә: "50/50". Йәғни айлыҡ аҡсағыҙҙың яртыһын бурыс түләүгә тотонаһығыҙ, яртыһын һаҡлыҡҡа һалаһығыҙ. Ғөмүмән, бурыстарҙы бәләкәй өлөштәр менән түләргә килешегеҙ. Кредиттың да процент ставкаһы бәләкәй булһын. "Уу, былай булһа, бурыстарҙы ҡасан түләп бөтәм һуң?" - тиерһегеҙ. "Минең бурыстарҙан тиҙерәк ҡотолғом килә", - тиеүегеҙҙә лә хаҡлыҡ бар. Әммә тормошта барыһы ла ҡатмарлыраҡ шул, теләнем дә, ҡотолдом түгел. Беләһегеҙме, ни өсөн бөгөн күптәрҙең бурысы бар? Сөнки улар иҫке бурыстарын түләр өсөн яңыларын ала. Әйтәйек, юғары ставка менән кредитҡа фатир алдығыҙ, ти. Ә ремонт эшләргә аҡсағыҙ юҡ. Нимә эшләйһегеҙ - дөрөҫ, яңы кредит алаһығыҙ. Шунан бөтөнләй бурысҡа батаһығыҙ. Ә шул мәлдә кер йыуа торған машинағыҙ ватылһа? Дөрөҫ, кредитҡа булһа ла һатып алырға тура килә.

**Ә бурыстарҙы бәләкәй өлөштәр менән түләгәндә:**

- Артыҡ аҡсағыҙ күберәк ҡаласаҡ. Ул аҡсаға яңы юлдарын табып, аҡса эшләргә лә була, сөнки аҡса - ул һайлау мөмкинлеге. Ниндәйҙер аҡсаларҙың ҡулға ҡалыуы ғына һеҙҙе кредит тоҙағынан ҡотҡара аласаҡ.

- Бурыстар түгел, үҙегеҙҙе өҫтөн ҡуйығыҙ. Һеҙҙең бурыс түләрлек аҡсағыҙ бар, ошонан ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереп өйрәнегеҙ. Эшләр өсөн, тимәк, стимул бар.

- Түңәрәкте өҙәһегеҙ. Бәләкәй өлөштәр менән түләгәс, яңы кредит алырға мохтажлыҡ юҡ.

- Ошо рәүешле һеҙҙең үҙегеҙҙе аҡларлыҡ сәбәбегеҙ бар. "Бына ошо бурыстар булмаһа..." тимәгеҙ, "Мин аҡса менән дөрөҫ ҡулланам", тип әйтегеҙ.

- Энергияғыҙҙы бөгөнгә йүнәлтегеҙ. Бурыс - ул үткәндәр. Бурыс тураһында күп уйлайһығыҙ икән, көсөгөҙҙө үткәндәргә түгәһегеҙ. Көс һәм энергия бөгөнгө көндә яңы мөмкинлектәр өсөн ҡулланылһын. Ставка юғарыраҡ булған һайын, үткәндәрҙә оҙағыраҡ йәшәргә мәжбүрһегеҙ. Һеҙ түгел, ә бурыстарығыҙ талғын утта ҡайнаһын.

- Хыялланығыҙ. Күптәр бурыстар ҡоллоғонан сыҡмайынса, хыялланыуҙы ла онота.

- Иң мөһиме, үҙегеҙҙе бай тип уйлағыҙ. Быға ышанмаһағыҙ ҙа, уйлап ҡарағыҙ. Ошо тойғо һеҙҙе бөтөнләй икенсе кимәлгә алып сығасаҡ. Аҡса һеҙгә тартыла башлаясаҡ. Шуға ла кредиттарығыҙҙы бәләкәй өлөштәр менән түләү һеҙгә ошондай мөмкинлек бирә.

Шулай кредит килешеүҙәрен ентекле өйрәнегеҙ. Процентын түбәнәйтеү мөмкинлеге юҡмы икәнен тикшерегеҙ. Процент бәләкәй булған һайын, инфляция һеҙҙең файҙаға эшләй.

**Бодо ШЕФЕР.**



## 6 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20 Д/ф "Бомба. Наши в Лос-Аламосе". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.45 Д/ф "Кто взорвал "Северные потоки"?" Специальное расследование. [16+]
12.45, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Долгожданная премьера. "Тест на беременность". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45 Премьера. "На футболе с Денисом Казанским". [18+]
0.15 Д/с Премьера. "Век СССР". [16+]
1.35, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Вести. Местное время.
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.10 Т/с "Каменская-6". [16+]
3.50 Т/с "Личное дело". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Байыҡ" представляет… [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 14.45, 16.00, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Спортивная история. [12+]**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Операция Украина. Преступления без наказания". [16+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.15 Спектакль "Любовница. [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**

## 7 МАРТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Долгожданная премьера. "Тест на беременность". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45 Д/с Премьера. "Век СССР". [16+]
1.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Каменская-6". [16+]
3.50 Т/с "Личное дело". [12+]
4.39 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Надо знать. [12+]**
**11.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]**
**11.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Международному женскому дню.**
**14.00, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**14.20 Хоккей. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ. 1/4 финала восточной конференции. 4 матч.**
**17.00 Гора новостей. [6+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Елкән. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Спектакль "Хаджи эфэнди женится". [12+]**
**2.45 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

## 8 МАРТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.30 Х/ф "Гусарская баллада". [12+]
8.15 Х/ф "Весна на Заречной улице". Кино в цвете. [12+]
10.00 Новости.
10.15, 12.15 Х/ф "Служебный роман". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.35 Х/ф "Москва слезам не верит". [12+]
16.25 Х/ф "Красотка". [16+]
18.45 Премьера. "Две звезды. Отцы и дети". Праздничный выпуск. [12+]
21.00 "Время".
21.30 Т/с Долгожданная премьера. "Тест на беременность". [16+]
22.30 Премьера. Творческий вечер Алексея Рыбникова. "Через тернии к звездам". [12+]
0.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.05 Х/ф "Любовь нежданная нагрянет". [12+]
8.55, 11.30 Х/ф "Ирония судьбы, или С легким паром!" [12+]
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
13.15 О чём поют 8 марта.
14.50 Петросян и женщины. [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
23.00 Х/ф "Пара из будущего". [12+]
0.55 Х/ф "Женщины". [12+]
4.20 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "С праздником, милые женщины!" [12+]**
**8.00, 18.30, 22.30, 23.45 Новости (на баш. яз).**
**8.15 Автограф. [12+]**
**8.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**9.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**10.00 Бирешмә, йырла! [6+]**
**10.30 Гора новостей.**
**10.45 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Международному женскому дню. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.15 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Территория женского счастья. [6+]**
**17.45 Учим башкирский язык. [6+]**
**18.00 Ап-асыҡ. [12+]**
**19.00 Чаша жизни. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Бәхетнамә. [12+]**
**0.15 Спектакль "Женская сюита". [12+]**
**2.00 Чаша жизни. [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Тайм-аут. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 9 МАРТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.50 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20 Х/ф "Весна на Заречной улице". Кино в цвете. [12+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Долгожданная премьера. "Тест на беременность". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Каменская-6". [16+]
3.50 Т/с "Личное дело". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**10.45 Надо знать. [12+]**
**11.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Сулпылар. [0+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Финликбез. [12+]**
**17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.15 Спектакль "Вот так случилось..". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

## 10 МАРТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "ГОЛОС" весны в обновленном составе. [12+]
23.40 Х/ф Премьера. "Я создан для тебя". "Серебряный медведь" за лучшую женскую роль. [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.40 Торжественная церемония вручения Российской национальной музыкальной премии "Виктория".
1.30 Х/ф "Клуб обманутых жён". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 22.00, 6.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Слово Земли. 2.0. [12+]**
**12.45, 5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.15 Ҡурай даны. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 5.30 Автограф. [12+]**
**15.00 "АйТекә!" [6+]**
**15.15 "КультУра". [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Финликбез. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**19.00, 3.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры". [12+]**
**21.15 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00, 3.45 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**2.15 Алтын тирмә. [0+]**
**4.30 Бай. [12+]**

## 11 МАРТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "ПроУют". [0+]
11.10 Премьера. "Поехали!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.05 Т/с "По законам военного времени". [12+]
17.10 Праздничный концерт "Объяснение в любви". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Объяснение в любви". [12+]
19.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.50 Х/ф "Не все дома". [12+]
1.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.30, 20.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Т/с "Акушерка. Счастье на заказ". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Мама может". [12+]
0.35 Х/ф "Крёстная". [12+]
4.10 Х/ф "Услышь моё сердце". [16+]
5.51 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 Это моя профессия. [12+]**
**9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 МузКәрәҙ. [0+]**
**11.30 Байтус. [6+]**
**11.45 Семәр. [0+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт Залии Ганиатуллиной. [12+]**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 1.15 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Концерт Айгуль Сагинбаевой. [12+]**
**2.00 Спектакль "Пролетая над гнездом кукушки". [12+]**
**4.30 Тормош. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Мистический Башкортостан. [12+]**

## 12 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 23.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.05 Х/ф "Благословите женщину". [12+]
16.30 Д/с "Век СССР". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
22.35 Т/с Премьера. "Контейнер". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.55, 3.10 Х/ф "Пряники из картошки". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.30 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.35 Т/с "Акушерка. Счастье на заказ". [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Чего хотят мужчины".[16+]
4.59 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [0+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 Бай. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.45 "Дорога к храму". [0+]**
**16.15, 1.30 Историческая среда. [12+]**
**16.45 "Честно говоря". [12+]**
**17.30 Концерт Бибисары Азаматовой. [12+]**
**19.00 Әлләсе… [6+]**
**19.45 Патриот РФ. [12+]**
**20.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**20.30 Полезные новости. [12+]**
**20.45, 2.00 Спортивная история. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Спектакль "Звезда Героя". [12+]**
**0.15 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**0.45 Честно говоря. [12+]**
**2.30 Спектакль "Анфиса". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

## НАМАҪ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Март (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (14) дүшәмбе | 6:26 | 7:56 | 13:30 | 17:22 | 18:59 | 20:29 |
| 7 (15) шишәмбе | 6:24 | 7:54 | 13:30 | 17:24 | 19:01 | 20:31 |
| 8 (16) шаршамбы | 6:21 | 7:51 | 13:30 | 17:26 | 19:03 | 20:33 |
| 9 (17) кесе йома | 6:19 | 7:49 | 13:30 | 17:27 | 19:05 | 20:35 |
| 10 (18) йома | 6:16 | 7:46 | 13:30 | 17:29 | 19:07 | 20:37 |
| 11 (19) шәмбе | 6:14 | 7:44 | 13:30 | 17:30 | 19:09 | 20:39 |
| 12 (20) йәкшәмбе | 6:11 | 7:41 | 13:30 | 17:32 | 19:11 | 20:41 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Иң мөһиме, ҡыҙ бала үҙен түбән баһаламаһын. Яңылышып кейәүгә сығыу, яратмаған эштә бил бөгөү, күңел ҡушҡанды башҡара алмауҙың еп осо ошонда. Бәләкәй саҡтан уҡ үҙен яратылған, кәрәкле итеп тойһон.*



ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

# ҠЫҘ БАЛАҢ...

## яратыу тойоп үҫһен

**Ҡатын-ҡыҙҙы аңлап буламы инде, тигән була, ғәҙәттә, ир-егеттәр шаяртыу ҡатыш. Ә бөгөнгө замандың гүзәл заты үҙе үҙен аңлаймы һуң? Ниндәй беҙ, ниндәй уйҙар менән йәшәйбеҙ, нимә хаҡында хыялланабыҙ - байрам уңайынан ошондай һорауҙарға яуаптар эҙләп, журналист һәм психолог Гөлсинә ЙОСОПОВАға мөрәжәғәт иттек.**

**Күптәр һеҙҙе журналист һәм күп балалы әсәй тип беләләр. Ә психолог һөнәрен үҙләштереүгә нимә этәрҙе?**

- Ике һөнәр эйәһенә лә һүҙ менән имләү хас бит инде. Журналист булараҡ та кешеләрҙең күңел торошо, кәйефе, ниндәй уйҙар менән йәшәүе, ауырлыҡтарҙы нисек еңеүе, маҡсаттарына нисек өлгәшеүе хаҡында белергә тырыша инем. Шәхесте тәүҙә ябай кеше булараҡ асып, уның өлгөһө, әйткән һүҙҙәре башҡаларға ярҙам итһен, көс бирһен тигәнде тәүге урынға ҡуям.

Үҫмер саҡта әхирәттәр сер һөйләр, мин иғтибар менән тыңлап, берәй кәңәш бирер инем. Һинең менән һөйләшкәс, рәхәт булып ҡалды, тигәндәре аҙағыраҡ иҫкә төштө. Яҙыуҙан тыш, тағы нимәгә һәләтлемен икән тип уйлана башланым бер мәл. Шул саҡта психология тигән ҡыҙыҡлы донъяға инеп киттем. Ййлап үҙемдә булған белем менән бүлешеү, башҡаларға ла ярҙам итеү өсөн өлгөрөп еткәнемде аңланым. Кешеләр менән эшләүгә хоҡуҡ биргән курстарҙа уҡыным, клиник психология буйынса магистратура тамамланым. Һорауҙарыма яуап эҙләп, диндә лә ныҡлап өйрәндем. Әлбиттә, үҙ өҫтөмдә лә эшләнем. Элек һәр ваҡыт йәшенеп ҡалырға тырыша торғайным, мине күрмәһендәр, белмәһендәр - миңә шулай ҡулайлыраҡ булды нишләптер. Ҡатын-ҡыҙҙың төп бурысы - бала табыу, тәрбиәләү һәм өй ҡарау, ашарға бешереү, тип һананым. Был дөрөҫ түгел. Ҡатын-ҡыҙға ла үҫешергә, үҙенең һәләттәрен асырға, кешеләргә, йәмғиәткә файҙа килтерергә кәрәк. Ул ни бары әсәй һәм ир ҡатыны ролен үтәп кенә йәшәргә тейеш түгел.

**Бөгөнгө заман ҡатын-ҡыҙының күңел торошо ҡәнәғәтләндерәме һеҙҙе? Улар үҙҙәренә иғтибарлымы, ниндәй проблемалар менән мөрәжәғәт итәләр?**

- Бөгөнгө ҡатын-ҡыҙҙы иң борсоғаны - ире менән мөнәсәбәт. Ситтән ҡарағанда бәхетле, тырыш ғаилә, ләкин балалар хаҡына бер-береһен түҙеп йәшәргә мәжбүрҙәр. Күбеһе баштан уҡ яңылыш ниәт менән ғаилә ҡорған. Тиҙерәк атай-әсәй баҫымынан ҡотолайым, 30 тулмаҫ элек бала табып ҡалайым, алған кеше барҙа сығып өлгөрәйем, арыу егеттәр миңә ҡарамаҫ һ.б. Кемдер айырылған, яңғыҙлыҡ ғазабы кисерә. Лайыҡлы иш, донъя көтөрҙәй ир заты осрамай. Шулай уҡ эшен яратмаған ҡатындар йыш мөрәжәғәт итә. Нимә теләгәнемде лә белмәйем, үҙемде аңламайым, тиҙәр йыш ҡына. Энергия, дәрт, үҙеңә ышаныу юҡлыҡҡа зарланалар. Шулай уҡ, ҡыҙғаныҫҡа күрә, оҙайлы депрессия кисергән һылыуҙар ҙа бар.

Был проблемаларға илткән төп сәбәп - күңел тауышыңды ишетмәй йәшәү. Кеше эстән ирекле түгел. Уның рухы ситлектә, һәр ваҡыт башҡалар көткәнде аҡларға, яраҡлашырға, ярарға, тап килергә кәрәк. Уға йәмғиәт, башҡалар ҡуйған шаблондар буйынса йәшәргә тура килә, үҙенең теләгән ситкә ҡуя, ергә күмә. Статус йәки аҡса өсөн энергияһын һурған, яратмаған эшкә йөрөй, эске ҡурҡыуҙары арҡаһында тик башҡаларға уңай булырға тырыша.



Ә былай психологҡа проблемалар менән генә мөрәжәғәт итмәйҙәр. Кемдер яңы кимәлгә күтәрелергә, клиенттарын арттырып, ҙурыраҡ киңлектәргә сығыуҙа нимәләр ҡаршылыҡ булып тора - ошоларҙы асыҡлап, үҙгәрә башлау өсөн килә. Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ күңел торошо өҫтөндә эшләй икән, тимәк, үҙенә иғтибарлы, тип әйтер инем. Үҙ өҫтөндә эшләп, ул үҙенә генә түгел, балаларына, иренә лә ярҙам итә. Ҡатын бәхетле икән, өй балҡып торған һымаҡ, балалар ҙа шат, ир ҙә алға ынтылырға көс, илһам ала.

**Ни өсөн һуңғы ваҡытта тренингтар популяр? Ауыр хәлдән сығыу юлдарын тапмағандан барамы унда гүзәл зат, әллә бәхет эҙләпме?**

- Беренсенән, тренингтарға социаль селтәрҙәр аша реклама күп яһала. Һәр кем үҙен борсоған һорауға яуап табырға теләй, һәр кемдең бәхетле булғыһы килә. Ләкин бер кемде лә бер-ике сәғәт эсендә бәхетле итеп ултыртып ҡуйып булмай. Сөнки бәхетле булыу йә булмау үҙегеҙҙән генә тора. Ул бер кемгә лә бәйле түгел, башҡаларҙан тормай. Бәхет сығанағын үҙебеҙҙең эске донъянан табып өйрәнеү мөһим. Шуға ла тренингтарға йөрөргәме, юҡмы, үҙегеҙҙең ихтырҙа. Әммә кеше үҙенең шул ваҡыттағы кимәленә ярашлы ниндәй ҙә булһа яуап табыуы, ярҙам алыуы, нимәнелер аңлап ҡалыуы бик мөмкин. Кешеләрҙең аң кимәле төрлө, тренингтарҙың сифаты, белгестәр ҙә төрлө - быныһын да аңлап тораһығыҙҙыр. Кеше араһына сығып, аралашып ҡайтыу ҙа дауа улайға китһә.

**Борон өләсәй, әсәйҙәр күңел торошон нисек көйләп йәшәгән һуң, уларҙың да зарын түгеп, кәңәш алыр ере булдымы икән?**

- Күбеһе түҙеп, ут йотоп йәшәгән инде. Миңә килгән һәр икенсе ҡатын-ҡыҙ, атайым эсте, холҡо ҡаты булды, һуғышты, әсәй ҙә, беҙ балалар ҙа ҡурҡып йәшәнек, тип һөйләй. Үҙенә күрә ғәмәлдәре лә табылғандыр, әйтәйек, кем менендер һөйләшеп алыу, сер бүлешеү. Өләсәйҙәр йырлап, бер-береһе менән аралашып, бер-береһенә таяныс булып, күңелдәрен көйләгән. Ҡырға йыш сыҡҡан, урман, тәбиғәт күңелде имләй, тынысландыра бит. Унан һуң, эш, күмәк бала барҙа уйланып ултырырға ваҡыт та ҡалмағандыр.

Заманы ла башҡа булған, мәҫәлән, һуғыш ваҡытында бар уйҙары яҡындарына иҫәнлек теләүгә генә йүнәлтелгәндер. Үкенес, бөгөн дә тыныслыҡ юҡ, күптәрҙең ирҙәре тағы ут эсендә. Улар бикләнеп, үҙ эсенә йомолоп ҡалмаһын, яҡын әхирәтенә, әсәһенә, ышанған кешеләренә хәлен һөйләп, тойғолары менән бүлешһен, ҡағыҙға яҙып булһа ла, эсендәгеһен сығарһын, тип кәңәш итер инем. Ире өсөн доғалар ҡылһын, имен-һау ҡайтһын тип ысын күңелдән теләһен - һораған нәмә яуапһыҙ ҡалмай. "Аллам, ирем хаҡында Үҙең хәстәрлек күр", - тип көн дә әйт, күңелдән генә үҙен Уның иркенә тапшыр. Был һине тынысландырыр, барыһы ла яҡшы буласағына ышаныс уятыр. Көн дә уны күҙ алдына килтер, күңел йылыһы, мөхәббәт нурҙары уға барып етә, шулар ҙа һаҡлай, тип хис ит. Һуғыш тапшырыуҙарын ҡарама, уның энергияһына тоташма. Был кешене ҡурҡыуға һала, хәлен бөтөрә, тиктомалдан асыу килә башлай. Ә ҡатын-ҡыҙға тыныс хәл-торош мөһим. Ул яҡындарын яҡшы кәйефе, йылмайыуы, үҙен яҡшы тойоуы менән генә лә имләй, терәк-таяныс була ала. Ҡатын-ҡыҙға үҙенең хәле, кәйефе, һаулығы, күңел торошо өсөн хәстәрлек күреү ныҡ мөһим. Арыған, йонсоған, асыулы ҡатын башҡаларға ла тик ошо кире тойғоларҙы ғына тартып килтерә.

**Ҡыҙҙарыбыҙға нисек дөрөҫ тәрбиә бирергә һуң?**

- Иң мөһиме, ҡыҙ бала үҙен түбән баһаламаһын. Яңылышып кейәүгә сығыу, яратмаған эштә бил бөгөү, күңел ҡушҡанды башҡара алмауҙың еп осо ошонда. Бәләкәй саҡтан уҡ үҙен яратылған, кәрәкле итеп тойһон. Бының өсөн уға йылы һүҙҙәрҙе йәлләмәҫкә кәрәк. Хис-тойғоларын үҙендә йәшереп йөрөмәһен, әсәһенә серен, хәлен һөйләһен, йомолмаһын. Әрләп, баҫып, ғәйеп тойғолары уятып ҡуймайыҡ. Ғәйеп тойғоһо кешегә шул тиклем ныҡ ҡамасаулай тормошта. Ул үҙен яҡшы тормошҡа, матур мөнәсәбәттәргә лайыҡ итеп тойоп үҫһен. Яратыу тойоп үҫкән ҡыҙ бәхетле була.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Хәҙер элеккесә йәшәү мөмкин түгел. Һәр кемгә лә үҙгәрергә, үҫешергә кәрәк", - тигән фекерҙә ҡунағыбыҙ. Көн дә үҙеңде насар тояһың икән, кәйефең дә, хәлең дә булмаһа, асыуланып ҡына барһаң, эргә-тирәмдә алама кешеләр генә тип, уларға бер туҡтауһыҙ дәғүәләр белдерһәң, теләктәрең тормошҡа ашмаһа, ятаҡан кешең булмаһа - үҙ өҫтөңдә эшләй, рухи яҡтан үҫешә башларға кәрәк. Донъяны матурлыҡ, унан да бигерәк яҡшылыҡ ҡына ҡотҡара алыр, әммә, тәү сиратта, үҙебеҙҙе үҙгәртеүҙән башлайыҡ әле, әхирәттәр!**

**Ләйсән ВӘЛИЕВА**
**әңгәмәләште.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**7 март "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+
**8 март "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 18.00 12+
**9 март Премьера! "Ҡыҙыл паша"** (Н. Асанбаев). 14.00, 19.00 12+
**11 март "Әсмә"** (Р. Фәхретдинов, Ш. Шәкүрова инсц.). 18.00 12+
**12 март "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**7 март "Весна, цветы и комплименты!"** концерт. 16+
**8 март "Арба"** (Таңсулпан, Зөһрә Бураҡаевалар), әкиәт. 12.00 6+
**"Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 18.00 12+
**9 март "Аҡ яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айтматов), драма. 16+
**10 март "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00 6+
**11 март "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 12.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*
**11-12 март "Терем-теремок"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**10 март "От барокко до хабанеры"** концерт. 6+
**11 март "В ожидании чуда"**. Миңлеғәфүр Зәйнетдинов. 13.00 0+
**Алексей Шмитов** (Мәскәү, орган). 18.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**6,7 март Премьера! "Хазина"** (С. Әбүзәр), комедия. 12+
**10 март Премьера! "Дөрөҫлөк беҙҙең яҡта"** әҙәби-музыкаль лекторий. 13.00 6+
**11 март "Волшебная лампа Аладдина"** (Л. Нигмәтуллина инсц.), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**8 март "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 18.00 16+
**10 март "Эх, күгәрсенкәйҙәрем..."** (Ф. Бүләков), комедия. 12+
**11 март "Килдең, киттең - хуш, байғош..."** (М. Задорнов), лирик комедия. 18.00 12+
**12 март "Как Баба Яга Соловья-разбойника женила"** (Ю. Боганов), әкиәт. 12.00 0+
**"Нисек кейәүгә сығырға?.."** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 18.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**7 март "Мөхәббәтте ергә ҡарап түгел, Йондоҙҙарға ҡарап көткәнмен!"** театрлаштырылған концерт. 6+
**9 март** *Әбйәлил районы Красная Башкирия ауылында гастролдә:*
**"Приключения лесного эха"**, әкиәт. 11.00 0+
**"Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драма. 13.30 16+

### БР Милли музейы

**7 март "Әсәйгә открытка"** оҫталыҡ дәресе. 11.00, 16.00 0+
**8 март** Этно стилдә ҡатын-ҡыҙҙарҙы фотоға төшөрөү. 11.00
**"Туҡыусылыҡ"** оҫталыҡ дәресе. 12.00 12+
**"Музей мозаикаһы"** оҫталыҡ дәресе. 12.00, 14.00 6+
**"Ҡатын-ҡыҙҙар донъяһы"** тематик экскурсия. 13.00, 15.00 6+
**"Башҡортостан халыҡтарының ҡатын-ҡыҙҙар биҙәүестәре"** экскурсия. 14.00 6+
**11 март "Залдар буйлап музыкаль экскурсия"** край тарихы. 11.00, 15.30 6+
**"Халҡым моңо"** ҡурай буйынса оҫталыҡ дәресле сара. 13.00 6+
**12 март "Кинопоиск"** квест. 15.00 6+

*ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ*

# ЗӘЙНӘБ АПАЙҘЫ УҠЫЙҘАР

**Филология фәндәре кандидаты, Өфө университетының Стәрлетамаҡ филиалы башҡорт һәм төрки филологияһы факультеты деканы Рәйсә Хәким ҡыҙы ИЛИШЕВА менән бөйөк апайҙарыбыҙҙың береһе, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб апай Биишева ижады хаҡында, студент йәштәрҙең уны нисек ҡабул итеүе тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**



**Ошо көндәрҙә "VII Биишева уҡыуҙары" Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһын уҙғарып, әҙибәнең ижадына оло ихтирам күрһәтергә йыйынаһығыҙ. Бындай сараның әһәмиәте һәм зарурлығы нимәлә?**

- Биишева уҡыуҙары Стәрлетамаҡта 2009 йылдан алып уҙғарыла. Быйыл уны 7-се тапҡыр үткәрергә йыйынабыҙ. Беҙҙең уҡыу йортобоҙҙоң халыҡ яҙыусыһы исемен йөрөткән сағында башланған изге традиция ул. Уны дауам итеүҙә, З. Биишева ижады аша бөтә башҡорт әҙәбиәтен, мәҙәниәтен ҡәҙерләүҙе, халҡыбыҙ инанған әхлаҡи ҡиммәттәрҙе йәш быуынға еткереүҙе үҙебеҙҙең бурысыбыҙ тип һанайбыҙ. Уҡыу йортобоҙҙа эшләп торған З. Биишева музейында әҙәбиәт дәрестәре үтә. Фәнни-ғәмәли конференция сиктәрендә студенттарҙың һәм уҡыусыларҙың ғилми эштәре конкурсын уҙғарыу ҙа оло яҙыусыбыҙға хөрмәт билдәһе, уның ижадын популярлаштырыуға хеҙмәт итеүсе бер сара. З. Биишева ижадында уҡыу, рухи үсеш, камиллашыуҙы төп йәшәү маҡсаты тип алған шәхес алға ҡуйыла. Юғары уҡыу йорто, бигерәк тә уҡытыусылар әҙерләүсе уҡыу йорто студенттарҙы ошондай мөхиттә, гуманитар ҡиммәттәр яҡтылығында тәрбиәләргә тейеш. З. Биишева ижады беҙгә ҙур терәк.

**Халыҡ яҙыусыһының ҡайһы әҫәрҙәре йәштәрҙең иғтибарын үҙенә йәлеп итә?**

- 18-20 йәшлек студенттарҙы бөтә һорауҙар ҙа ҡыҙыҡтыралыр ул. Донъяға ҡарашы үҙалды ҡараштары һынығы ғына бит. Мәҫәлән, "Яҡтыға" трилогияһы улар өсөн ҡатмарлы ла, яҡын да. Берҙән, XX быуат табынған революцион идеалдар йәш быуын эстетикаһынан ситтәрәк ята. Ләкин коммунизм, тигеҙлек идеяларының совет дәүере менән генә сикләнмәгәнен, бәлки, донъяға ҡараш, философия булараҡ бөтә донъяла таралыу тапҡанын аңлау менән улар романдағы Октябрь революцияһы ваҡиғаларына киңерәк, кешелек цивилизацияһының үткән юлы булараҡ ҡарай башлай, трилогия "ғәзел йәмғиәт төҙөү юлдарын эҙләү" тарихын һүрәтләүсе ҡиммәтле сығанаҡҡа әйләнә. Унан килеп, романдағы персонаждарҙа йәштәр олатай-өләсәйҙәренә, күршеләренә оҡшаған күп һыҙаттарҙы таный: ең һыҙғанып донъя көткән Таибә әбей, йомшаҡ күңелле Байгилде ағай кеүек күптәр бар бит арала... Был да ҡыҙыҡ, З. Биишева әҫәрҙәре иҫ киткес мөхәббәт яҙмыштары менән дә мауыҡтырғыс. Ҡайһы берәүҙәр романды синыфтар көрәше аша түгел, ә тап ошо мөхәббәт сюжеттары менән хәтерендә ҡалдыра: "Хаммат менән Сәлимә бер-береһенә ғашиҡ булалар ҙа, ғаиләләрен ташлап, өйләнешәләр... Хисбулла Сәлимәгә тиң булмай бит ул... Бахыр Бибеште 14 йәшендә көсләп кейәүгә бирәләр... Сәлимә Хамматты сәнсеп үлтерә, үҙе лә батып үлә. Меҫкен Гөлйыһан Закирҙы әҙәләп һөйә, атаһы уларҙың бергә булыуҙарына риза булмаһағын аңлаһа ла..." З. Биишеваның "Яҡтыға" трилогияһынан һәр ҡатлам уҡыусыһы үҙенә ниндәй йөкмәтке оҡшай, шуны таба. Һәр бер автор үҙ китабына шундай яҙмышты теләр ине - тап ошо сифаты әҫәрҙе көслө итә, тормош энциклопедияһына әйләндерә.

Йәштәргә яңылышҡан, хаталанған, әммә үҙ юлын тапҡан образдар ҙа оҡшай. Идеалдан алыҫ, реаль тормошҡа яҡынлығы арҡаһында шулай үҙ итәләрҙер, бәлки. "Сәйер кеше" повесында, мәҫәлән, уларға "үҙ аҡсаһын ай һайын етемдәр йортона тапшырыусы ғәҙел депутат" Ғәҙел Ҡоросбаевҡа ҡарағанда, тормош һынауҙарына һынмаған Гөлбикә образы яҡынраҡ һымаҡ. "Уйҙар, уйҙар" повесынан Суфияның етеш йәшәгән ата-әсәһенән ҡасып тигәндәй завод ятағына китеп, цехта эш башлағаны, йәшлек хаталарын төҙәтергә үҙендә көс тапҡаны, мөхәббәте өсөн көрәше яҡлау таба. Уҡыйҙар З. Биишеваны, уның китаптары саңланып ятмай.

**Һеҙ З. Биишева менән яҡташтар ҙа. Уның ҡатын-ҡыҙ булараҡ, ниндәй сифаттары һеҙҙә һоҡланыу уята?**

- З. Биишеваның тыуған ауылы беҙҙең ауылдан ете саҡрымда ята. Минең әсәйем шул ауылдан ине. Туйымбәт ауылы кешеләренең һәр береһен тигәндәй бәләкәйҙән танып-белеп үҫтем. Ҡыйыу, ғәҙел һүҙен тура әйтеү, хаҡлыҡ өсөн тәүәккәллек күрһәтергә һәләтле халыҡ йәшәй унда. З. Биишеваның үткер телле, тура һүҙле булыуының тамырҙары шунда, халыҡта. Кескәй генә ауыл да бит үҙе бер йәмғиәт. Кешенең төрлөһө бар. Мәҫәлән, түбән һәм үрге остар, һәр бер өй ҡолаҡ һалһын өсөн, ауылда ниндәй кеше булырға кәрәк, етмәһә, ҡатын-ҡыҙ затынан булһаң? Һинең ҡулыңда һүҙҙән башҡа ҡорал, власың булмаған хәлдә? Ә барса халыҡтың зиһененә һеңдерерлек һүҙ әйтер өсөн? Тәбиғи һәләттән тыш, үҙ-үҙеңә, хаҡлығыңа ышаныу ҙа кәрәк. Стереотиптар, тормошҡа тура килмәгән ҡанундар ҡоло булмау, азат шәхес булыу кәрәк. Көслө, ҡорос ихтыярға эйә ҡатын-ҡыҙ ул Зәйнәб Биишева. Һәр ваҡытта ла үҙ-үҙе булып ҡала алғанына һоҡланам.

**Һорауҙарҙы**
**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**бирҙе.**

*АФАРИН!*

## ҠУЛ ЭШЕНӘ ӨЙРӘН!



**Белорет районының Тимер юл ауылында хәҙер "Башҡорт мәҙәниәте йорто" этномузейы бар. Уны урындағы ҡатын-ҡыҙҙар, "Агинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары асҡан.**

Район хакимиәте башлығы Андрей Иванюта хәбәр итеүенсә, улар экспозиция эшләү тураһында күптән хыялланған. Ошо тәҡдим менән ауыл советы башлығына мөрәжәғәт иткәндәр, еткәсе башланғысты хуплаған һәм бина бүлгән. Экспонаттар туплауҙа ауылдаштары ярҙам иткән.

Шул рәүешле Тимер юл ауылында башҡорт мәҙәниәте һәм тарихы мөйөшө барлыҡҡа килгән. Бында башҡорттарҙың көнкүреше менән танышыуҙан тыш, сигеү, йөн иләү йәки бәйләү буйынса үҙенден оҫталығынды һынап ҡарарға ла мөмкин. Музейҙа уҡыусылар өсөн экскурсиялар, ҡул эштәре буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрергә, тигән уй менән йәшәйҙәр. Бында байрамдарҙа, йолаларҙа, уйындарҙа ла ҡатнашырға мөмкин.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БЕР КҮРГӘН - БЕЛЕШ,

### ике күргән - таныш

Үҙ малын аҙһынған, кеше малын күпһенгән үҙ малына эйә булмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Яҡшы итеп иҫәпләгән яҡшы һөҙөмтәгә өлгәшә.

**(Еврипид).**

Тормош шулай ҡоролған: хаҡ юл тәүҙә дөрөҫ булмаған юл һымаҡ тойола. Был беҙҙең ышанысты һынау өсөн һәйбәт.

**(Джон Апдайк).**

Әгәр ҙә ҡатының һиңә: "У-ух, мөғөҙлө шайтан!" тип әйтә икән, шайтан тураһында түгел, ә мөгөҙ тураһында уйла.

**(Станислав Лец).**

Мөхәббәтме? Ул бер ҡатын-ҡыҙ икенсеһенән айырыла, тигән хаталаныуға нигеҙләнгән.

**(Генри Менкен).**

Хатта сәнғәт әҫәренең камиллығы ла уның кимәлен билдәләмәй, сөнки һәр кимәлдең үҙ камиллығы..

**(Григорий Ландау).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер үк ҡоҙоҡтан алып, бер нисә кеше үҙ ауылдарына һыу ташый. Һыуҙы өләшеп алырға килеүселәр һәр тапҡыр һауыттарын йыуырға онота һәм кемененҙер һауыты емеш һутлы, кемененҙер балыҡлы, ә кемененҙер һөтлө була. Билдәле, һауытына ҡарап, һыу ҙа төрлө тәмлегә әйләнә. Һыу ташыусылар, һауытығыҙ таҙа булырға тейеш, тип иҫкәртә иҫкәртеүгә, ләкин уларҙың һүҙҙәренә берәү ҙә иғтибар итмәй. Шуға ла улар һыуҙы бысраҡ һауыттарға тултырырға мәжбүр була. Ә ауыл кешеләре тәүҙән үк уларҙың һыуы шундай тәмдә булған тип ҡабул итә.**

**Бер саҡ бер ауыл кешеләре икенсе ауылдыҡылар менән осраша һәм уларға килтерелгән һыуҙың тәме, үҙенсәлектәре тураһындағы фекере менән уртаҡлаша башлай. Шундай һығымта яһала: уларға килтерелгән һыу төрлө, тимәк, улар төрлө ҡоҙоҡтарҙан алына. Шунан ике ауыл кешеләре бер-береһенә, минең һыуым иң яҡшыһы, минең һыуымдың ғына иң саф тип аталырға хаҡы бар, тип иҫбат итергә тотона. Ошо арҡала улар оло бәхәскә инә һәм бер-береһен дошман тип иҫәпләй башлай. Үҙҙәренең томаналығы арҡаһында улар һыуҙы түгел, ә һыуға үҙҙәре үк биргән тәмде баһалауҙарын аңламай... Ә бит фән һәм дин менән дә шундайыраҡ мөнәсәбәттә кеше".**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
3 март 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.



«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3267
Заказ - 283